*Үҙең йәшәгән заманға зарланыу, властағыларҙы тәнҡитләү, үткәндәрҙе һағынып илау, киләсәккә тормошҡа ашмаҫтай хыялдар бағлау - был беҙ түгелме?*

*(Э. Берк).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21 - 27 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№34 (400)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Бөтә яңылыҡ - яҡшы онотолған иҫкелек ул...**

"Полиция тураһында" закон проекты халыҡ иғтибарына сығарылды



3

**Атайҙың өлгөһөндә...**



6

**Әсәйҙең наҙында...**



7

**Ҡыйыулыҡ шәп тә ул,**

тик ул маһирлыҡты уҙҙырып ебәрмәһен



12-13

14 ТВ-программа





Республиканың башҡорт телендәге матбуғат баҫмалары сафын арттырып, шулай уҡ уларҙы йөкмәткe яғынан тулыландырып, рухиәт һәм мәғлүмәт менән байытып, бынан һигеҙ йыл элек барлыҡҡа килгәйне "Киске Өфө" тигән аҙналыҡ гәзит. Бына һеҙҙең ҡулда уның 400-сө һаны. Тулҡынланып та, ҡыуаныстар йотоп та тапшырабыҙ уны һеҙҙең хөкөмгә. Был һанда үткән йылдарҙа баҫылған ҡайһы бер сығыштарға байҡау яһарбыҙ. Гәзитебеҙҙе элек уҡымағандар ул сығыштарҙа тәрбиә буйынса аҡыллы һабаҡтарға юлығып ҡыуаныр, элек уҡығандар иһә был һабаҡтарҙы тағы бер күҙҙән үткәрер. Ҡабатлағандан доға яңыра ғына, тиҙәр.

(Дауамы 2-се биттә).

**✓ Уҡыусыбыҙҙың күңел һауыты беҙҙең баҫманы уҡып, кешемен тигән кеше кисерергә тейешле бар тойғолар, үҙләштереү зарур булған күп сифаттар менән тулыланған.**



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҠОҘҒОН ҠОРҠОЛДАЙ ТОРҺОН...

## ә беҙ туған телде күтәрәйек

**Июнь башында Башҡортостан Республикаһы Прокуратураһы республика Мәғариф министрлығының "2010 - 2011 уҡыу йылына Башҡортостан Республикаһы мәғариф учреждениелары өсөн базис уҡыу планы һәм яҡынса уҡыу планын раҫлау тураһында" бойороғоноң айырым положениеларына протест белдерҙе. Был хаҡтағы хәбәр интернет сайттары форумдарында сираттағы имеш-мимешкә сәбәп булды. Емтек эҙләүсе ҡоҙғондар иһә, яңы Президент башҡорт телен уҡытыуға сик ҡуясаҡ, тип ҡорҡолданы. Билдәле, был, тотош республика халҡы шундай фекерҙе яҡлай һәм ул хәбәргә ҡыуана, тигәнде аңлатмай. Үҙен кәмһетелгән, ситләтелгән, ҡорбан тип хис иткән кешеләрҙең сираттағы экстазы ғына булды был. Сөнки уңышлы, үҙ-үҙенә ышанған кешеләр бер ваҡытта ла теге йәки был милләткә, уның теленә асыу тотмай, негатив фекер йөрөтмәй. Уларҙың быға ваҡыты ла юҡ.**

Ә баяғы хәбәр буйынса ысыны шул. БР Прокурорының өлкән ярҙамсыһы Лариса Кучинаның әлеге протест айҡанлы аңлатмаһында былай тиелә: "Башҡортостан Республикаһының тәҡдим иткән пландарында федераль, төбәк компоненты һәм мәктәп (мәғариф учреждениеһы) компонентының нисбәте боҙолған. Төбәк компонентын мәктәп компоненты иҫәбенә өйрәнеү күҙаллана. Базис уҡыу планында 2010 йылдың 1 ғинуарынан ғәмәлдә булған башланғыс дөйөм белем биреүҙең федераль дәүләт стандарты талаптары иҫәпкә алынмаған.Төбәк компоненты һәм мәктәп компоненты сәғәттәрен федераль компонент предметтарын тәрәнерәк өйрәнеү, яңы предметтар, факультативтар, өҫтәмә махсус курстар һәм практикумдар индереү, индивидуаль һәм төркөм күнекмәләре үткәреү, лабораторияларҙа, китапханаларҙа, музейҙарҙа үҙ аллы эш өсөн файҙаланырға мөмкин. РФ Мәғариф министрлығының бойороғона ярашлы, базис уҡыу планында федераль компонентҡа дөйөм норматив ваҡыттың 75 проценттан кәм булмаған өлөшө бирелә. Төбәк компоненты - 10, мәктәп компоненты 10 проценттан да кәм булырға тейеш түгел".

Башҡортостан Республикаһы Прокуроры Сергей Хуртин "Башинформ" агентлығына биргән интервьюһында ла был хаҡта әйтеп үтә: "Ғәмәлдә, мәсьәлә рус телен һәм башҡа милли телдәрҙе өйрәнеүҙең нисбәтенә ҡайтып ҡала. Мин шуны әйтә алам: Башҡортостан Конституцияһы менән ҡаралған һәм дәүләт телдәре булып торған телдәр өйрәнелергә тейеш. Был федераль законда ла сағылыш тапҡан. РФ Конституция судының ошо мәсьәлә буйынса махсус ҡарары ла бар. Тимәк, башҡорт теле өйрәнелергә тейеш, тик башҡа предметтар иҫәбенә түгел", - тип белдерҙе.

Шулай итеп, башҡорт телен өйрәнеүҙе, башҡорт теле дәрестәрен уҡытыуҙы бер кем тыймай (һүҙ төбәк компоненты тураһында түгел). Прокурорҙың һуңғы иҫкәрмәһе буйынса, моғайын, мәғариф учреждениелары етәкселәре менән уртаҡ фекергә киленер. Һәр хәлдә, республикала башҡорт теле дәүләт теле булараҡ та уҡытыласаҡ. Эйе, был өлкәлә хәл ителәһе мәсьәләләр барлығын беләбеҙ. Кадрҙар буйынса ла, дәреслектәр буйынса ла дәғүәләр етерлек. Нисек кенә булмаһын, ата-әсә балаһына башҡорт телен уҡытырға үҙе теләп, ашҡынып торорлоҡ булырға тейеш.

**Ә милләтебеҙгә һәм телебеҙгә ясин сығырға әҙер торған, хатта Президентыбыҙ Рөстәм Хәмитовтың интернеттағы блогына ошо хаҡта һис тартыныуһыҙ яҙышҡан әҙәмдәр - улар бармаҡ менән һанарлыҡ. Ундайҙар артында кемдәр торғаны ла билдәле. Әйткәндәй, шуларҙың бер төркөмөнә - экстремистик сығыштары менән билдәле Швецовтарға тағы ла енәйәт эше ҡуҙғатылған. Был хаҡта 15-се биттәге материалда уҡығыҙ.**

**Зәйтүнә САЛАУАТОВА.**

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# КҮҢЕЛ ИМАНЫ,

## күңел күрке булыу - ынтылышыбыҙ

**Әйткәндәй, гәзитебеҙҙең 400 һанын да ҡалдырмай уҡыусылар ҙа барҙыр арағыҙҙа. Уларҙан, әлбиттә, хат алыу күңелле ваҡиға булыр ине беҙгә. Кем-кем, улар беҙҙең баҫманың маҡсатын, йүнәлешен һәм уның нисек ғәмәлгә ашырыла икәнен яҡшы күҙаллай булыр.**

Бына шундай тоғро уҡыусыларыбыҙҙың береһе - Баймаҡ районы Ғәҙелбай ауылынан Хөснә Рыҫбаеваның хатын тәҡдим итәбеҙ һеҙҙең иғтибарға: "Күңелдә тыуған шатлыҡтар, шулай уҡ борсоған һорауҙар менән дә ихлас уртаҡлашыр дуҫым, "Киске Өфө"м менән бәхетле мин. Гәзиттәге һәр мәҡәлә мәғлүмәт тә бирә, холоҡ-фиғелеңде лә тәрбиәләй, ә иң мөһиме - йөрәккә үтеп инә. "Киске Өфө" шәхсән минең өсөн - күңелем аҡылы, күңелем көҙгөһө, күңелем яҙҙары, күңелем нурҙары, күңелем йырҙары, күңелем тулыуҙары, күңелем теләктәре, күңелем һиллектәре, күңелем һөйөнөстәре, күңелем ашҡыныуҙары, күңелем йыуаныстары, күңелем тулҡынланыуҙары, күңелем ораны, күңелем фекере, күңелем өлгөһө, күңелем фәһеме, күңелем ҡәлебе, күңелем фарманы, күңелем мәғәнәһе, күңелем танһыҡтары, күңелем ҡиблаһы, күңелем ҡояшы, күңелем өмөттәре, күңелем хәтирәләре, күңелем һағыштары, күңелем сәмдәре, күңелем ғәмдәре, күңелем ырыҫ-ҡото, күңелем намыҫы, күңелем выждfestany, күңелем ғорурлығы, күңелем сабырлығы, күңелем даръяһы, күңелем ғәйрәте, күңелем бураны, күңелем дарманы, күңелем дәрте, күңелем иманы, күңелем рәхмәте, күңелем сауабы, күңелем күрке.

Күңелемдең, йөрәгемдең халҡым ғәме, халҡым аҡылы менән бәйләнештә булыуына өлгәштергән "Киске Өфө"гә оло рәхмәтемде белдереп ҡалам, коллективҡа ижад ҡомары теләйем".

Күп нәмә әйтелгән кеүек ошо ихласлыҡ менән һуғарылған хат юлдарында. Һәр хәлдә, уҡыусыбыҙҙың күңел һауыты беҙҙең баҫманы уҡып, кешемен тигән кеше кисерергә тейешле бар тойғолар, үҙләштереү зарур булған күп сифаттар менән тулыланған. Беҙ, "Киске Өфө" журналистары, үҙебеҙҙең ижадыбыҙ, йөрәк һүҙебеҙ, бөртөкләп йыйылған фекерҙәребеҙ менән уҡыусыларыбыҙ күңелендә тап ошондай шандауҙар һәм бөтөнлөк булдырырға ынтылабыҙ ҙа инде. Быға башҡа берәүҙе лә ҡабатламаған, оригиналь, ҡыҙыҡлы рубрикаларыбыҙ булышлыҡ итә. "Диалог" форматында алып барылған рубрикаларыбыҙ аша, мәҫәлән, ошо һиғеҙ йыл эсендә уҡыусыларыбыҙ, геройҙарыбыҙ, шәхестәребеҙ күңеленән күпме аҫыл фекер, аҡыл, тормош тәжрибәһе тиреп, башҡалар күңеленә күсерә алғанбыҙ! Был һанда "Ғаилә ҡоро" рубрикаһындағы диалогтарға бер аҙ байҡау яһайбыҙ бына - күпме тәрбиә өлгөһө уларҙа! Уҡымай ҡалмағыҙ, йәме!

Күңел һауыты, тигәндән. Шулай уҡ беҙҙең гәзит биттәрендә һеҙ яратып уҡыған "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһында баҫылған бер риүәйәтте иҫкә төшөрөп китәйек әле: "Фәлсәфә профессоры аудитория алдында тороп, биш литрлы һауыт ала һәм уны өс сантиметрҙан бәләкәй булмаған таштар менән тултыра. Һуңынан студенттарҙан һорай: "Һауыт тулымы?" "Тулы", - тип яуап бирә йәштәр.

Профессор шул уҡ һауытҡа борсаҡ һала. Борсаҡ таштар араһындағы бушлыҡты тултыра. Һуңынан һорай: "Һауыт тулымы?" "Тулы", - тип яуаплай тағы ла йәштәр.

Профессор ҙур йәшник алып, эсендәге ҡомдо һауытҡа түңкәрә. Әлбиттә, ҡом бушлыҡты бөтөнләй ябып ҡуя. Тағы шул уҡ һорау яңғырай: "Һауыт тулымы?" "Тулы, хәҙер инде туп-тулы", - тип яуап бирә йәштәр.

Шунан профессор өҫтәл аҫтынан һыу ала ла, уны һауытҡа ағыҙа.

- Ә хәҙер минең шуны аңлатҡым килә, - тип дауам итә профессор. - Һауыт - ул һеҙҙең ғүмерегеҙ. Таштар - ғүмерегеҙҙең иң ҡиммәтле, кәрәкле нәмәләре: ғаилә, сәләмәтлек, дуҫтар, балалар - бөтә нәмәне юғалтҡан хәлдә лә, был "таштар" һеҙҙең тормошто барыбер тулы итеп торасаҡ. Борсаҡ - ул бары тик үҙең өсөн генә ҡиммәткә эйә булған нәмәләр: эш, өй, машина. Ҡом - ул ваҡ-төйәк әйберҙәр.

Әгәр ҙә һауытты тәүҙән үк ҡом менән тултырһаң, таш, борсаҡтар өсөн урын ҡалмаясаҡ. Тимәк, ваҡ-төйәккә ваҡытты әрәм итһәң, мөһим әйберҙәр өсөн урын булмаясаҡ. Бәхет килтергән нәмәләр менән шөғөлләнегеҙ: балалар менән уйнау, тормош иптәшең менән ваҡыт үткәреү, дуҫтар менән осрашыуҙар - барыһы ла ысын бәхет сығанаҡтары. Эшләү, өй йыйыштырыу, машина йүнәтеү, йыуыу өсөн гел ваҡыт табыласаҡ. Иң элек таштарҙы хәстәрләгеҙ, мөһим нимәләрҙе уйлағыҙ, ҡалғандары бары тик ҡом ғына ул.

Шул ваҡыт бер студент:" Ә һыуҙың бында ни ҡыҫылышы бар? тип һорай. "Бик шәп һорау, - тип яуаплай профессор.- Ни өсөн һауытты һыу менән тултырҙым һуң? Һауыт тулы булһа ла, һыу өсөн урын етте. Тимәк, ғүмерегеҙ нисек кенә тулы булмаһын, ялҡаулыҡ өсөн дә урын табылыр..."

Бына шулай, хөрмәтле милләттәштәребеҙ, "Киске Өфө"бөҙҙө уҡып, ундағы фәһемле һүҙҙәр менән күңел һауыттарығыҙҙы тултырып, матур йәшәү өлгөләренә эйәреп, һыналған тәжрибәләргә эйәреп, тормоштоң ваҡ-төйәктәренә иғтибар итмәйенсә алға, маҡсатыңа табан ынтылып, юғарыға ҡарап фекер итеп, булғанына шөкөр итеп йәшәгәндә... отасаҡһығыҙ!

**Һәм, әлбиттә, "Киске Өфө"гә яҙылырға онотмағыҙ, тип тә иҫкәртеп ҡуябыҙ. Әле бына 2011 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу башланып тора. Сентябргә тиклем хаҡтар элеккесә әле, шунан ул бер аҙ үҙгәрер. Шуға, сентябргә ҡалмай яҙылып ҡуйығыҙ. Яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы бүләктәр отошонда ҡатнашыу өсөн редакцияға ебәрегеҙ. Йылдағыса, матур бүләктәр һәм 2011 йылға "Дини календарь" отторасаҡбыҙ. Гәзиткә үҙегеҙ генә яҙылып ҡалмай, дуҫтарығыҙ һәм туғандарығыҙҙы ла яҙҙырығыҙ. Шуны иҫтән сығармағыҙ: үҙеңдең башҡортлоғоң өсөн бер аҙ ғына иғәнә өлөшө итеп ҡарарға кәрәк телеңә, милләтеңә мөнәсәбәте булған нәмәләргә, шул уҡ туған телдәге баҫмаларға, китаптарға аҡса түгеүҙе. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!**



**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә "Берҙәм Рәсәй" партияһы инициативаһы менән "Модернизациялауҙың төбәк аспекттары: яңы кешеләр, яңы ҡарарҙар" тигән кадрҙар форумы булып үтте. Форумдың пленар өлөшөндә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов, "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк политсоветы секретары, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев, "Берҙәм Рәсәй"ҙең Волга буйы төбәк-ара координация советы етәксеһе Игорь Руденский ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Пленар ултырыштан һуң форумда ҡатнашыусылар биш секцияға бүленеп эшләне. "Берҙәм Рәсәй"ҙең кадрҙар резервы менән эште әүҙемләштереүгә йүнәлтелгән бындай форум Рәсәйҙә тәүге тапҡыр үткәрелә.

✓БР прокуроры Сергей Хуртин журналистар менән осрашты. Билдәләнеүенсә, йыл башынан алып республикала енәйәтселек 7,3 тапҡырға кәмегән. Коррупция менән бәйле 976 енәйәт тикшерелгән. Халыҡты борсоған һорауҙарҙың береһе - төҙөлөш объекттарының ваҡытында тапшырылмауы. Республикала 21 проблемалы төҙөлөш ойошмаһы бар. 13-ө - баш ҡалала. Ваҡытында тапшырылмаған төҙөлөш объекттарына 2300 аҡса һалыусынан йыйылған сумма 3 млрд һум тәшкил итә.

✓4-5 сентябрҙә Башҡорт дәүләт аграр университеттың мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда башҡорт балы һатыу буйынса махсус күргәҙмә-йәрминкә ойоштороласаҡ. Ҡатнашыусылар араһында әүҙемлек, тауар сифаты, һатыу нөктәһен йыһазландырыу буйынса бәйгеләр ойошторыласаҡ, еңеүселәр Өфө ҡала округының Совет районы хакимиәтенең дипломдары һәм ҡиммәтле бүләктәре менән бүләкләнәсәк.

✓Өфө ҡала округы Советы ҡарарына ярашлы, 1 сентябрҙән уҡыусы балалар өсөн электр транспортында электрон пластик карта менән йөрөү 2 һумға ғына төшәсәк. Мәктәп уҡыусыһы өсөн карталар 20 августан һатыла башлай. Уны алыу өсөн 3x4 размерлы фото, уҡыу йортонан белешмә кәрәк.

✓Өфө ҡала округының Киров районы хакимиәте башлығы итеп быға тиклем БР йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры урынбаҫары булып эшләгән Салауат Тәлғәт улы Сәғитов тәғәйенләнде.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# БӨТӘ ЯҢЫЛЫҠ - ЯҠШЫ ОНОТОЛҒАН ИҪКЕЛЕК УЛ...

## "Полиция тураһында" закон проекты халыҡ иғтибарына сығарылды

**"Полиция" һүҙе француз теленә боронғо грек теленән ингән һәм дәүләт, ҡала, тигәнде аңлата. Хәҙер инде ул йәмәғәт тәртибен һаҡлау буйынса дәүләт хеҙмәте һәм органы системаһы тигән мәғәнәлә йөрөй.**

"Рәсәйҙе аҡыл менән аңлап булмай", тип яҙған ҡасандыр шағир. Уның был һүҙҙәренең һаман да актуаль икәнлегенә инанаһың. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, бөтә нәмәне үҙгәртеп бөттөк, шикелле. Тик нигеҙ үҙгәрмәгәс, ҡорған нәмәбеҙ барыбер элеккесә килә лә сыға, ҡәһәрең. Унда ла аптырамайбыҙ, аҡыллы ағайҙарҙың мираҫ итеп әйтеп ҡалдырған, хәҙер инде афоризмға әүерелгән: "Яҡшыраҡ булыуын теләгәйнек, һәр ваҡыттағыса килеп сыҡты", - тигән һүҙҙәрен ҡабатлап, ҡулдарҙы янъяҡҡа йәйеп тик торабыҙ. Бына әле лә етәкселектең фатихаһы менән милицияны полицияға әйләндерергә маташып йөрөгән көн. Юҡһа, ябай халыҡтың хоҡуҡ һаҡсыларын "мент" тип атауына йәне көйә икән ҙур ағайҙарҙың. Ә был һүҙҙең беҙҙең өсөн ни тиклем ҡәҙерле икәнен улар уйлап та ҡарамай. Ана бит, шағир Салауат Әбүзәр, беҙ "мент"тарһыҙ йәшәй алмайбыҙ, улар беҙҙең тарих, тип тә аңлатып ҡараны, юҡ инде, аңламанылар. "МЕНТтар - беҙҙең фундаМЕНТ... МЕНТалитет беҙҙең шулай, Ил башында - парлаМЕНТ. Гүйә, беҙҙең тормошобоҙ МЕНТтан торған орнаМЕНТ..." Бына нисек ҙурлаған Салауат Әбүзәр менттарҙы! Ә һеҙ уны кире уйлап, насар ҡабул итәһегеҙ, йәмәғәт. Милицияның исемен алыштырырҙар ҙа ул, тик бына уларға бағышланған шиғыр кемдәргә тороп ҡалыр икән. Хәйер, фундамент шул килеш ҡалһа, йылдар үткәс ҡабат милицияға урап ҡайтырбыҙ, тип өмөтләнәбеҙ инде. Кешене бит өмөт йәшәтә.

Кемдер полиция һүҙенән уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡа, йәнәһе, улар Бөйөк Ватан һуғышындағы полицайҙар менән ауаздаш һымаҡ. Аптырарһың был халыҡҡа. Комендант сәғәте индергәйнеләр, береһе лә ҡаршы килмәне, полицай тигән һүҙҙән дә ҡурҡалар. Улай бик дер ҡалтырап китмәйек инде, ана бит, коллегалар комендант сәғәтен үҙ балаларында һынап ҡараған. Балиғ булмаған баланы урамға һуң ғына сығарып ебәргәндәр. Киоскыла һатыусылар уға һыра ла, сигарет та һатҡан хатта. Беҙҙә закондар тейешенсә эшләй башлағансы, полицияны ҡабаттан милицияға үҙгәртерҙәр әле. Эш бит бында исемде үҙгәртеүҙә генә тормай, есемде үҙгәртергә һәм эшләргә теләк булыуҙа.

Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев исем үҙгәртеүҙе: "Октябрь революцияһы заманынан уҡ илдә хоҡуҡ һаҡлау органдары милиция тип атала башлаған. Шуның менән ул халыҡ, йәғни эшсе-крәҫтиән характерын йөрөтә. Ә беҙгә профессионалдар, һөҙөмтәле, ғәҙел, намыҫлы эшләгән хеҙмәткәрҙәр кәрәк. Шуға күрә, милицияға элекке атамаһын ҡайтарып, артабан хоҡуҡ һаҡлау органдарын полиция тип атарға ваҡыт етте", - тине. Аңланығыҙмы, йәмәғәт, тимәк, эшсе-крәҫтиәндәр заманы үтте, уға алмашҡа капиталистик буржуазия килә. Тап улар ғына профессионалдар була ала. Мәҫәлән, Америка, Бөйөк Британия, Германия, Австрия, Франция, Финляндия һәм Италия полицияһы. Ә беҙҙең Рәсәй милицияһы милициямы ни ул... Большевиктарҙың бөйөк реформатор Петр Беренсенең Көнбайышҡа тәҙрә асып, барлыҡ яңылыҡты Рәсәйгә индерергә тырышыуына аяҡ салыуы һөҙөмтәһе генә бит ул. Шунда Петр батша полиция тип баш ватмаһа, бөгөн бына тигән милицияның контроле аҫтында йәшәр инек һаман да.

Ярай, булғаны булған. Петр Беренсе Рәсәйгә полиция хеҙмәтен индергәндә дәүләт власын үҙәкләштереү тамамлана, идара итеүҙең самодержавие формаһы раҫлана, бөтә дәүләт механизмы,



бигерәк тә уның хоҡуҡ һаҡлау-каратель өлөшө, реформа кисерә. Параллелдәр үткәрһәк, беҙҙә лә хәҙер үҙәкләштереү удар темптар менән алға бара инде. Әммә енәйәтселек кәмемәй, арта ғына. Элек тә шулай булған. Хөкүмәттең күрһәтмәләрен үтәмәгән йәки яй үтәгән халыҡты ҡаты язалап, полиция чиновниктары үҙҙәре үк ҡаҙнаны урлай, вазифаһын яуыз ниәттә файҙалана, йәмәғәт тәртибен боҙа, һуғыша, талаша, енәйәтселәр менән бергә эсә башлай. Тиҙҙән был орган "кәмһетеүҙәргә һәм ришүәт алыуға әүәҫ" икәнлеген күрһәтә. Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай, тигәндәй, исемен күпме алмаштырһаң да, боронғо полиция хеҙмәткәрҙәренең тәртибе гендар буйлап күсә, күрәһең. Тарихта тамыр йәйгән күренеш исем алыштырыу менән генә бөтөп китерме икән, ай-һай...

Был үҙгәртеп ҡороуҙар депутат ағайҙарҙы ла хафаландыра. Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Александр Хинштейн фекеренсә, "уңышлы реформалар хеҙмәткәрҙәр өсөн матди, социаль стимулдар тыуҙырыуҙан башлана". Ә беҙҙә реформалар иҫке фундаментта яңыны ҡороуға нигеҙләнә. Ысынлап та, 40 пункттан торған докуМЕНТта (мент һүҙе тормошобоҙ нигеҙендә ята, тигәнгә нисек ҡаршы киләһең инде), нигеҙҙә, полицияның бурыстары һәм хоҡуҡтары билдәләнгән. Полиция миграцияны күҙәтәсәк, ҡулға алынғандарҙы ҡараясаҡ, һаҡлаясаҡ, конвой аҫтында йөрөтәсәк, автомобилдәргә техник тикшереү үткәрәсәк һәм ныҡ иҫерек кешеләрҙе медицина учреждениеларына алып барасаҡ. Проектты уҡыһаң, полиция хеҙмәткәрҙәре хәтәр шәп кешеләр булып күҙ алдына баҫа - улар халыҡҡа тәү сиратта документын күрһәтергә, әгәр граждан менән тупаҫ мөғәмәләлә булып, уның хоҡуҡтарын һәм азатлығын боҙһа, унан ғәфү үтенергә тейеш. Шулай уҡ уларға кешеләрҙе милләтенә, диненә, енесенә, ниндәй йәмәғәт берекмәһе ағзаһы булыуға ҡарап туҡтатыу тыйыла. Элек "обезьянник" (әйтерһең дә циркта йәшәйбеҙ) тип аталған урындарҙа кешене өс сәғәт тотоу мөмкин булһа, был ваҡыт хәҙер бер сәғәткә тиклем ҡыҫҡартылған. Милиция садизмына ла (резина таяҡ менән туҡмау, тәнгә яра һалырлыҡ бәйләү ысулдары, температура нулдән түбән булғанда һыу менән ҡойондороу) табу ҡуйылған. Ярай, Иванов системаһы буйынса "сынығыуҙы" туҡтатып та торорбоҙ, ә бына ил буйынса штаттың 20 проценты ҡыҫҡарһа, уларҙы ҡайҙа урынлаштырып бөтөрҙәр икән? Бер хата икенсеһен тарта, тигәндәй, бер урында тәртип булдырырға тырышып, ҡабат эшһеҙҙәр армияһын ишәйтеп, енәйәтселекте тағы ла арттырмабыҙмы икән? Урынын алмаштырыу менән генә йөкмәтке үҙгәреп, шул уҡ милицияла эшләгән етәкселәр капиталистик илдәрҙә эшләүсе полицайҙар кеүек булып китерме, характеры үҙгәрерме, кешеләргә кешеләрсә мөнәсәбәттә булырмы?

...Әхалыҡ телгә бай ул. Полицай һүҙен дә үҙенсә яраҡлаштырып алыр, шағирҙар ҙа уларға арнап шиғыр яҙыр. Тик етәкселек кенә Черномырдиндың афоризмға әүерелгән һүҙҙәрен ҡабатламаһын ине: "Яҡшы булыуын теләгәйнек, һәр ваҡыттағыса килеп сыҡты".



**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Әгәр ҙә иң кәрәкле социаль тауарҙарға хаҡ кинәт күтәрелә ҡалһа, Рәсәй Хөкүмәте уларға хаҡты үҙе билдәләйәсәк. Закон буйынса теге йә был төбәк территорияһында 30 календарь көн эсендә иң мөһим тауарҙарға хаҡ 30 һәм унан да юғарыраҡ процентҡа күтәрелә икән, унда хөкүмәт 90 көнгә тиклем үҙе хаҡ билдәләй ала. Бындай тауарҙар исемлеге РФ Хөкүмәте тарафынан ҡабул ителгән дә инде.

✓ БР буйынса Росреестр идаралығы үткәргән мониторинг ваҡытында граждандарға күсемһеҙ милеккә хоҡуҡтарын теркәүҙә законһыҙ рәүештә хеҙмәт күрһәтеүселәр барлығы асыҡланған. Шуның менән бәйле, идаралыҡ тиҙ ваҡыт эсендә хоҡуҡтарҙы теркәү хеҙмәте тәҡдим итеүселәрҙең эшмәкәрлеге законға яраҡһыҙ, тип белдерә. Дәүләт теркәүе өлкәһендә бындай хеҙмәт тәҡдим итеүселәр тураһында идаралыҡтың ышаныс телефонына мөрәжәғәт итергә була, уның номеры: (347)275-21-96. Шулай уҡ www.to02.rosreestr.ru сайтында мәғлүмәт ҡалдырырға йәки Рәсәйҙең Иҡтисад үҫеше министрлығына электрон хат ебәрергә мөмкин.

✓ ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре белдереүенсә, юлдарҙағы аварияларҙың һәр 12-сеһен стажы бер йылдан аҙыраҡ булған водителдәр яһай, һәр 8-се аварияла өс йылға тиклем стажлы водителдәр ғәйепле. Белгестәр быны автомәктәптәрҙең водителдәргә тейешле кимәлдә белем бирмәүендә күрә. Әлеге ваҡытта республикала 120-гә яҡын автомәктәп иҫәпләнә, уларҙың яртыһы Өфө ҡалаһында урынлашҡан. Шуға ла ЮХХДИ уҡытыуҙың норматив базаһын яңынан ҡарарға тәҡдим итә.

✓ Аҙна эсендә республикала 232 кешене талпан тешләгән. Роспотребнадзор мәғлүмәттәренә ярашлы, медицина ярҙамына мөрәжәғәт итеүселәр һаны 14 320-гә еткән, уларҙың 3 812-һе - балалар. 5791 талпанға лаборатор тикшеренеү үткәрелгән, уларҙың 101-е талпан энцефалиты вирусы менән зарарланған булған. Әлеге ваҡытҡа талпан энцефалиты менән сирләүселәр һаны элеккесә ҡала - 13 кеше. Был былтырғы йыл менән сағыштырғанда 1,85 тапҡырға аҙыраҡ.

✓ Башҡортостанда Африка чумаһын республика биләмәһенә индермәү саралары күрелә. Бигерәк тә сусҡасылыҡ комплекстары иғтибар үҙәгендә, уларҙа иҫкәртеү вакциналары эшләнә, күҙәтеү алып барыла. Йоғошло ауырыу осраҡтары Волгоград, Ростов өлкәләрендә теркәлгән.

✓ *Эшҡыуарлыҡты административ барьерҙан, бурыс йөгөнән арындырып, предприятиеларҙың үҫешенә юл асырға теләйбеҙ. Бының өсөн төбәктәрҙең иң яҡшы тәжрибәһен өйрәнәсәкбеҙ.*



ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

# МИНЕҢ ПОРТРЕТЫМ ТҮГЕЛ...

## тәбиғәт күренештәре биҙәһен етәкселәр кабинетын



**БР Президенты Рөстәм Хәмитов менән Башҡортостан юлдаш телевидениеһы каналында тура эфирҙа һөйләшеү барыһында ла ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Тура эфирҙы "Спутник FM" һәм "Юлдаш" радиоларынан да тыңларға мөмкин булды. Унда республика, федераль һәм муниципаль матбуғат саралары журналистарынан тыш, һәр кем үҙен борсоған һорауҙарҙы бирә алды. Бынан тыш, Салауат Юлаев һәйкәле янындағы майҙанда һәм Әлшәй районында күсмә телевизион станциялар эшләне.**

➔ Эфир ваҡытының сикләнгән булыуы сәбәпле, теләүселәрҙең барыһы ла Президент менән әңгәмәләшеү бәхетенә эйә була алманы. Шулай ҙа граждандарҙы борсоған дөйөм проблемаларҙы күҙалларға мөмкин булды. Мәҫәлән, "коррупция" һүҙе бер нисә тапҡыр яңғыраны. Халыҡ ҡайһы бер етәкселәрҙең ғәҙел булмауы, биләгән вазифаһын дөрөҫ файҙаланмауы факттарына зарлана. Президент әйтеүенсә, республика территорияһында бындай күренештәргә иң ҡаты саралар ярҙамында көрәш алып барыласаҡ.

- Халыҡ власть өсөн түгел, ә власть халыҡ өсөн хеҙмәт итергә тейешлеген күптән аңларға ваҡыт, - тине Рөстәм Зәки улы үҙенең яуап сығышында. - Шуға ла ышанысты аҡламаған етәкселәргә ҡарата етди саралар күреләсәк.

➔ Башҡортостандың социаль өлкәһендә барлыҡҡа килгән күп проблемалар республикала бюджет тәьминиәтенең етерлек кимәлдә булмауына бәйле, тигән фекер ҙә яңғыратты республика етәксеһе тура эфирҙағы һөйләшеүҙә.

- Әлеге ваҡытта республика бюджеты яҡынса 100 миллиард һум тәшкил итә. Тәү ҡарашҡа ҙур булып күренгән был сумманы төбәктең дүрт миллион халҡына бүлһәң, һәр кешегә яҡынса 25 мең һум тура килә. Был суммаға проблемаларҙы хәл итеп булмай, - тине Рөстәм Хәмитов.

Әйткәндәй, Башҡортостан бюджеттың өстән бер өлөшөн мәғариф системаһына тотона. Бында мәктәптәрҙе ҡарау, уҡытыусыларға эш хаҡы түләү, һ.б. инә. Һаулыҡ һаҡлау, торлаҡ төҙөү, юлдар һалыу, йәштәр сәйәсәте һәм башҡа өлкәләрҙәге проблемаларҙы ҡалған аҡсаға хәл итергә тура килә.

➔ Йәштәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн спорт ҡоролмалары төҙөү, "алданған өлөшсөләр" темалары ла йыш күтәрелде. Республика халҡының һорауҙарына яуап биреп, Президент проблемаларҙы хәл итәсәген, әммә республика бюджеты сикләнгән булыу сәбәпле, ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итеү бер аҙ ваҡыт талап итәсәген белдерҙе.

➔ Һорауҙар Рөстәм Хәмитовтың "Тере журнал"дағы әүҙем эшмәкәрлегенә, аҙыҡ-түлеккә хаҡ артыуға, республика башлығына федераль үҙәк йоғонтоһоноң кимәленә, Башҡортостанда спорт үҫешенә лә ҡағылды.

"Тере журнал"да блог алып барыу өсөн ваҡыт йәлләмәүе тураһында ла белдерҙе Президент. Уның фекеренсә, аралашыуҙың бындай төрө халыҡҡа власть вәкилдәренә туранан-тура мөрәжәғәт итеү мөмкинлеге бирә.

- Блог халыҡ менән күҙгә-күҙ ҡарашып аралашыуҙы алыштыра алмай, шуға ла урындарға сығып, халыҡ менән осрашыуҙар үткәрәсәкмен, - тине Президент.

➔ БР Президенты республика кадрҙары араһында Өфөлә федераль власть вәкиле булып эшләй алырҙай белгестәр күплеген дә телгә алды. Был мәсьәлә буйынса РФ Президенты Хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Владислав Сурков менән һөйләшәсәге тураһында белдерҙе. Президент шулай уҡ Башҡортостандың яңы Хөкүмәтен формалаштырыуҙа Федераль үҙәк тарафынан да, башҡа төбәктәрҙән дә бер ниндәй ҙә баҫым булмауын әйтеп үтте.

➔ Рөстәм Хәмитов республика етәкселәренең кабинеттарына үҙенең портретын элә башлауҙарына ла үҙ ҡарашын белдерҙе.

- Мин бер ҡасан да "йондоҙ ауырыуы" менән ауырыманым. Шуға ла етәкселәр үҙ кабинеттарын икенсе төрләрәк биҙәһен, мәҫәлән, матур Башҡортостан тәбиғәте картинаһын элеп ҡуйһын ине, тигән ҡараштамын.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# "ФОРТОЧКАНАН ЙӨРӨМӘГЕҘ..."

**Уҙған аҙна һуңында республиканың эшлекле даирәләре вәкилдәре менән осрашыуҙа Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов: "Форточканан йөрөмәгеҙ, ишектәр һәр саҡ асыҡ", тип белдерҙе.**

Был белдереү юҡтан ғына килеп сыҡманы, сарала ҡатнашыусыларҙың һүҙ алған һәр береһе тиерлек эшҡыуарлыҡ мәсьәләләре буйынса борсоған мәсьәләләрҙе ҡуҙғатып, уларҙы йырып сыҡҡансы йылдар үтәсәген, ә урындағы чиновниктарҙың эш башлағанда аяҡ салыуын, юғары даирәләге етәкселәргә, мәҫәлән, Президенттың үҙенә, инеп булмауын билдәләне. Әммә алдына маҡсат ҡуйған кеше ишектән ҡыуһалар - тәҙрәгә, тәҙрәнән ҡыуһалар - ишеккә килә, тип мәрәкәләне йыйылыусылар.

"Иҡтисад ҡеүәтле әйләнеш алһын өсөн нимә эшләргә, ниндәй мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк? - тип башланы һүҙен республика башлығы. - Яңы Хөкүмәт эшҡыуарлыҡты, сәнәғәтте үҫтереүгә йүнәлеш алды. Беҙ эшләргә еңел, һөҙөмтәле булған мөхит булдырырға тейешбеҙ. Беҙҙең төп бурыс - эшҡыуарлыҡ өсөн кәрәк булған барлыҡ тигеҙ шарттар тыуҙырыу. Эшҡыуарлыҡты административ барьерҙан, бурыс йөгөнән арындырып, предприятиеларҙың үҫешенә юл асырға теләйбеҙ. Бының өсөн төбәктәрҙең иң яҡшы тәжрибәһен өйрәнәсәкбеҙ. Үҙ сиратыбыҙҙа шәхси-дәүләт партнерлығының барлыҡ варианттарын ҡарарға әҙербеҙ. Беҙҙең бурыс - эшҡыуарҙарға ярҙам итеү. Был принципиаль рәүештә мөһим һәм кәрәк. Сөнки был - яңы эш урындары, республиканың ҡеүәте һәм тотороҡлолоғо".

Рөстәм Зәки улы билдәләүенсә, бөгөн Башҡортостан уртаса айлыҡ эш хаҡы күләме буйынса 20 сәнәғәт-производство төбәге араһында 16-сы урынды биләй. Былтыр хеҙмәт етештереүсәнлеге лә кәмегән. Шуға күрә, йыл дауамында эш хаҡы күләмен күтәреү мәсьәләһе менән етди шөғөлләнергә кәрәк. Мәҫәлән, мәғариф өлкәһенә республика бюджетының 31 проценты китә һәм был күрһәткес Рәсәйҙә беренсе урында тора. Әммә ресурстар һөҙөмтәле файҙаланылмай.

Шулай уҡ дәүләт башлығы инвестициялар һәм производство фондтарын яңыртыу буйынса ла ҡарашын еткерҙе. Ундай предприятиеларҙы хуплаясаҡбыҙ һәм тейешле шарттар булдырасаҡбыҙ, тине ул. Сөнки Башҡортостан күрше өлкәләрҙә генә түгел, сит илдәрҙә лә дәғүәселек һәләтенә эйә булырға тейеш.

Осрашыу "түңәрәк өҫтәл" рәүешендә барҙы һәм теләүселәр үҙҙәрен борсоған мәсьәләләрҙе туранан-тура һөйләй алды. Улар, нигеҙҙә, бөгөн закондарҙың камил булмауын, Рәсәйҙә сит тауар менән сауҙа итеү йүнәлешенең үҫешеүенең, ә яңы производство булдырыуҙың алға китмәүен билдәләне. Шулай уҡ эшҡыуар образын булдырыусы итеп күрһәтеү, яҡтыртыу проблемаһы ла күтәрелде. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы секцияларының береһенә әҙерлек барышында эш төркөмө лә ошо фекерҙе күтәргәйне: "Ни өсөн башҡорт образы шағир, йырсы, яугир итеп һүрәтләнә, унда эшҡыуар образын да индерергә кәрәк".

Ер-мөлкәт мөнәсәбәттәре, һалымдар түләү буйынса ла, кредит мәсьәләләре хаҡында ла күп ризаһыҙлыҡтар ишетелде был осрашыуҙа. "Рәсәйҙә бары тик сит ил производствоһы өсөн генә шарттар тыуҙырылған. Уларға льготалар бирелә, дотация ҡаралған. Осрашыуҙар Президент кимәлендә үтә. Ә беҙҙе ҡыҫырыҡлап сығарырға тырышалар", - ти эшлекле даирәләр. Быға яуап итеп Башҡортостан Президенты: "Әгәр район етәкселеге эшҡыуарлыҡҡа аяҡ сала икән, уның вазифаһында ҡалыу-ҡалмау мәсьәләһен ҡараясаҡбыҙ", - тип белдерҙе.

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөнөң Нефтселәр мәҙәниәт һарайында мәғариф буйынса баш ҡала кәңәшмәһе үтте. Унда БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Зөһрә Рәхмәтуллина, мәғариф министры Зиннәт Аллаяров, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев, баш ҡала мәғариф учреждениелары етәкселәре, уҡытыусылар ҡатнашты. Билдәләнеүенсә, баш ҡалала мәғариф учреждениеларының матди-техник базаһы ҡәнәғәтләнерлек, оптималләштереү ҙә Өфөгә бик ҡағылмаған: дүрт уҡыу йорто башҡаларға ҡушыу юлы менән үҙгәртеп ҡоролған, өс мәктәп ябылған. Кластарҙа уҡыусылар һаны яҡынса 24,8 кеше тәшки итә.

✓ "Уфанет" "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә республиканың мәғариф учреждениеларын юғары тиҙлекле интернет ресурстарына тоташтырыуҙы 1 сентябрҙән үк башлаясаҡ. Был БР Президенты Рөстәм Хәмитовтың бойороғона ярашлы тормошҡа ашырыласаҡ. "Уфанет" шулай уҡ баш ҡаланың бар мәктәптәрен секундына 1 Мбит-лы тиҙ интернетҡа бушлай тоташтырыуҙы ла күҙҙә тота.

✓ Өфөлә "Иң яҡшы йәйге кафе" ҡала конкурсының икенсе этабы бара. Ул 30 августа тиклем дауам итәсәк. Әле баш ҡала биләмәһендә 152 йәйге кафе эшләй.

✓ Баш ҡала етәкселәре парктар һәм баҡсалар биләмәләрендәге сүпсарға ҡаршы көрәш иғлан итте. Был мәсьәлә ҡала округы хакимиәтендә быға тиклем дә күп тапҡырҙар күтәрелгәне бар ине. Әле хакимиәт башлығының Ленин һәм Октябрь райондары биләмәһендәге баҡсалар буйынса ғына дәғүәһе юҡ. Ә бына Дим районындағы 70 баҡсаның 13-өндә генә, Калинин районындағы 132 баҡсаның 60-ында ғына контейнер майҙансыҡтары булыуын бер нисек тә аҡлап булмай. Павел Рюрикович район башлыҡтарына бер аҙна эсендә ошо мәсьәләнең сиселешен хәл итергә ҡушты.

✓ Янғындар ҡурҡынысы менән бәйле һәм һунарсылыҡ ресурстарын һаҡлау маҡсатында Башҡортостан Республикаһы биләмәһендә йәйге-көҙгө осорға һунарсылыҡ итеү тыйылды.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҺАҠЛАНҒАНДЫҢ...

## һағы ятыр



**Рәсәйҙә 1 августан бөҙрәханалар өсөн яңы санитар нормалар үҙ көсөнә инде. Яңы ҡағиҙәлә хәүефле инфекциялар һәм сирҙәр таралыуына юл ҡуймауға айырыуса ҙур иғтибар бүленә. Хәҙер бөҙрәханаларҙа бүлмәне генераль йыйыштырыу аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла эшләнергә тейеш.**

Яңы талап буйынса, бөҙрәхана бүлмәһенең стеналары, иҙәне, плинтустары, ишектәре, тәҙрәләре, йыһаздары һәм ҡорамалдарына махсус иҙелмә менән дезинфекция яһалырға тейеш. Был парентераль гепатит, ВИЧ-инфекция, туберкулез, бәшмәк ауырыуҙары һәм башҡа инфекциялар таралыуына юл ҡуймау өсөн эшләнә. Хеҙмәткәрҙәрҙең тиреһендә яра булһа, ул лейкопластырь менән йәбештерелә. Бынан тыш, шәхси профилактика маҡсатында бөҙрәхана хеҙмәткәрҙәр өсөн медицина аптекаһы буласаҡ, ул 70 процентлы спирт, 5 процентлы йод, лейкопластырь, бәйләү өсөн материалдар, латекс бирсәткәләр, марганец-әсе калий матдәһенән торасаҡ. Тукланыу өсөн айырым урын булыуы ла мөһим.

Әгәр ҙә клиентта бет (педикулез) табылған осраҡта хеҙмәткәр уны махсуслашҡан учреждениеға йүнәлтергә тейеш. Уны хеҙмәтләндергән ваҡытта ҡулланылған ҡоролмаларға дезинфекция үткәрелә. Хеҙмәтләндереү өсөн тик таҙа йәки бер тапҡыр ҡулланыла торған таҫтамал, япма, башлыҡтар талап ителә. Синтетик тауарҙан тегелгән пеньюарҙар таҙа кизе-мамыҡ салфетка менән генә ҡулланылырға тейеш. Ҡырҡылған сәсте клиенттың битенән һәм муйын тиреһенән бумала менән ҡағып төшөрөү тыйыла, быны өсөн бөҙрәхана хеҙмәткәре салфетка йәки мамыҡ тампон ҡулланырға бурыслы.

Ҡағиҙәлә бигуди, тараҡ, щетка, ҡайсыларҙы эшкәртеү саралары ла ентекләп яҙылған. Электр бритваларын һәм косметик ҡоролмаларҙың электродтарын 15 минут һайын вируслы гепатит ваҡытында ҡулланыла торған концентрациялы иретмәгә манылған сепрәк менән һөртөү ҡаралған.

Педикюр эшләү өсөн айырым шарттар билдәләнгән. Хәҙер бөҙрәханалар сәс, тырнаҡ, тире өсөн тәғәйенләнгән сараларҙы тик уларҙың хәүефһеҙлеген дәлилләүсе документтары булған осраҡта ғына һатып ала ала. Яңы ҡағиҙәләр реконструктив-пластик хирургия бүлектәренә, косметик бүлектәр һәм клиникалар, тире һәм тире аҫты ауырыуҙарын дауалыу бүлексәләре һәм клиникалары, дауалау-профилактик учреждениеларҙың косметологик, массаж кабинеттары һәм солярийҙарына ҡағылмай.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Әнүәр ХӘЛИЛОВ, рәссам-биҙәүсе:** Был мәсьәлә күптән үҙенең хәл ителешен көтә ине. Беҙ, мәҫәлән, көн һайын төшкө ашҡа ашханаға йөрөбөҙ, әммә унда аҙыҡты йыуылмаған һауыт-һабаға һалып, йыуылмаған ҡалаҡтар менән ашамайбыҙ бит. Йәғни, ашханала гигиена талаптары ҡүҙәтелеүе йәки ҡүҙәтелмәүе шунда уҡ күҙебеҙгә ташлана, ә бөҙрәхана был турала уйлап та ҡарамайбыҙ. Сәс алдырырға барғанда ла сәләмәтлегебеҙгә зыян килтереүебеҙ ихтимал. Иғтибар иткәнегеҙ бармы икән, дауаханаларҙа баш тиреһе ауырыуҙары кабинеттары барлыҡҡа килде, был ауырыуҙарҙың киң таралыу алыуында, бәлки, бөҙрәханаларҙа санитар шарттарҙың тейешле кимәлдә булмауы ла сәбәпселер. Минең уйымса, һәр кемдең шәхси сәс киҫеүсеһе булырға тейеш. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә ҡатын кеше махсус курстар үтеп, өйҙәге ираттың сәсен үҙе алғанын беләм.

**Гөлнара МӘЖИТОВА, табип:** Бөгөнгө көндә сәс киҫеү, бөҙрәләтеү, буятыу менән шөғөлләнеүсе салондар бик күп. Сөнки уларға һорау ҙа ҙур: олоһо ла, кесеһе лә, ир-егеттәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа айына бер тапҡыр ғына булһа ла бөҙрәхана хеҙмәте менән ҡуллана. Көнөнә тиҫтәләгән кешенең сәсен киҫкән ҡайсы, электр бритвалары, ысынлап та, хәүефле инфекциялар таратыусы булып тора ала, хеҙмәткәр үҙе лә төрлө йоғошло сирҙәр йөрөтөүсегә әйләнеүе бар. Шуға ла бөҙрәханалар эшенә яңы санитар нормалар индереү бик урынлы һәм ваҡытлы эш, тип иҫәпләйем. Бүренән ҡурҡып, урманға бармау, бер яҡтан ҡарағанда, дөрөҫ һымаҡ, шулай ҙа ҡаты талаптар ҡуйып, был хәлдә булдырмау иң ҡулай ысулдыр.

ҺОРАУ-ЯУАП

### ИҪБАТЛАЙ АЛҺАҢ...

**Бынан 30 йыл элек мин "яҫы табанлылыҡ" диагнозы менән армияла хеҙмәт итеп ҡайттым, ә саҡырырға тейеш булмағандар. Әле килеп мин шуның өсөн хәрби комиссариаттан матди компенсация талап итә аламмы?**

- Судҡа ғариза бирә алаһығыҙ. Ләкин суд тәүҙә уҡ шундай һорау ҡуясаҡ: ә һеҙ нинә 30 йыл буйына был хаҡта уйламанығыҙ? Әгәр ҙә һеҙҙең сәләмәтлек торошонда мәжбүри хәрби хеҙмәт "эҙҙәре" күренә һәм шуның арҡаһында һаулығығыҙға тағы ла ҙурыраҡ зыян килтерелгән булһа, был хаҡта ныҡлы дәлилдәр менән иҫбатлау кәрәк буласаҡ. Шулай ҙа байтаҡ ваҡыт үтеп китеү менән бәйле нимәләр иҫбатлауы ауыр буласаҡ.

### АҠСА ЛА ЮҠ, ТОРЛАҠ ТА...

**Былтыр балиғ булмаған бер балалы ҡатындан бүлмә һатып алырға булдыҡ. Түләнмәгән бик ҙур бурысы булғанлыҡтан, беҙ уға районда фатир һатып алырға аҡса бирҙек. Ләкин һатыу-һатып алыу эшенең тамамланыуын көтөп тормайынса, ул Регпалатанан документтарын барып алған һәм бөтә нәмәнән баш тарта, аҡсаны ла ҡайтарып бирмәй. Судҡа ла биреп ҡараныҡ, ләкин аҡса юҡ. Беҙгә ни эшләргә?**

- Намыҫлы һатып алыусы булараҡ, һеҙ килешеү шарттарын үтәгәнһегеҙ, әлеге фатирға милекселек хоҡуғын таныуҙы һорап, судҡа юллау менән мөрәжәғәт итегеҙ. Ә инде алдаҡсы һатыусынан аҡсағыҙҙы ҡайтараһығыҙмы, әллә милкегеҙҙеме - быныһы үҙегеҙҙең эшегеҙ.

### ШАРТТАР ЯҠШЫ БУЛҺЫН

**Өс ғаилә йәшәгән өс бүлмәле фатирҙың 15,9 кв. метр майҙанлы бүлмәһендә йәшәйем. Йәшәү шарттарын яҡшыртырға йәки торлаҡ майҙанымды ҙурайтырға хоҡуғым бармы? Ике йыл элек яңғыҙ әсә - ҡыҙым вафат булды, 3 һәм 6 йәшлек ике улы ҡалды, улар етем. Минә ошо мәсьәлә буйынса кемгә мөрәжәғәт итергә?**

- Әлеге ваҡытта социаль яллау килешеүе буйынса торлаҡ майҙаны менән тәьмин итеү РФ Торлаҡ кодексының 3-сө бүлегенә ярашлы хәл ителә. Ошо Кодекстың 52-се статьяһы буйынса, торлаҡҡа мохтаж булғандар сифатында аҙ тәьмин ителгән граждандар, шулай уҡ федераль закон нигеҙҙәре, РФ президенты Указы йәки РФ субъекттары законлары тарафынан билдәләнгән категория граждандары иҫәпкә ҡуйыла. Кодекстың 50-се статьяһына ярашлы, социаль яллау килешеүе буйынса торлаҡ бинаһы майҙаны нормаһы урындағы үҙидара органдары тарафынан билдәләнә. БР Хөкүмәте ҡарары менән (01.03.2005 № 168-р) урындағы үҙидара органдарына бер кешегә дөйөм торлаҡ майҙаны нормаһын 12 кв. метрҙан да күберәк булмаған күләмдә билдәләргә ҡушылған. Төрлө муниципаль берәмектәрҙә норма унан да аҙыраҡ булыуы ихтимал. Шулай итеп, әгәр һеҙ 15,9 кв. метр майҙанлы бүлмәлә өс ғаилә торған коммуналь фатирҙа етем балалар менән йәшәйһегеҙ икән, торлаҡ шарттарығыҙҙы яҡшыртыуға хоҡуғығыҙ бар. Иҫәпкә тороу мәсьәләләре менән һеҙгә йәшәгән урынығыҙ буйынса урындағы үҙидара органдарына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Ангина



1.Кәрәҙле балды бер нисә сәғәт дауамында сәйнәргә. 2. 10 инжир емешен ярты литр һөттә бешерергә. Һөттө көн дауамында эсеп бөтөргә. 3. Ауырыу башланып ҡына торғанда тамаҡты сөгөлдөр һуты менән сайҡау яҡшы һөҙөмтә бирә. Бының өсөн 1 стакан сөгөлдөр һутына 1 балғалаҡ аш һеркәһе өҫтәргә һәм 1-2 сәғәткә ҡалдырырға. Һут бер тәүлектән һуң иҫкерә, шуға уны шунда уҡ ҡулланыу хәйерлерәк. 4. Ярты литр бүлмә температураһындағы һыуға 1 ҡалаҡ тоҙ һалып болғатығыҙ һәм тоҙ ирегәс, 5-7 тамсы йод тамыҙығыҙ. Төнәтмә менән тамаҡты көнөнә 3-4 тапҡыр сайҡатырға.

### Тымау тейгәндә

Ойоҡтар эсенә ҡоро гәрсис һалып, шул рәүешле бер нисә көн йөрөргә. 1 ҡалаҡ ваҡлап туралған һуғанды 200 грамм самаһы балға һалып, көнөнә 4 тапҡыр 1-әр балғалаҡлап ашаһаң да тымау шунда уҡ үтәсәк. Халыҡ дауаһы менән шөғөлләнеүселәр тағы ла бер ысул тәҡдим итә: һул ҡулдың усын танау һәм маңлайға, ә уң ҡулдыҡын күкрәк тапҡырына һалығыҙ. Ун биш минуттан ауырыуығыҙ ҡул менән һыпырып алғандай, юҡҡа сығасаҡ.

### Нервыларҙы тынысландырыу

Ванналағы йылы һыуға 5-8 тамсы аҡ шыршы (пихта) майын тамыҙып, 20-30 минут тыныс ҡына ятып торорға.

### Сәс ҡойолһа

Сәс ҡойолоуҙан ябай кесерткән ҡотҡарыр. Дауа өсөн сәскә атып өлгөрмәгән йәш кесерткәнде ҡулланыу яҡшыраҡ. Унан төнәтмә яһап, 40 градусҡа тиклем һыуытып йыуғандан һуң сәсте сайҡатырға.

### Шифалы гөлләмә

Хуш еҫле фиалка - ангина, фарингит һәм башҡа тәр тын юлы ауырыуҙарын дауалау өсөн бик һөҙөмтәле сара. Уның һыуҙағы йәки спирттағы төнәтмәһе шулай әҙерләнә: 1 балғалаҡ сәскәне ҡайнар һыуға һалып бер аҙ тоткас, көнөнә 4-5 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡлап эсергә. Икенсе ысул: 1 ҡалаҡ сәскәне 100 мл. спиртҡа һалып төнәтергә һәм ашар алдынан көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә.




## ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Һөнәр һәм сәнғәт әҙәбе

● Бер сәғәт эсендә бер нисә төрлө эште башламағыҙ. Сөнки былай итеү башланған эштәрҙең һәр береһенән мәхрүм ҡалыуға сәбәп була. Башланған эште шатлыҡ һәм ихласлыҡ менән ялыҡмай дауам итегеҙ.

● Бөгөн бөтәсәк эште иртәгә ҡалдырмағыҙ. Сөнки иртәгә тағы үҙенә кәрәк эштәре буласаҡ. Бөгөнгө эште иртәгә ҡалдырһағыҙ, бөгөнгө көнөгөҙ бушҡа уҙыр, иртәгәһе көн ике төрлө эш йыйылып, ауырлыҡ килтерер. Һәр көн эш бөтөп барһа, үҙегеҙгә рәхәт булыр.

● Эшегеҙ ҡыҫҡа ваҡыт эсендә тамамланмауына түгел, ғүзәл һәм хуш, таҙа һәм тәртипле булыуына иғтибар итегеҙ. Тәртипле эш ваҡытты бушҡа үткәрмәй һәм үкендермәй. Халыҡ ни ҡәҙәр ваҡыт эсендә тамамланыуына түгел, яҡшы булыуына иғтибар итә.

● Эште иғтибар менән башлағыҙ. Сөнки башы яҡшы булған эштәр аҙағында ла яҡшы булыр. Башы боҙоҡ булған эштәрҙең аҙағы ла матур булмай.

● Эштәрҙе кеше күрһен һәм маҡтаһын өсөн түгел, файҙаһы булһын өсөн эшләгеҙ. Файҙалы эш бөгөн булмаһа ла, бер ваҡыт күҙгә күренер һәм аҡыл эйәләре тарафынан баһаланыр.

● Ваҡытығыҙҙы мөмкин ҡәҙәр ғәмәлегеҙгә бүлегеҙ, көсөгөҙҙән артыҡ эштәргә көсәнмәгеҙ. Был ауырыуға сәбәп була. Эшегеҙҙән ялыҡмағыҙ, шатланығыҙ. Күңел ҡайтарасаҡ фекерҙәрҙе сығарығыҙ. Эшләгеҙ һәм файҙа өмөт итегеҙ.

● Эшләгәндә һуңынан киләсәк файҙалар хаҡында фекер йөрөтөгөҙ. Сөнки был шатлыҡ килеүгә сәбәп була. Шатлыҡлы эш, ни ҡәҙәр ауыр булһа ла, еңел күренә.

● Һөнәрегеҙҙе көндән-көн арттырығыҙ. Бөгөнгө хәлгә ризалыҡ һәм көндән-көн түбән ҡалыуҙан һаҡланмау - характерһыҙ һәм һиммәтһеҙ кешеләрҙең ғәҙәтелер.

### Кәсеп әҙәбе

● Уҡыуығыҙҙы тамамлағас, донъяла йәшәү өсөн үҙегеҙгә яраҡлы берәй кәсеп һәм һөнәр һайлағыҙ. Бер төрлө һөнәр һәм кәсепте тулыһынса өйрәнмәйенсә, башҡалары менән шөғөлләнмәгеҙ.

● Кәсебегеҙҙең аҙлығынан йәки күп файҙа күрә алмауығыҙҙан ояламағыҙ. Тырышҡандан һуң файҙа аҙлығы ғәрлек түгел, ялҡаулыҡ һәм кәсеп итә белмәү ғәрлектер.

● Һайлаған һөнәрегеҙҙә дөрөҫ һүҙле һәм ышаныслы, шат һәм аҡыллы, саралы һәм пак булығыҙ. Көндән-көн эшегеҙҙе яҡшыртырға һәм халыҡ иғтибарына кәсеп итергә тырышығыҙ. Хыянат итмәгеҙ һәм ялған һөйләмәгеҙ. Өлгөрә алмаған көнгә вәғәҙә итмәгеҙ, әйткән вәғәҙәгә ҡаршы сыҡмағыҙ.

● Әгәр игенселек менән шөғөлләнһәгеҙ, игенселек ғилемен белегеҙ, был турала яҙылған рисәлә һәм китаптарҙы уҡығыҙ. Кәрәкле тәжрибәләрҙе өйрәнегеҙ, файҙалы орлоҡтарҙы табып сәсегеҙ. Ер алып-һатыу, хеҙмәтселәр яллау хаҡында булған ҡанундарҙы белегеҙ.

● Сауҙагәр булһағыҙ, сауҙа хаҡында булған ҡанундар менән танышығыҙ. Эштәрегеҙҙе тәртипле йөрөтөгөҙ. Зарар менән файҙа юлдарын айырығыҙ, үҙегеҙгә зарар һәм башҡаларға хыянат итмәгеҙ. Хаҡы арзан тип кәрәкһеҙ нәмәләр алып ҡуймағыҙ. Сифатһыҙ әйберҙәр һатмағыҙ. Аҙ булһа ла табышты ебәрмәгеҙ. Асыҡ йөҙлө булығыҙ. Шәриғәт бойорғанса ғәмәл ҡылығыҙ, файҙаһы аҙ булһа ла бәрәкәте күп булыр.

**(Дауамы бар).**

АТАЙ ҺҮҘЕ



# АТАЙҘЫҢ ӨЛГӨҺӨНДӘ...

**Тормошта беҙ күберәк кемдәрҙән өлгө алабыҙ? Әлбиттә, атайҙан һәм әсәйҙән. Улар өлгөһө - иң ышанысла, иң ныҡлы, иң яҡшы тәрбиә мәктәбе ул. Шуға ла беҙ гәзитебеҙ сыға башлағандың тәүге**

**ҺОРАУ:Үҙегеҙҙең атайығыҙҙан ниндәй ир тәрбиәһе алдығыҙ, үҙ улдарығыҙға ниндәй ир тәрбиәһе бирәһегеҙ?**

**Зөфәр ЕНИКЕЕВ** (№19, 2003): Ғаиләлә әсә роле әйтеп бөткөһөҙ ҙур. Атай иртән эшкә сығып китә лә, кисһеҙ әйләнеп ҡайта алмай. Шуға күрә балалар күп ваҡытын әсәй менән бергә үткәрә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бала атай өлгөһөндә тәрбиәләнергә тейеш, тип уйлайым. Атай кеше аҙ һүҙле булырға, иң мөһиме, мыжыҡ булмаҫҡа тейеш. Баланы үҙ тинең күреп, шәхес итеп тәрбиәләргә кәрәк. Балаға әсә телен өйрәтеү ҙә - атайҙың мөҡәддәс бурысы. Ғаиләлә атайҙың һүҙ көсө лә ныҡ булырға тейеш. Балалар менән гел бергә булып, әсәй кеше арып китә. Шуға әсә менән бала араһында "ыҙғыш" сыҡһа, атай арбитр ролен үтәргә тейеш. Улымды нисек спортҡа ылыҡтыра башлаған көндө әле һаман иҫләйем. Алтынсы ҡатта йәшәгәс, улым лифт менән йөрөргә әүәҫләнеп алды. Шулай бер көндө уны лифтҡа ултыртып ебәрҙем дә, үҙем баҫҡыстар буйлап алтынсы ҡатҡа йүгереп мендем. Улым мине лифт янында күргәс, күҙҙәре шарҙай булды. Шунан башлап ул йәйәүләп йөрөй башланы.

**Азамат СӘҒИТОВ** (№19, 2003): Ғаилә бәхете ул ата-әсә тәрбиәһенә бәйле тип уйлайым. Әсәй наҙында, атай өлгөһөндә үҫкән бала һуңынан үҙ ғаиләһен дә бәхетле итәсәк. Ғаилә төшөнсәһен тар күҙлектән сығып ҡараусылар бар. Ә минең өсөн ғаилә - ҡатыным һәм ике ҡыҙым ғына түгел, ә ата-әсәйемден, ҡустымдың да ғаиләһе. Ир ҡорона ингәс, ҡустым өсөн мин таяныс булдым. Һуңынан мин эш башлап йөрөгәндә ҡустым минең ҡыҙымды ҡараштьі. Шуны әйткем килә: ғаилә берҙәмлеге һәр ваҡыт кәрәк.

Мин күптән үҙ аллы тормош юлына аяҡ баҫһам да, һәр ваҡыт атай-әсәйемдең тормош тәжрибәһенә таянам, кәңәштәренә ҡолаҡ һалам. Ғаиләнең быуындан-быуынға күсә килгән бер-беренә терәк булыу, ярҙамлашыу кеүек традицияһы дауам итә. Шуның менән дә беҙҙең ғаиләбеҙҙең бәхете тулы тип уйлайым. Ә инде ғаиләндә барыһы ла һәйбәт икән, күңелең дә тыныс, көйөфең дә яҡшы була.

**Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН** (№43, 2005): Атай абруйы, ул өйрәткән юл кешене ғүмер буйы оҙата баралыр, тип уйлайым. Тик атай - атай ғына тип ҡарарлыҡ, үҙендең идеалына тиң булырлыҡ, өлгө алырҙай образға тап килергә тейеш. Шул саҡта ғына, атайым өйрәтте, атайым шулай тип әйтә торғайны, тигән нәмәне ир-егет илле йәштә лә, етмештә лә күңеләндә йөрөтә. Һәр атай үҙендә балаһына өлгө булырҙай сифат тәрбиәләргә тейеш. Балаһы иһә, атаһынан алған өлгөнө артабан, йәғни үҙ балаһына, ейәненә тапшырырға тейеш.

Минең атайым менән әсәйем ғаиләһендә ете бала үҫтек. Улар беҙҙе уҡытырға тырышты: ғүмере буйы колхозда бил бөккән атайым, ҡышын-йәйен ат егеп, беҙҙе Баймаҡ районының Татлыбай ауылынан Темәскә мәктәпкә алып бара, алып ҡайта торғайны. Әлбиттә, көнө-төнө теген тегенеп, балаларының өҫтөн бөтәйтеү, тамаҡ юлын ҡарау, уҡыуҙарын контролләү әсәйем иңенә күберәк төшкәндер. Әммә атай алдында яуаплылыҡ тигән нәмә көслөрәк ине. Хәҙер уйлап ҡарайым да, күңелдә уларға ҡарата шул тиклем тәрән ихтирам тойғоһо уяна, һәм, әлдә генә юғары белем алғанбыҙ, юғиһә, атайым менән әсәйемдең шундай ҙур тырышлығына, теләгенә, рухына хыянат итеү булыр ине, тигән һығымтаға киләм.

Үҙемдең иһә ике ҡыҙым һәм бер улым, кейәү, килен, ейәндәрем менән ҙур бер ғаилә булып, гөрләшеп йәшәйбеҙ. Шуныһы һөйөндөрә: ейәндәремдең аталарына "атай", әсәләренә "әсәй", беҙгә "ҡартатай", "өләсәй" тип өндәшеп, саф башҡортса аралашыуҙары күңелгә ифрат ятышлы.

**Таһир ИШКИНИН** (№29, 2005): Беҙ ғаиләлә биш бала үҫтек. Атайым менән әсәйемдең бер ваҡытта ла, быны, тегене эшлә йәки былай эшлә, тегеләй эшлә, тип өйрәткәндәрен хәтерләмәйем. Моғайын, барлыҡ тәрбиә уларҙың үҙҙәренең йәшәү, аралашыу, донъя көтөү өлгөһөндә башҡарылғандыр.

Атай - беҙҙең өсөн ҙур абруй. Иртәнсәк беҙгә, салғыларҙы ҡарап ҡуйығыҙ, бесәнгә төшөргә кәрәк, йәки, балталарҙы әҙерләп ҡуйығыҙ, урманға барырбыҙ, ти ҙә, үҙ эшенә сығып китер ине. Ағайҙарым унын ишараһын аңлап, барыһын да һүҙһеҙ эшләп тә ҡуя.

Атайым менән һөйләшеп-әңгәмәләшеп ултырыуы үҙе бер ғүмер. Бик күпте белә ул. Бигерәк тә тарих һөйләргә ярата. Шуныһы ғәжәп: унын һөйләгәндәре тарихи документтар мәғлүмәттәренә тап килә. Бына ундағы белем һәм хәтер исмаһам! Атайымдың хәтере һәм күп белеүе арҡаһында беҙ ҙә үҙебеҙҙең шәжәрәбеҙҙе һигеҙенсе быуынға тиклем яҡшы беләбеҙ. Үҙем өсөн тағы ла шуны асыҡланым: баланы китап уҡырға ла өйрәтергә кәрәк икән! Минең китап уҡырға ялтыуым да атайымдан килә. Беҙ урыҫтар араһында үҫтек. Атайым менән әсәйемдең беҙҙе милли рухта тәрбиәләй алыуҙары маҡтауға лайыҡ. Беҙ бының өсөн уларға шул тиклем рәхмәтлебеҙ. Үҙем балаларым менән мөнәсәбәтте атайым кеүек ҡорорға тырышам.

**Роберт СОЛТАНОВ** (№31, 2005): Атайым уҡытыусы, мәктәп директоры булып эшләне. Йылдар ауыр булыуға ҡарамаҫтан, һигеҙ балаһын да ысын кеше итеп тәрбиәләргә, алты улына һәм ҡыҙына ла юғары белем бирергә тырышты.

Ауыл тормошо, әлбиттә, үҙе бер тормош мәктәбе. Эш күреп, яуаплылыҡ тойоп, үҙ аллы булып үҫәһең. Мин, ғаиләлә өсөнсө бала булараҡ, атайым менән әсәйемдән, өлкән туғандарымдан фәһем алып, кесе туғандарыма өлгө күрһәтеп үҫтем. Үҫә төшкәс, атайым мине олатайымдарға шефлыҡҡа беркетте, йәғни мин уларға һәр яҡлап ярҙам итергә тейеш булдым. Ошо туғанлыҡ бурысымды, студент каникулдары, аҙаҡ отпускылар осоронда ла теүәл үтәргә тырыштым, ярҙамсыллыҡ, яуаплылыҡ, өлкәндәр менән кескәйҙәр тураһында хәстәрлек тойғоһона өлкәнәйгәнсе тоғро булдым. Ошо бала саҡтан һеңдерелгән эшһөйәрлек тойғоһо тормошомда бик ныҡ ярҙам итте.

Атайым халҡыбыҙ, илебеҙ, тыуған еребеҙ тарихын бик яҡшы белде, беҙҙә лә уға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятты. Милли рух көслө булған ғаиләлә тәрбиәләнеү минең үҙемдең генә яҙмышымды түгел, ә улымдыҡын да билдәләне. Беҙ икебеҙ ҙә - тыуған халҡыбыҙҙың улдары. Уға хеҙмәт итергә тырышып, милли сәйәсәт, хәрәкәт өлкәһендә үҙ өлөшөбөҙҙө индерәбеҙ, әүҙем йәмәғәт эшмәкәрлеге менән шөғөлләнәбеҙ. Һәр иргә хас булғанса, ир көсө талап ителгән барлыҡ физик эштәрҙә лә ҡолас ташлап башҡара алабыҙ.

ӘСӘЙ ҺҮҘЕ

# ӘСӘЙҘЕҢ НАҘЫНДА...



**һандарынан уҡ "Атай һүҙе", "Әсәй һүҙе" рубрикалары булдырып, ошо тәрбиә мәктәбе һабаҡтарын йыйыуҙы, туплауҙы маҡсат итеп ҡуйҙыҡ. Шуларҙан өҙөктәр килтерәбеҙ.**

**ҺОРАУ: Әсәйегеҙҙән ниндәй тәрбиә алдығыҙ һәм ҡыҙығыҙға ниндәй ҡатын-ҡыҙ тәрбиәһе бирҙегеҙ?**

**Мәҙинә НӘҘЕРҒОЛОВА** (№19, 2006): Тәрбиә хаҡында һүҙ сыҡҡас, төп тәрбиәне ике өләсәйемдән алдым, тиһәм, һис тә яңылыш булмаç. Атайым менән әсәйемдең әсәләре - Шәмсиҡәмәр менән Фатима өләсәйҙәрем бәләкәйҙән дин ҡанундарын аңыбыҙға һеңдерҙе, доғалар ятларға, мосолман ҡыҙҙарына хас ипле, итәғәтле, инсафлы булырға өйрәтте. Улар беҙгә ҡоро өгөт-нәсихәт кенә уҡып ҡалманы, үҙҙәренең матур ҡиәфәте, яҡты уйлы булыуы менән дә йәнле өлгө булды. Өләсәйҙәребеҙ булмаһа, күңел донъябыҙ күпкә ярлыраҡ булыр ине. Әсәйебеҙҙең эш һөйөүсәнлеге, бөхтәлеге күскән беҙгә. Ул ҡул эштәренә уғата оçта - бәйләй, сигә, бешеренә ине. Элек кейем-һалымға ҡытлыҡ замандарҙа әсәйем кейемдәрҙе үҙе тегеп кейҙерә торғайны. Ауылда берҙән-бер тегеүсе лә ул булды. Өйөбөҙҙән һис ҡасан гәзит-журналдар, китаптар өҙөлмәне. Быны менән ул беҙҙә аң-белемгә ынтылыш тәрбиәләне. Хәҙер ҡыҙым да өләсәләренә, миңә оҡшарға тырыша, ул да ҡул, аш-һыу эштәренә оçта, бәләкәй саҡта уҡығанда уҡ икмәк бешерергә өйрәнде. Ҡыçҡаһы, өләсәйҙәремдән, әсәйемдән ниндәй матур сифаттар, һөнәрҙәр алғанмын, ҡыҙыма ла шундай өлгөлө тәрбиә биреү маҡсатым.

**Орҡоя АЗАМАТОВА** (№12, 2006): Әсәйем Рауза Бикмаева Көйөргәҙе районының Яҡшымбәт ауылында абруйлы ҡатын-ҡыҙҙарҙан һаналды. Уңғанлығы, етеҙлеге менән генә түгел, ә буй-һыны, үҙенә булған иғтибары менән башҡаларҙы һәр ваҡыт йәлеп итә ине.

Ғаиләлә беҙ өс ҡыҙ тәрбиәләндек. Беҙгә генә түгел, ә һеңлеләренә, башҡа туғандарға, матурлыҡтың нигеҙе - әҙәплелектә, инсафлыҡта, тип төшөндөрөр, йомшаҡ телле, изге күңелле булығыҙ, ир-атты ла, тирә-яҡтағыларҙы ла хайран ҡалдырып, йәм биреп йәшәргә тейешһегеҙ, тип өйрәтер ине әсәйем.

Мин дә үҙ ҡыҙҙарымда иң башта кешегә мөләйем, яғымлы, наҙлы, киң күңелле, башҡаларҙы аңлай белеү сифаттарын тәрбиәләргә тырыштым. Эске матурлығығыҙ тышҡы сифаттарығыҙҙа ла сағылыш тапһын, тип өйрәтә килдем. Шөкөр, ҡыҙҙарым йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәй.

**Тәнзилә ҒӘЛИМОВА** (№35, 2006): Йылайыр районының Юлдыбай ауылында күп балалы ғаиләлә тыуып үçтем. Атайымды итәк тулы бала менән яңғыҙын ҡалдырып, әсәйем йәшләй генә мәрхүмә булып ҡалды. Әсәйем ҡулында 17 йыл йәшәп, унан бик матур тәрбиә алыуға ирештем, күп эштәргә - бәйләргә, аш-һыу оçталығына, башҡа хужалыҡ эштәренә өйрәндем. Уның тураһында матур хәтирәләр ғүмерлеккә йөрәгебеҙ түрендә һаҡланыр.

Әсәйем урынына килгән үгәй әсәйебеҙ Баян апай беҙҙең өсөн бер ҙә үгәй әсәй булманы. Унан беҙ яҡшылыҡ, йылы мөнәсәбәттән тыш, бер насарлыҡ та күрмәнек. Беҙ уны үҙ әсәйебеҙ кеүек яратабыҙ.

Үҙем иһә хәҙер өс бала әсәһемен. Берҙән-бер ҡыҙыма әсәй кешенән талап ителгән тәрбиәне бирергә тырыштым. Бурысымды үтәгәнмендер, тип уйлайым. Ҡыҙым үҙем кеүек бәйләм эшенә оçта. Үҙенә лә, ҡустыһына ла, миңә лә төрлө-төрлө кофта, джемперҙар бәйләп кейҙерә. Аш-һыуға ла маһир: торттар бешерә, салаттар төрләп эшләй. Тәрбиәлелеге менән айырылып тора.

**Әлфиә ҠОЛҺАРИНА** (№23, 2007): Ҡыҙ балаға бөтә тәрбиә әсәйҙән килә. Беҙҙең әсәй тегеү, бәйләү эштәренә, аш-һыуға оçта, ғөмүмән, эшлекле ҡатын булды. Төçөм менән дә, холҡом менән дә әсәйемә оҡшағанмын, оҡшарға ынтылам да. Әсәйем аҙ һүҙле, үтә сабыр, шуның менән дә ул беҙгә өлгө булды. Ул йыш ҡына: "Өндәшмәгән тауҙай бәләнән ҡотолған" тип ҡабатларға ярата ине, ә бит ошо мәҡәлгә сабыр, тотанаҡлы булыу, һүҙеңде уйлап һөйләргә кәрәклеген аңғартҡан мәғәнә һалынған. Тимәк, әсәйебеҙ ҙә беҙгә ошо юçыҡта аҡыл өләшкән. Кейәүгә сығып, ҡәйнә-ҡайны йортона килен булып төшкәс, был һүҙҙәрҙең бик тапҡыр әйтелгәненә инандым.

Атай гел хөкүмәт эше менән йөрөгәс, йорт эштәре лә, балалар тәрбиәләү ҙә әсәй иңенә төштө. Үҙем тормошҡа сыҡҡас, мин дә донъямды әсәйем кеүек көтөргә тырыштым һәм күп осраҡта эштәрем уңышлы барып сыға ине. Беҙ үçкәндә өйҙә һәр ваҡыт тыныслыҡ, бер-береңде аңлау кеүек йылы мөнәсәбәттәр хакимлыҡ итте, әсәйебеҙҙе ауыл халҡы ла ихтирам итә ине. Беҙ ҙә тәртипле үçтек. Беҙҙең осор балалары әҙәплерәк, тыйнағыраҡ ине, хәҙер замана башҡасараҡ. Тәртибен күҙҙән яҙлыҡтырмаç өсөн ҡыҙыңдың яҡын кәңәшсеһе булырға кәрәктер. Ҡайҙа йөрөһәң дә, үҙеңде белеп, тәртипле йөрө, бәхеттең башы тәүфиҡта, тип өйрәтәм ҡыҙыма. Үҙенең дә балаларың булыр, мине аңлар өсөн уларға ниндәй тәрбиә биреренде уйла, тип әйтәм.

**Миңнур НУРИСЛАМОВА** (№17, 2006): Әсәйем тыныс холоҡло, сабыр, аҙ һүҙле, уңған ҡатын ине. Беҙгә бер ҡасан да, һин шулай бул, тип тылҡып тормаһа ла, үҙенең күркәм холҡо, эше менән беҙгә матур тәрбиә бирҙе. Ғаиләлә ете бала үçтек. Иртән торғас та һәр ҡайһыбыҙға тәғәйен эш бүлеп ҡуйыла, уны һәр кем яуаплылыҡ менән ерена еткереп башҡарырға ынтыла торғайны. Беҙҙең көнөбөҙ атай-әсәйгә ярҙамлашып үткәс, ниндәйҙер сит нәмәләр тураһында уйларға буш ваҡытыбыҙ ҡалмай ине. "Әсәһенә ҡарап, ҡыҙын һөй, атаһына ҡарап, улын һөй", тигән мәҡәлгә ярашлы, әсәйем балаларын тәү сиратта хеҙмәт һөйөүсәнлеккә өйрәтһә, ҡарсәйем беҙгә күңел байлығы өләште. Ул хәбәрен һәр саҡ таҡмаҡ, мәҡәл менән аралаштырып һөйләй ине. Берәй күренешкә тап булһа ла, бөжәк, сәскә күрһә лә, таҡмаҡ сығарып әйтеп китер ине. Каникулдарҙа өләсәйемә барһаҡ инде, ул беҙҙе, ҡыҙ балаларҙы, гелән тыйып өйрәтер булды. Ҡыҙ баланы ҡырҡ урындан тый, тигәндәй, ир-егеттәр алдында итәк-еңеңде йыйып, таҙа йөрө, ағайҙарың менән һүҙ көрәштермә, кеүегерәк нәсихәттәр уҡый ине.

Үҙ балама ла яҡшы тәрбиә бирҙем, тип әйтә алам. Үҙем белгән ҡатын-ҡыҙ эшенең бөтәһен дә өйрәтергә тырыштым, тәртип-тәрбиә йәһәтенән дә ҡыҙым йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәç, тип ышанам.

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш

Икенсе көндә беҙ Сапсал йылғасығы исеме менән Сапсал тип аталған Һаҡмар ямынан (XVIII быуатта почта станцияһы атамаһы. - **Ред. иçк.**) 4 саҡырымда булған, үҙенең киңлеге менән түгел (уның урамаһы 4 саҡырымдан да артмай), ә таш киçеүсе Брагинды үлтереү менән билдәле Талҡаç күленә килеп еттек. Был күл үҙенең ҙурлығына ҡарамаçтан, төрлө ваҡ балыҡтарға бай. Был күлдән өçтәрәк алыçтан күренеп торған, Ирәндек тип аталған айырым тау һырттары урынлашҡан. Ул Яйыҡ йылғаһына ҡойған Таналыҡ һәм Төйәләç йылғалары үрҙәре араһында ята.

Ошо күлдән 48 саҡырым алыçлыҡта, Һаҡмар йылғаһы үрендә, Исәт юлы буйында Әүәнәш йылғаһы исеменән алынған Әүәнәш ямына 12 саҡырым етмәçтән, Ҡоръятмаç тигән данлы агат тауы бар, беҙ уға табан барғанда 25 саҡырымдан боролоп, Туралы йылғаһы аша сыҡтыҡ, был йылға буйында ла ошолай уҡ исемләнгән ям бар. Был йылғасыҡтан 12 саҡырым алыçлыҡта Ҡараса йылға (Черная речка) аға; унан ары Бөрсөнсө һәм Ағаулы тигән ике күл бар, икеһе лә балыҡлы. Ҡоръятмаç тауы бейек кенә, әммә һөҙәк, һәм ул араларынан Исәт юлы үткән ике һыртҡа бүленгән.

Таулыҡай старшинаны ҡалдырғас, Уралдан ағып сығып, Ҡана йылғаһына ҡойоусы Күркәтау йылғасығы буйында ошо мәлдә беҙҙән 25 саҡырымда урынлашҡан Төркмән старшина йәйләүенә киттек. Ошо 25 саҡырым беҙгә 100 саҡырымдай тойолдо; сөнки беҙ ылау менән текә тауҙар һәм Яйыҡ йылғаһына ҡойоусы Йылайыр йылғаһының һаҙлыҡлы башы аша үтергә тейеш булдыҡ; ошо көндө беҙҙең бөтә тырышлығыбыҙ Йылайыр йылғасығы башында элек иçкә алынғандарынан бер ние менән да айырылып тормаған ҡарағусҡыл алтын билдәләре булған ике урын менән бүләкләнде.

Ауыр юл беҙҙе ныҡ ялҡытты, һәм беҙ, юлыбыҙҙы еңеллә штерергә теләп, старшинанан айырым оҙатып йөрөүсе талап иттек, һәм ул үҙенең Уралдағы яңылыҡтарын һөйләп, үҙенә яҡын арала йәйләүҙә күсеп йөрөүсе, Уралда бар ерҙәрҙе лә яҡшы белеүсе булып танылған Илеш старшинаны тәҡдим итте.

Старшина Илеш ул саҡта Төркмәндән 4 саҡырымда ғына күсеп йөрөй ине, һәм мин уны йәйләүгә үҙем барып күреүҙе яҡшыраҡ тип табып, шуның менән башҡорттарҙың ғорурлығын ҡәнәғәтләндерергә теләнем: сөнки башҡорттар үҙҙәренең йәйләүендә, бигерәк тә старшиналар, һәр саҡта ла һауалы була. Ваҡытты әрәм итмәйенсә, уның олоçона киттек, унда тик олоғайған кешеләрҙе генә тап иттек; ә старшина мәрхүмде иçкә алыу мәжлесендә ине. Старшинаны мәжлес ваҡытында борсоу йүнле ғәмәл түгел, һәм был мөмкин дә түгел ине: шулай итеп, көслө ямғырға ҡарамаçтан, беҙ ошо бәләле олоçҡа табан сабып сығып киттек. Унда барып еткәндә, ағастарға бәйләп ҡуйылған бик күп эйәрле аттарҙы, ә бер тирмә янында күбәләй өйөлөшөп күренеп торған кешеләрҙе күрҙек; яҡыныраҡ килгәс, беҙгә халыҡ өйөрө булып күренгән кешеләрҙең бик тәртипле икәненә төшөндөк. Башҡорттар балаç менән ябылған махсус эскәмйәләрҙә остары мәрхүм тирмәһенә терәлеп торған өсмөйөш рәүешендә ултыралар ине. Йыйылыш уртаһына ошондай уҡ балаçтар түшәлгән, улар өçтөндә, ҡымыҙ менән тулы турһыҡтарын эргәләренә ҡуйып, мәрхүмдең туған-тыумасаһы ҡырын төшөп ятҡан. Өсмөйөштөң башында старшина урын алған: ян-яғында ултырған ике мулла мәрхүм өсөн доға ҡыла башланы; йыйылған башҡа халыҡ уға ҡушылды. Уларҙың ошолай доға көйләүе беҙ килгәндән алып бер сәғәт тирәһе дауам итте. Доға ҡылыу тамамланғас, ҡымыҙ тарата башланылар. Бында һәр кем уны ҙур туçтаҡтарҙан һемерҙе; беҙгә лә ошо башҡорт нектары тәҡдим ителде: әммә беҙ унан баш тарттыҡ, был башҡорттарға беҙгә ҡарата бер ни тиклем ризаһыҙлыҡ белдереү өсөн сәбәп булды. Ҡымыҙ эсеп бөткәс, мәрхүмде иçкә алыу мәжлесе башланды, унда килеүселәрҙең барыһы ла ҡатнашты. Һыйҙы йылҡы ите һәм Биш Бармаҡ (автор был һүҙҙе баш хәреф менән яҙа. - **Ред. иçк.**) тәшкил итте (Биш Бармаҡ, башҡорттарҙың иң яҡшы ризығы, биш - пять һәм бармаҡ - палец һүҙҙәренән бар булып, ваҡ итеп туралған йылҡы, һыйыр йәиһә ҡуй итенән һәм һалманан тора). Ҡунаҡтарҙың һәр береһе ҡорһағын ҡомһоҙланып тултырҙы. Бында күп итеп һауыт-һаба әҙерләү кәрәк булманы. Барса ҡунаҡтар дүрт икмәк туçтағы менән ҡәнәғәт булды, уларға ит турап һалып, бармаҡтары менән семтемләп алып ашанылар. Старшина һәм уға яҡын булғандар айырыуса хөрмәт ителде. Әңгәмәләшеүселәрҙең һәр ҡайһыһы, үҙ старшинаһына ярарға тырышып, бер семтем бишбармаҡ йәки туралған ит әләктереп алып, уны старшинаға һоғондорҙо. Ул ауыҙына һалынғанын йотоп та өлгөрмәй, икенсеһе уға сираттағы өлөштө ҡаптырырға әҙер тора. Ошо ғәҙәт нисек кенә йәмһеҙ булмаһын, ул башҡорттарҙа ололау ғәмәленән һанала. Ит һурпаһы һыйҙың һуңғыһы булды, уны башҡорттар туçтаҡтан һемерҙе; һурпа эсеп бөткәс, улар Аллаһҡа шөкөр ҡылып, һый өсөн хужаға ла рәхмәт белдерҙе.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

**✓ *"Балаларҙы нисек тә ҡурсалап алып ҡалырға тырыш, килен. Башҡорт улай булмаған, тип, башҡортлоҡтарына баҫым яһа. Телдән айырма. Туған тел - беренсе ярҙамсың булыр", - тиер ине.***



**Кешенең тәртибе, төрлө сифаттары, яман менән яҡшы тураһындағы аңы, донъяға ҡарашы - барыһы ла иң тәүҙә ғаиләлә формалаша. Шуға ла ғаилә - ул иң тотороҡло, иң ышаныслы, иң яҡшы тәрбиә мәктәбе булыуҙан туктағаны юҡ. Халҡыбыҙҙағы ғаилә тәрбиәһенең матур өлгөләрен йыйырға булышлыҡ итә гәзитебеҙ биттәрендә "Ғаилә ҡоро" рубрикаһы ла. Быға тиклем баҫыла килгән ҡорҙарҙан да өҙөктәр тәҡдим итергә булдыҡ әле был 400-се һаныбыҙҙа.**

**Бибиһан менән Мөхәмәтйән ҠАҘАҠБАЕВтар, Хәйбулла районы** (№ 50, 2004 йыл):

**▸ Балаларығыҙ тәрбиәһенә ниндәй сифаттар һалырға тырыштығыҙ?**

**Мөхәмәтйән ағай:** Ейәнғол уҙамандың әйткәнен һәр саҡ иҫтә тоттом: кешегә яҡшы булығыҙ, һауаланмағыҙ, һоранмағыҙ. "Берәйһе ашатһа икән, берәйһе бирһә икән", - тип, кешенән өмөт итеп тормағыҙ, бар уй-фиғеле ашап-эсеүҙән артмаҫ, ҡорһаҡ ҡына уйлаған кешелә әҙәп тә самалы ғына, үҙенә кәрәк мәлгә етерлек кенә булыр, ти ине шул әсәйем. Үҙе кешегә барһа, иң тәүҙә китаптарына күҙ ташлар ине. Китаптары булмағандарға иҫкәртеү ҙә яһағандыр. Тәғәйен ишетмәһәм дә, ни өсөндөр, шулай иҫтә ҡалған. Ә әсәйемдең һүҙенә ҡолаҡ һалалар ине. Хатта үҙенән өлкәнерәктәр ҙә кәңәшкә килә ине.

шундай яуаплылыҡ йәшәй. Күптәр үҙ шәжәрәһен белеп бөтмәгән заманда ҡәйнәм ейәндәренә ҡайнымдың ете быуын шәжәрәһен төҙөп бирҙе. Туғанлыҡ көсө, тимәк, улар нәҫелендә төптән, тәрәндән килә.

Йоҡонан уянғас та һәр кемгә "Хәйерле иртә!" тип өндәшеү - ул ғаилә өсөн ғәҙәти күренеш. Беҙҙең балалар ҙа шуға өйрәнде. Яңы көн башланғанда яҡындарындан

**рын тойомлауҙа улар бер-береһе өсөн барыбер сер булып ҡаламы икән, әллә бергә уҙған уртаҡ ғүмер ул серҙе аса барамы?**

**Сәғит:** Бәхет серен ситтә эҙләмәйҙәр, ул янында. "Йәшәй-йәшәй ул сер асыла", ти ҡайһы берәү. Ә Зөлфиә минең өсөн йылдар үткән һайын серлерәк була бара. Зирәк аҡылына, сабырлығына, туған йәнле булыуына, ике яҡты ла тиң күреп хөрмәтләүенә һоҡланам. Бала сағынан әсәйһеҙ ҡалыуы, туғандары өсөн яуаплылыҡты кескәй генә индәренә алыуы, тормоштоң иң ауыр юғалтыуҙарын, әрнеүҙәрен, бәләкәйҙән татып белеүе лә уны донъяға башҡаса ҡарарға өйрәткәндер. Мин уны әсәйемә оҡ-

**на файҙаланып, ғаиләһен туйындырып, балаларына әкиәттәр һөйләп, йырҙар йырлап ҡына йәшәр ине лә ҡатын-ҡыҙ, заман тейешенсә мөмкинлек бирмәй. "Атай ролен" үтәүҙе лә, әсәй булып ҡалыуҙы ла ҡатын атҡарырға тейеш. Ә гүзәл зат тәбиғәте өсөн бәпес үҫтереү осоронан да тәмлерәк, ләззәтлерәк, ҡәҙерлерәк ваҡыт юҡтыр...**

**Әминә:** Декрет отпускыһы ул - ҡатын-ҡыҙ тормошондағы иң мөһим, иң бәхетле осор. Һәр әсә уны үҙ ваҡытын тултырып, тейешенсә үткәрергә хоҡуҡлы. Баланың шәхес булып формалашыуҙа иң нескә кисерештәр менән, иң тиҙ үҫешкән мәле. Бөтөн нәмәне лә һиҙгер тойомлаған, наҙға,

# КАТЫН-КЫҘҘЫҢ ТӨП

## ир-егеттеке - ҡатынына ошо бурысын

тип ҡабатлай ине. Тәңре һеҙгә бик ҙур байлыҡ - аң, аяҡ-ҡул, баш биргән. Кешелә бар ағзанан һеҙҙе лә мәхрүм итмәгән. Бәндәгә бәндә булып һоранмағыҙ, ти торғайны. Шөкөр, һоранманыҡ. Бибиһан менән икәүләшеп тырыштыҡ. Тәңре бер ҡыҙ, биш ул бирҙе. Ҡортома Ҡаҙаҡбаевтар нәҫеле тигәндер. Аҡмулла нәсихәтен әйтә килдем:

Аҡыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:

Иман, аҡыл, әҙәп, ихлас - юлдаш, тигән.

Сәйетгәрәй олатайым: "Белем кеҫәлә ятҡан аҡса менән бер. Кәрәк саҡта тотаһың да файҙаланаһың. Уҡығыҙ, белем алығыҙ", - тине. Ул һүҙҙәрҙе лә иҫтә тоттом. Балаларҙы уҡыттым. Унан һуң, милли ғорурлыҡ көслө булды әсәйемдә. Тирә-йүндәге әҙәпһеҙлекте халҡынан айырылып, илгә сәселгән килмешәктәрҙән күрҙе. Үҙебеҙҙең ижадыбыҙҙы яҡшы белде, шуға ла тәрбиә ҡанундарыбыҙҙы ла юғары баһалай ине.

**Бибиһан апай:** Ауылда берәй тәртипһеҙлек тураһында ишетеп ҡалһа: "Килмешәктәр башланы намыҫһыҙлыҡты. Улар арҡаһында ололар әйткәне һанға һуғылмай", - ти торғайны бейем. "Балаларҙы нисек тә ҡурсалап алып ҡалырға тырыш, килен. Башҡорт улай булмаған, тип, башҡортлоҡтарына баҫым яһа. Телдән айырма. Туған тел - беренсе ярҙамсың булыр. Телде белһә, өлкәндәр әйткәнен аңлар, телде белһә, күңелдәренә моң ҡуныр", - тиер ине. Бейемдең һүҙҙәрен яҙа барып, китап итеп сығарырлыҡ ине инде.

**Мөхәмәтйән ағай:** Милләт ғорурлығы булмаған кешенең



***Милли ғорурлыҡ көслө булды әсәйемдә. Тирә-йүндәге әҙәпһеҙлекте халҡынан айырылып, илгә сәселгән килмешәктәрҙән күрҙе. Үҙебеҙҙең ижадыбыҙҙы яҡшы белде, шуға ла тәрбиә ҡанундарыбыҙҙы ла юғары баһалай ине. Милләт ғорурлығы булмаған кешенең бар уй-фиғеле ашап-эсеүҙән артмаҫ, ҡорһаҡ ҡына уйлаған кешелә әҙәп тә самалы ғына, үҙенә кәрәк мәлгә етерлек кенә булыр, ти ине шул әсәйем. Үҙе кешегә барһа, иң тәүҙә китаптарына күҙ ташлар ине. Китаптары булмағандарға иҫкәртеү ҙә яһағандыр. Тәғәйен ишетмәһәм дә, ни өсөндөр, шулай иҫтә ҡалған. Ә әсәйемдең һүҙенә ҡолаҡ һалалар ине. Хатта үҙенән өлкәнерәктәр ҙә кәңәшкә килә ине.***

**Зөлфиә менән Юнир НАСРЕТДИНОВтар, Өфө ҡалаһы** (№24, 2007).

**▸ Ғаилә бәхетенең бөтөн хикмәте татыулыҡҡа, үҙ-ара аңлашыуға бәйле. Гел генә һандуғастай һайрашып тороп булмаған саҡта ла татыулыҡты һаҡлай белеү мөһим. Һеҙҙең ғаиләгеҙҙең татыулығы, берҙәмлеге нимәгә нигеҙләнә?**

**Зөлфиә:** Ҡәйнәмде, Сания Хәбиәхмәт ҡыҙын, ауылда ағинәй тип йөрөтәләр. Намаҙ, Ҡөрьән уҡыусы, кешеләрҙе изгелеккә өйрәтеүсе, йәшәү ҡәҙерен бер-береңә яҡшы мөғәмәләлә булыуҙа күреүсе шәхес ул. Туғанлыҡ тойғоһон бөтөн ҡиммәттәрҙән юғары баһалай. "Бер-берегеҙ өсөн ҡунаҡ ҡына булып йәшәһәгеҙ ине", ти. Ҡунаҡҡа йөрөшөп түгел, ә бер-беребеҙҙе иң ҡәҙерле ҡунаҡтай күреп йәшәүебеҙҙе теләй, шундай тәрбиә биргән. Үҙ проблемабыҙ менән үҙебеҙ генә тороп ҡалһаҡ, ни эшләрбеҙ икән, тигән ҡурҡыу юҡ беҙҙә - туғандарҙың иңен ҡуясағына ышанабыҙ. Үҙебеҙҙә лә уларға ҡарата ошондай һүҙҙәрҙе ишетеү шул тиклем рәхәт.

Ҡәйнәм һәр һүҙен әйтем-мәҡәлдәр, тапҡыр фекерҙәр менән һөйләй. Уның әйткәндәрен ишетеп кенә түгел, тыңлап ҡабул итәһең. Ҡағыҙ битенән бигерәк, күңелгә яҙылып бара ул. Быуаттар төпкөлөнән бирле заманалар нисек кенә үҙгәрмәһен, тормош асылы хаҡындағы мәҡәлдәрҙең мәғәнәһе үҙгәрмәй, халыҡ аҡылының тәрәнлеге иҫ киткес. Татыулыҡтың баһаһын ана шунан - өлкәндәрҙең лөғәтенән дә өйрәнәбеҙ. Ошондай ғаиләгә лайыҡлы килен булыу үҙе үк яуаплылыҡ.

**▸ Ир-егетте ҡатын-ҡыҙҙың серле булыуы тартып тора. Ошо сер асылып бөтһә, уның, тимәк, бергә йәшәүҙең дә ҡыҙығы ҡалмай. Ғаилә эсендәге мөнәсәбәттәрҙә ир менән ҡатындың ҡыҙыҡһыныуҙары уртаҡ булһа ла, бер-береһенең шәхесен асыуҙа, тойғола-**

шатып һайлаһам, ул миндә атаһының һыҙаттарын күргән. Ҡайным менән күп ғәҙәттәребеҙ оҡшаш. Ғаиләнең терәге булыу, уны хәстәрләү бурысында ҡайнымдың бик аҡыллы үҙ фәлсәфәһе бар.

**Зөлфиә:** Сәғиттең кешелеклелеге, бер һүҙле булыуы, тәрбиәлелеге оҡшай миңә. Ысын ирҙәргә хас һалҡын ҡанлы, тыныс, сабыр булыуы ла ышаныс бирә. Бер-береңде аңлау, аңларға тырышыу, ярҙам итеү, ышаныс-таяу булыу һәм хәләл парыңды иң ҡәҙерле, яҡын кешең, таянысың итеп күреү мөһим. Үҙ-ара ихтирамды юғалтыуҙан ҡурҡырға, ояла белергә лә кәрәк.

**Әминә менән Фирдус МӨХӘМӘТЙӘНОВтар, Өфө ҡалаһы** (№32, 2007):

**▸ Бала бағыу бурысы ҡатын-ҡыҙ яуаплылығына барыбер күберәк йөкмәтелгән. Ире тапҡан малды матур ғы-**

иғтибарға, яратыуға айырыуса мохтаж сағы сабыйҙың. Ошо мәлде әсә кешенең балаһы янында үткәреүе мөһим. Әммә беҙҙең йәмғиәттәге ҡатын-ҡыҙ һәм бала хоҡуҡтарын яҡлаусы закондар ошо ике мөһим талапты ла тейешенсә атҡара алмай. Замананың йәш әсәһе, кеше яллап, сабыйын сит-яттар тәрбиәһенә ҡалдырырға мәжбүр. Хәйерсе генә эш хаҡын ана шул "тәрбиәсе" өсөн дә бүлергә тейеш. Ҡайһы берәүҙәр, аҡса етмәү сәбәпле, балаһын олатай-өләсәй ҡарамағына ҡалдырып, эшкә сыға. Был да дөрөҫ түгел. Үҙ атаәсәйенә ышанмауҙан түгел, ә балаға мотлаҡ үҙ әсәһенең йылыһы кәрәк. Һәр быуындың үҙ фәлсәфәһе, үҙ фекере, шунан сығып бала тәрбиәләйбеҙ. Өлкәндәрҙең донъяға ҡарашы бөгөнгө йәштәрҙеке менән тап килмәүе лә ихтимал.

**Фирдус:** Хоҙай ҡатын-ҡыҙға төп бурыс итеп бала табыуҙы йөкмәткән икән, беҙ, ир-егеттәр, ҡатындарыбыҙға ошо бурысын атҡарыуҙа төп ярҙамсы, төп терәк булырға тейешбеҙ. Бала баҡҡан ҡатындан да матурыраҡ, нескәрәк, йомшағыраҡ зат юҡ. Бала һөйөүсе әсә - донъялағы иң изге йән. Ул бит бөтөн йөрәген биреп, икебеҙҙең уртаҡ балабыҙҙы, уртаҡ бәхетебеҙҙе хәстәрләй. Нәҡ шул мәлдә - ғаилә ҡороп, балалар үҫтерә башлаған саҡта айырыуса иғтибарлы, сабыр булырға кәрәк. Юғиһә, хәҙерге йәштәр ғаилә ҡорғас та бала тапмаҫҡа тырыша, быға әлеге лә баяғы, матди ауырлыҡтар ҙа сәбәпсе, шулай уҡ улар бер-беребеҙҙе һынап-тикшереп

***✓ Өйләнгәнһең, балаларың тыуған икән, "яратам", "яратмайым" менән уйнарға ярамай. Сөнки бала һинең "любит", "не любит"ыңды аңламай. Бына шуның өсөн дә йәштәр ныҡлы, төптән уйлап өйләнергә тейеш.***



ҡарайбыҙ әле, тип тә уйлай. Тәүге осорҙа ике шәхестең холҡо былай ҙа ныҡ һынала, шунан айырылышып ҡуялар, ә бала уртаҡ яуаплылыҡты ныҡыта, мөнәсәбәттәрҙе яҡынайта.

Бер-ике генә бала табыу менән сикләнгән йәштәрҙе ғәйепләп булмай. Декрет аҡсаһын арттырһалар, йәки, исмаһам, ошо мәлдә ирҙең эш хаҡын күберәк түләһәләр, бала табыуға бер ынтылыш булыр ине. Әҙ бала үҫтереүҙең һөҙөмтәһе өлкәнәйгән һайын һиҙелә. Ҡала шарттарында элек бөгөнгөләй матди мөмкинлегебеҙ булһа, тағы бер-икене табыр инек. Балалар үҫеп таралышһа, йәш көйө икәүҙән-икәү ҡыйын барыбер.

бит. Ауылда ни, һәр кем эш менән сыныҡып үҫә инде ул.

**Фәүкинур:** Ҡыҙ бала тураһында хыялландым. Аҙаҡ малайҙар тәрбиәләүгә шул тиклем өйрәнеп киттем: берәйһенең ҡыҙын һөйгәндә лә яңылыш: "Эй, улымды", - тип ысҡындырам. Аталары тәртип ярата, мин ирек бирергә тырышам. Әммә аталарының абруйын төшөрмәскә тырышып, гел ҡап уртаға һуҡтырам. Бына шундайыраҡ беҙҙең ғаиләләге тәрбиә. Улдарым берәй нәмә эшләр булһа гел генә: "Ашыҡмағыҙ, атайығыҙ ни тиер, башта уның менән кәңәшләшергә кәрәк", - тип өйрәттем. Атайҙың абруйы булмаһа, бала тәртипһеҙ үҫә - шунан ҡурҡтым. Истамғол

нына күрә белемле, әммә бигерәк йыуаш булды, ә әсәйем, киреһенсә, көслө холоҡло ине. Мин шуға ла бала саҡтан ғаиләлә ҡатындарҙың ирҙәре менән идара итеүен яратманым. Шуға ла "Эй, Хоҙайым, ирем талапсан, аҡыллы булһын", тип теләй инем. Минең өсөн ир-егеттең яҡшы сифаты - уҫал, талапсан һәм аҡыллы булыу. Шундай кешегә кейәүгә сыҡтым, теләгәнем алдыма килде. Ҡатын да аҡыллы булырға тейеш, һүҙ ҙә юҡ. Йәш ҡыҙҙарға шуны әйтергә теләйем: теләкте теләй белергә кәрәк, теләгән теләктәр тормошҡа аша ул. Мин иң бәхетле ҡатын. Өйҙә ир хужа булһын, кәрәк саҡта һине яҡлаһын да. Ирең шундай булһа, йә-

Үҙе лә эшләй алыр ине уны, тик шулай итеп, һәр саҡ минең кәрәклекте белдереп тора, күңелдә үҫтерә белә. Ул миңә шундай булғас, мин дә уға шундай мөнәсәбәттә. Шуға ла бер генә үкенесем юҡ был донъяла. Ғаиләлә оло ағай булдым, Әлфиә менән икәүләп барыһына ла үрнәк булдыҡ. Минең Рәмил энекәшем әйтә: "Ерҙә Рәис ағайым кеүек бәхетле кеше бармы икән, хәҙер үҙе алтмышҡа етеп, ил ағаһы булырлыҡ йәштә, атаһы ла, әсәһе лә иҫән", ти. Ҡайтып йөрөрлөк тыуған йортом, кәңәш һорарлыҡ, һөйләшеп ултырырлыҡ ата-әсәйем, һәр саҡта ла терәк була белгән, мине аңлаған ҡатыным, гел ҡыуандырып ҡына торған ба-

Әлбиттә, бөтә күңелеңде эшкә егеп, эш менән янғанда, мөхәббәт, бәлки, алда байраҡ кеүек елберләп бармайҙыр. Әммә мөхәббәтеңдең ихласлығы һәм ныҡлығы аралар һәм ваҡыт айырмалығында нығыраҡ һыналғанын яҡшы беләм. Гастролдәрҙә Испания, Португалия, Германия һәм башҡа илдәрҙә булғаным бар. Ситтән кәләшеңде, балаларыңды бер күрергә зар-интизар булып ҡайтаһың икән, тимәк, ул - мөхәббәт!

Тормошта, ғәҙәттә, ир менән ҡатын араһында төрлө аңлашылмаусанлыҡтар, аралар һыуыныуы, бер-беренә ҡарата хыянат осрап тора. Әммә быға ҡарата минең үҙ фекерем бар: буш ваҡыттың күп булыуы-

# БУРЫСЫ – БАЛА ТАБЫУ,

## атҡарыуҙа төп терәк булыу

Ирҙәр, ғәҙәттә, эштән ҡайтҡас, арығанлыҡҡа һылтанып, ҡатынының хәстәрләүенә һалыша. Әсәһе кеүек күрә ҡатынын: барыһын да йүнләргә, тәрбиәләргә, өҫтәүенә, иркәләргә лә бурыслы һанай. Ҡатыны бала ҡарап, өйҙә генә ултыра ҡалһа, бөттө баш - бар мәшәҡәтен уға ауҙара. Бала тәрбиәләгән ошо ҡатын урынына ирҙең үҙен ҡалдырып ҡара - өс көн дә сыҙай алмаясаҡ. Тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫлек ул ҡатын-ҡыҙҙың эше. Һөҙөмтәһе лә күҙгә күренмәй, әммә ваҡ мәшәҡәт икеләтә-бишләтә арыта.



***Хоҙай ҡатын-ҡыҙға төп бурыс итеп бала табыуҙы йөкмәткән икән, беҙ, ир-егеттәр, ҡатындарыбыҙға ошо бурысын атҡарыуҙа төп ярҙамсы, төп терәк булырға тейешбеҙ. Бала баҡҡан ҡатындан да матурыраҡ, нескәрәк, йомшағыраҡ зат юҡ. Бала һөйөүсе әсә - донъялағы иң изге йән. Ул бит бөтөн йөрәген биреп, икебеҙҙең уртаҡ балабыҙҙы, уртаҡ бәхетебеҙҙе хәстәрләй. Нәҡ шул мәлдә - ғаилә ҡороп, балалар үҫтерә башлаған саҡта айырыуса иғтибарлы, сабыр булырға кәрәк. Юғиһә, хәҙерге йәштәр ғаилә ҡорғас та бала тапмаҫҡа тырыша, быға әлеге лә баяғы, матди ауырлыҡтар ҙа сәбәпсе, шулай уҡ улар бер-беребеҙҙе һынап-тикшереп ҡарайбыҙ әле, тип тә уйлай. Тәүге осорҙа ике шәхестең холҡо былай ҙа ныҡ һынала, шунан айырылышып ҡуялар, ә бала уртаҡ яуаплылыҡты нығыта, мөнәсәбәттәрҙе яҡынайта.***

**Фәүкинур менән Истамғол САФИНдар, Әбйәлил районы, Амангилде ауылы** (№1, 2008):

▶ **Атай-әсәй булғас, тәрбиә мәсьәләһе үҙенән-үҙе ҡалҡып сыға. Һеҙҙең үҙегеҙҙе нисек тәрбиәләнеләр? Бала тәрбиәләүҙә үҙегеҙ ниндәй алымдар ҡулландығыҙ?**

**Истамғол:** Әллә инде. Мине ҡырыҫыраҡһың, тиҙәр. Өйҙә былай, атайыма ҡарағанда, әсәйем уҫалыраҡ ине. Мине өләсәйем үҙ ҡанаты аҫтына алып тәрбиәләне. Әле лә иҫләйем: бала саҡта оҙағыраҡ уйнап, бысранып ҡайтһам, әсәй ҡулына сыбыҡ ала, ә өләсәй мине юрған менән ҡаплап, шуның аша һуҡтыра торғайны. Үҙемдең ҡатылыҡҡа килгәндә, мин хәрбиҙәрсә тәртип яратам. Ҡатылығым да шул: башта ҡаты булып ҡыланам да, аҙаҡ йылмаям да ҡуям. Шуныһына ҡыуанам: әле улдарымдың ҡулдарынан килмәгән эш юҡ, бесәнен дә сабалар, башҡа эштән дә ҡурҡып тормайҙар. Ауыл ере өйҙә булмаһа ла, уның һынланышы, образы һәр саҡ эргәбеҙҙә йөрөй.

**Әлфиә менән Рәис ХӘСӘНОВтар, Өфө ҡалаһы** (№ 32, 2008 йыл):

▶ **Йәш саҡта һәр кем буласаҡ ире, ҡатыны, ғаиләһенең ниндәй буласағын күҙ алдына килтерә, хыялдар ҡора. Шул саҡтағы хыялдарығыҙ тормошҡа аштымы? Байтаҡ ваҡыт донъя көткәс, ғаилә тураһындағы ҡараштарығыҙ үҙгәрмәнеме?**

**Әлфиә:** Әсәйем дә, өләсәйем дә, бала саҡта теләгән теләктәр ҡабул була, тип әйтә торғайны. Әле уйлайым да, был, ысынлап та, шулай икән. Ғәҙәттә, нимән юҡ, шуны теләйһең бит ул. Атайым замашәүе рәхәт. Донъя бит ул бер тауға мендерә, бер төшөрә, бер урталыҡта тота. Рәистең көслө, тура һүҙле булыуы арҡаһында ҡыйын саҡтар ҙа булды. Бер ҡасан да уға ҡаршы һүҙ әйткәнем юҡ, сөнки мин бәләкәйҙән бер тормош ҡанунын яҡшы үҙләштергәнмен: әгәр ҙә һин иреңде хөрмәт итмәһәң, ул һиңә лә, һинең туғандарыңа, дуҫтарыңа ла һәйбәт мөнәсәбәттә булмай.

**Рәис:** Минең өсөн идеаль ғаилә - мин үҙем тәрбиәләнгән ғаилә, идеаль ҡатын - ул әсәйемә оҡшаған ҡатын. Әлфиә гел генә көсһөҙ булып ҡала белде, уның янында шул тиклем рәхәт. Яҙ һайын баҡсала нимәләр сәсергә булһа, "Һин түтәлдәрҙе шәп эшләйһең", тип, минән генә түтәл эшләтә.

лаларым, эргәмдә олатай тип йүгереп йөрөгән ейәнем булғанда, бәхетле кеше булмай, кем булаһың инде?!

**Әнисә менән Зәкир ҮҘӘНБАЕВтар, Сибай ҡалаһы** (№51, 2005 йыл):

▶ **Зәкир, бына һеҙгә ҡарайһың да, һеҙҙең үҙ эшенә, ғаиләһенә мөкиббән киткән кеше икәнегеҙҙе аңлайһың. Был һеҙҙең рухи яҡтан ғына түгел, ә әхләҡи яҡтан да ныҡ ышаныслы, көслө икәнегеҙҙе раҫлай. Мөхәббәт һәм нәфрәт, тоғролоҡ һәм хыянат, ғаилә һәм бурыс кеүек төшөнсәләр һеҙҙең өсөн ниҙән ғибәрәт?**

**Зәкир:** Әнисәмдең күңелен нисәмә йылдар буйы яулап алдым мин. Уға ҡарата һөйөү хисем көслө ине. Инде бына нисә йылдар бергә йәшәһәк тә, уға ҡарата тойғоларым һаман да йәш ваҡыттағы һымаҡ. ...нан, эш юҡлыҡтан килеп сыға улар. Ураҙа тотоу, дингә яҡын булыу, баш күтәрмәй эшләү яңылыш аҙымдарҙан һаҡлай. Хыянат тигәне ғаилә өсөн иң ҡурҡынысылыр ҙа. Эшеңдә, һөнәреңдә, йәшәгән урыныңды алмаштырып була, әммә ләкин ғаиләне алмаштырып булмай. Өйләнгәнһең, балаларың тыуған икән, "яратам", "яратмайым" менән уйнарға ярамай. Сөнки бала һинең "любит", "не любит"ыңды аңламай. Бына шуның өсөн дә йәштәр ныҡлы, төптән уйлап өйләнергә тейеш. Малайҙарыма ла шуны һеңдерергә тырышасаҡмын.

**Әнисә:** Бөгөн нәҡ ошо ҡиммәттәр тураһында күптәр уйланмай, ир-ҡатын, ата-әсә-бала мөнәсәбәтенә бик еңел ҡарай. Ә мин был йәһәттән иремә рәхмәтлемен. Үҙемә ихтирам, һөйөү менән ҡарағас, балаларҙа ла шундай уҡ мөнәсәбәт барлыҡҡа килә. Беҙҙең ғаиләнең тәрбиә юҫығында үҙ йолаһы бар: бишектәге балаға мин, әсәй булараҡ, бар наҙымды, һөйөүемде бирәм, үҫә төшкәс, күп кенә тәрбиә мәсьәләһен атайҙарына тапшырам. Улар менән башлыса ул шөғөлләнә.

**Зәкир:** Ир менән ҡатын, бергә йәшәй-йәшәй, бер бөтөнгә әйләнеп китә икән. Беҙ хатта бер төрлө уйлайбыҙ. Мин берәй нәмә тураһында һүҙ башлаһам, уның күҙҙәренән үк минең кеүек уйлағанын, хуплағанын күреп торам. Мин иһә үҙ яғымдан ғаиләлә әсәй кеше урынын малайҙарыма күрһәтә беләм. Әсәй - ул ғаиләләге иң ҡәҙерле, иң төп кеше. Һәм улдарым быны аңлай.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

✓ *Ҡатын булараҡ, миңә түҙемлерәк һәм сыҙамлыраҡ булырға тура килә. Уның менән мөғәмәләлә бер сик барын баштан уҡ аңланым һәм бик ныҡ "тулаған" саҡтарҙа ла шул сикте бер ҡасан да аша атлап сыҡмайым.*



**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Нәфисә менән Марат ТУЛЫБАЕВтар, Өфө ҡалаһы** (№42, 2005 йыл):

**▸ Ғаилә - йәмғиәтебеҙҙең бер өлөшө, тибеҙ. Йәмғиәттең үҙ ҡанундары, йолалары, традициялары булған кеүек, һеҙҙең ғаиләгеҙ ныҡлығын, именлеген һаҡлаусы үҙ традицияларығыҙ ҙа барҙыр, моғайын?**

**Марат:** Ғаилә тигән төшөнсәне мин икенсерәк аңлайым. Әйтәйек, кемдер сәй яһағанда сынаяҡҡа шәкәрҙе тәүҙә һала ла, аҙаҡ һөтөн һалып, сәйен яһай. Икенсе берәү, киреһенсә, тәүҙә һөтөн һалып, сәй яһай ҙа, аҙаҡ шәкәр һала. Шуның кеүек, Нәфисәләр яғында - үҙ традициялары, минең яҡта - үҙебеҙсә. Беҙ үҙебеҙҙең ғаиләлә иһә, шул ике яҡтың да традицияларын һеңдереп, байыттыҡ. Ғөмүмән, бөтә ғаиләләргә лә хас иң матур традиция - ул туғандар менән бергә матур итеп аралашып йәшәү. Әммә аралашыу ул мәжлес ҡороп, тостар әйтеп, бер-берендә маҡтап, эсеп ултырыуҙы аңлатмай. Эсеп йөрөргә беҙҙең ваҡыт та, теләк тә юҡ.

**Нәфисә:** Ғаиләбеҙҙең ныҡлығы тураһында һүҙ алып барғанда, әлбиттә, иң тәүҙә беҙгә тәрбиә, аҡыл биргән атайәсәйҙәребеҙгә рәхмәттәр уҡыйбыҙ. Икенсенән, студент саҡта төҙөлгән ғаиләләр ныҡлы, татыу, сыныҡҡан була, сөнки бөтә ауырлыҡты ла икәүләп кенә атҡарып сығырға тырышаһың бит инде. Бер юлы уҡыйһың да, балалар ҙа үҫтерәһең. Ҡыҙыбыҙ тыуғанда Маратҡа 26 йәш ине, шуғалыр ҙа ул ғаилә күтәргә, балалар аҫырарға әҙер ине. Уның миңә ҡарағанда атайлыҡ хисе көслөрәк булғандыр, моғайын. Һәр ваҡыт ҡәҙерләп, ҡурсалап ҡына торҙо. Балаларға ла хисназын йәлләмәне һәм йәлләмәй.

Ғаиләлә идеаль мөнәсәбәткә, ир менән ҡатын әрләшмәй, тигәнгә ышанмайым, тимәк, ул нормаль ғаилә түгел. Ике ғаиләлә тәрбиәләнгән кешеләр араһында, ғөмүмән, ике кеше араһында фекер айырымлыҡтары һәр ваҡыт була. Шунлыҡтан, үҙ фекереңде яҡларға, нимәлер иҫбатларға тырышып, әрләшеп киткән саҡтар була һәм булырға тейеш. Тик ул хәлдән аңлашып, уртаҡ фекергә килеп сыға белергә генә кәрәк.

Мараттың шул сифаты оҡшай: ул өҫтәл артына ултырып, һөйләшеп-аңлашыу яғын ҡарай. Ул тәрбиә уның ата-әсәһе ғаиләһенән килә: уларҙа ла ҡысҡырышып, битәрләшеү тигән нәмә юҡ. Мин шуға ҡәйнәмә рәхмәтлемен. Шеште ваҡытында яра беләбеҙ, тип, мин ниндәйҙер яңы нәмә асмайым, ул икебеҙҙең дә атай-әсәйҙәребеҙҙән килгән сифат.

**Гүзәл менән Ғәли ҠАЗБУЛАТОВтар, Өфө ҡалаһы** (№29, 2005 йыл):

**▸ Аңлашылмаусанлыҡтар килеп сыҡҡан мәлдәрҙә барыһына ла төкөрөп, күҙ йомоп, бер-береңдән азат булыу, арыныу, ял итеү теләге тыуғаны бармы?**

**Ғәли:** Аңлашылмаусанлыҡтарға килгәндә, ундай нәмәләр беҙҙең арала булманы һәм юҡ, тип әйтә алам. Сөнки бер-береңә өйрәнеү, яраҡлашыу осорон беҙ, аҡыл, тормош тәжрибәһен туплап өйләнешкән кешеләр булараҡ, еңел кисерҙек, сөнки алдан уҡ, сетерекле хәлдәр килеп сыға ҡалһа, үсегешеп-үпкәләшеп йөрөмәйек, ә күҙгә ҡарап, аңлашырға тырышайыҡ, тип һөйләшеп-килешеп ҡуйғайныҡ. Шулай эшләйбеҙ ҙә, һәм был беҙҙең ғаиләлә проблемаларҙан ҡотолоуҙың иң дөрөҫ юлы.

**Гүзәл:** Беҙҙең мөнәсәбәттәрҙең йылы булыуы тағы ла бер нәмә менән бәйле: икебеҙҙең дә эшмәкәрлек даирәбеҙ бер төрлө һәм бер кимәлдә булғас, бер-беребеҙгә аңлап ҡарайбыҙ, ярҙам итергә тырышабыҙ, хатта әҙерәк ярыш сәме лә ят түгелдер. Әлбиттә, Ғәли минән уҡыу, эш, тәжрибә яғынан бер нисә аҙымға алда бара, һәм был минең өсөн шул тиклем йәтеш: ул миңә аҡыл-кәңәшен йәлләмәй, уңышҡа этәрә, хаталарҙан ҡурсалай.

Йондоҙнамә буйынса холоҡ-ҡылыҡтарыбыҙ тура килмәй: Буғаның характеры ауырыраҡ. Ә мин - Игеҙәк, минең менән уға еңелерәк. Әлбиттә, ҡатын булараҡ, миңә түҙемлерәк һәм сыҙамлыраҡ булырға тура килә. Уның менән мөғәмәләлә бер сик барын баштан уҡ аңланым һәм бик ныҡ "тулаған" саҡтарҙа ла шул сикте бер ҡасан да аша атлап сығырға тырышмайым. Икенсе яҡтан, минең нәҡ Игеҙәк булыуым конфликттарҙан ҡасыу мөмкинлеген бирә лә инде, сөнки мин йә аҡ, йә ҡара ғына түгелмен, ә төрлө төҫкә инә алам.

Икенсе яҡтан, туйҙан һуң әсәйем миңә: "Ҡыҙым, кире ҡайтып йөрөмә", - тине. Был да минең өсөн ҙур ҡулламаға әүерелде.

**Ғәли:** Эйе, ҡәйнәмдең: "Илап, кире ҡайтһаң, ҡыуып сығарам. Ауыр мәлдәрҙә түҙ", - тигән һүҙҙәрен ул ваҡытта мин ҡаты бәрелде тип баһалағайным. Баҡһаң, был һүҙҙәрҙә тормош фәлсәфәһе ята икән. Бөтә әсәйҙәр ҙә минең ҡәйнәм кеүегерәк фекерләһә, ғаиләләр тулы һаҡланыр, ата-әсәһе айырылышыуҙарҙан балалар яфа сикмәҫ ине.

**Минегөл менән Зәкир ИШЕМҒОЛОВтар, Өфө ҡалаһы** (№20, 2005 йыл):

**▸ Ғашиҡ егеттәр борондан һөйгәне янына сәскә тотоп килер булған. Бының менән ул, беренсенән, үҙенең һөйөүен белдергән, икенсенән, яратҡан ҡыҙын сәскәгә тиңләгән. Зәкирҙең һеҙгә иң беренсе бүләк иткән сәскәһе?**

**Минегөл:** Сөм-ҡыҙыл рауза сәскәһе ине. Шундай нәфис, нәзәкәтле, хуш еҫле рауза ине ул.

**Зәкир:** Ғөмүмән, рауза сәскәһе - ул һөйөү билдәһе. Шуға мин был традицияға һаман тоғромон: байрамдарҙа ғына түгел, ә уңайы тура килгән һайын раузалар бүләк итергә тырышам. Сөм-ҡыҙыл рауза - ул тәрән, көслө һөйөү билдәһе.

**▸ Башҡорт ирҙәре, ғәҙәттә, хис-тойғоға бай булһа ла, үҙҙәрен романтик итеп күрһәтеүҙән тартына. Ә бына ошо һүҙҙәренән һуң Зәкирҙең романтик рухлы-тойғоло икәнлеге беленә. Шулай ҙа йәш саҡта уның ниндәйерәк сифаты һеҙгә нығыраҡ оҡшай ине? Ә, Зәкир, һеҙ Минегөлдөң ниндәй сифаттарын яраттығыҙ?**

**Минегөл:** Ул романтиклығын көн дә күрһәтмәй, әлбиттә. Ә бына кешеләргә ҡарата ябай, аралашыусан, яғымлы, ярҙамсыл, яуаплы, намыҫлы булыуы менән көнөлемдә нығыраҡ арбағандыр. Әлбиттә, кәрәк саҡта ҡаты ла, принципиаль дә була белә. Был сифаттарын инде йәшәй биргәс астым. Ғөмүмән, ул ир, атай булараҡ, ысын ғаилә башлығы. Мин уның ҡарарҙарын, фекерен бик ихтирам итәм.

**Зәкир:** Минегөлдөң дә алсаҡлығы, яғымлылығы, тырышлығы оҡшай торғайны. Бергә йәшәй башлағас, иргә ир итеп ҡарай ҡарай белеүе менән һоҡландырҙы. Диплом алып, беҙҙең районға ҡайтып, туғандар араһында йәшәй башлағас, олоға -оло, кесегә кесе итеп ҡарауы менән туғандарҙың да күңелен яулап алды. Ул аҡыллы ҡатын, тоғро юлдаш, фекерҙәш булыуы менән әле лә мине таң ҡалдыра. Аҡыл өҫтөнә сабырлыҡ-түҙемлек тә биргән уға Аллаһы Тәғәлә.

**Рәйлә һәм Хәбир ҺАҒЫНБАЕВТАР, Өфө ҡалаһы** (№3, 2005 йыл):

**▸ Башҡорт милләте ҡала милләте булып формалашып етмәгән, тигән фекер йөрөй халыҡ араһында. Ошоно инҡар итеүсе дәлилдәр килтерә алаһығыҙмы? Етәксе урындарҙа башҡорт халҡы вәкилдәренең әҙ булыу сәбәбен ниҙә күрәһегеҙ?**

**Хәбир:** Кешенең социаль, иҡтисади статусы милли сифатты аңлатмай. Ғөмүмән, яҡшы, насар кешеләр булған кеүек үк, ҡалала ла, ауылда ла төрлө милләт кешеләре араһында ла үҙҙәрен "комфорт" тойған кешеләр күп. Әле бына йәштәребеҙҙе генә алайыҡ: уларҙың уҡырға, ҡалала төпләнеп, эшкә урынлашырға, үҙ эшен асып ебәрергә тырышып ятыуын хуплайым ғына. Афарин! Югиһә, берәй ҙур ғына сара үткәрелер булһа, дыу килеп, ярҙам итерҙәй бағымсы эҙләйҙәр. Тик, һеҙ билдәләүегеҙсә, башҡорттарға ярҙам итерлек башҡорт етәкселәре юҡ кимәлендә. Башҡа милләт вәкилдәре ни өсөн башҡортҡа ярҙам итеп ултырһын, ти? Бына шуның өсөн дә йәштәрҙе махсус рәүештә етәксе урындарға әҙерләү, тәрбиәләү фарыз. Эшләгән урындарында ғына түгел, ә ғаиләлә, мәктәптә үк. Ғәҙәттә, ауыл балалары гуманитар вуздарҙы һайлай. Етәксе урындарға башлыса техник белемле белгестәр үрләтелә. Бына шул турала уйланырға кәрәк. Ата-әсәләргә лә, уҡытыусыларға ла.

**Рәйлә:** Мине бер нәмә ғәжәпләндерә. Ҡайһы бер таныштарым үҙ телендә рәхәтләнеп һөйләшеүҙән ояла. Был үҙ әсәңде һатыуға бәрәбәр хилаф, тип уйлайым мин.

Тағы ла. Һеҙҙең гәзиттең сыға башлаған ваҡыты. "Юлдаш" каналынан реклама ишетеп ҡалдым да, яҙылайым, тип, үҙебеҙҙең почта бүлексәһенә йүгерҙем. Унда "Киске Өфө" тураһында ишетмәгәндәр ҙә, белмәйҙәр ҙә. Улай булырға мөмкинме? "Вечерняя Уфа" ни, "Киске Өфө" ни, яҙҙырығыҙ тәүгеһен", - тинеләр. Шул тиклем кәйефем ҡырылды. Редакция хеҙмәткәрҙәре ҡыҫылып, хәлде төҙәтергә ярҙам иткәс кенә почтала үтенесемде ҡәнәғәтләндерҙеләр.

"Йәшлек"те, "Аҡбуҙат"ты тәүге көндәренән үк алдырҙыҡ. Башҡорт булып, нисек итеп үҙ телеңдәге баҫмаларҙы алдырмайһың инде? Бына ошо бәләкәй генә деталдәр ҙә кешенең кем икәнлеген күрһәтә.

**Хәбир:** Әйткәндәй, бер сетерекле ваҡиға иҫемә төштө. Ейәндәрем башҡорт мәктәбендә уҡығас, башҡортса китап алайым әле, тип, Первомайский урамындағы "Планета" магазинына барҙым. Күҙгә бәрелерҙәй китап тапмағас, директорына индем. Төптән, бер мөйөштән генә эҙләй башланы ул китапты. "Ниңә башҡорт китаптарын ҡараңғы мөйөштә тотаһығыҙ?" - тип һорарға мәжбүр булдым. "Не ваше дело!" - тигән тупаҫ яуап ҡына алдым.

**Рәйлә:** Һәр кемдең үҙен генә башҡорт тип таныуы әҙ. Берҙәм, тупланған булырға кәрәк. Үҙең күтәреләһең икән, башҡаларҙы ла тарт.

Беҙҙең республикала төрлө милләт кешеләре йәшәй, уларҙың йәшәйеше, үҫеше өсөн бөтә шарттар булдырылған. Ә башҡа республикаларҙа ундай мөмкинлектәр юҡ тиерлек. Башҡа милләт халҡын яратмауҙан әйтмәйем мин быларҙы, ә үҙ милләттәштәрем өсөн әсенеп, ҡайҙа һеҙ, башҡорттар, тип мөрәжәғәт итергә мәжбүрмен. Үҙ милләтенән оялған башҡорттарға әйтәһе һүҙем: башҡорттоң рухы, ғорур холҡо, уйлай белеү һәләте, йөрәк көсө булмаһа, шул тиклем данлы тарихы булыр инеме?









*Ҡайһы бер таныштарым үҙ телендә рәхәтләнеп һөйләшеүҙән ояла. Был үҙ әсәңде һатыуға бәрәбәр хилаф, тип уйлайым мин. Тағы ла. Һеҙҙең гәзиттең сыға башлаған ваҡыты. "Юлдаш" каналынан реклама ишетеп ҡалдым да, яҙылайым, тип, үҙебеҙҙең почта бүлексәһенә йүгерҙем. Унда "Киске Өфө" тураһында ишетмәгәндәр ҙә, белмәйҙәр ҙә. Улай булырға мөмкинме? "Вечерняя Уфа" ни, "Киске Өфө" ни, яҙҙырығыҙ тәүгеһен", - тинеләр. Шул тиклем кәйефем ҡырылды. Редакция хеҙмәткәрҙәре ҡыҫылып, хәлде төҙәтергә ярҙам иткәс кенә почтала үтенесемде ҡәнәғәтләндерҙеләр. Башҡорт булып, нисек итеп үҙ телеңдәге баҫмаларҙы алдырмайһың инде? Бына ошо бәләкәй генә деталдәр ҙә кешенең кем икәнлеген күрһәтә.*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ғаилә ҡоро"нда ҡатнашыусыларҙың кем, ниндәй һөнәр эйәһе булыуҙарын махсус рәүештә теркәмәнек. Ниндәй өлкәлә генә эшләмәһендәр, улар иң тәүҙә ғаилә институтының матур өлгөһөн булдырған ир менән ҡатын, быуындар бәйләнешен өҙмәй, балаларына ата-бабалар фекерен, өгөт-нәсихәтен, һабаҡтарын, асылын тапшырған атай менән әсәй. Улар яҡтырта бөгөн донъябыҙҙың яҡты һыҙатын, маяҡ итеп әйҙәй. Шундай ғаиләләр тураһында редакциябыҙға хәбәр итегеҙ, зинһар. Хаттар көтәбеҙ.**

*ХАЛЫҠ ӘЙТҺӘ, ХАҠ ӘЙТӘ*

***Яҙыусы Илгизәр Диҡҡәт гәзитебеҙ сыға башлаған тәүге мәлдә (2004 йылдың 45-се һанынан башланғайны) "Милләт холҡонмо? Мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә эҙлә уны!" тигән баш аҫтында бик матур мәҡәләләр йыйынтығы тәҡдим иткәйне. Башҡорттарҙың ғына түгел, башҡа ҡайһы бер милләттәрҙең дә ауыҙ-тел ижадына, мәҡәл-әйтемдәренә мөрәжәғәт итеп, ҡыҙыҡлы ғына һығымталар яһағайны автор. Шул сығыштарҙың ҡайһы берҙәрен тағы бер тапҡыр тәҡдим итәбеҙ һеҙгә, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ. Моғайын, уны күптәрегеҙ уҡымаған да булғандыр.***

# МИЛЛӘТ ХОЛҠОНМО?

## Мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә эҙлә уны!



**Төрлө халыҡтарҙың мәҡәлдәренә күҙәтеү яһап, уларҙа милләттәрҙең холоҡ-фиғеленең генә түгел, милли идеяһы сағылышын да күҙаллап була. Ғөмүмән, милли идея мәҡәлдәргә генә түгел, халыҡтың тотош ауыҙ-тел ижадына һалынған. Һәм, ҡайһы бер әһелдәребеҙ тәҡдим иткәнсә, милли идеяны күмәкләшеп ултырып уйлап сығарып та, йәки икенсе берәй халыҡтан, мәҫәлән, әлеге лә баяғы йәһүдтәрҙән, "күсереп" алып та булмай. Сөнки халыҡ йәшәп килә икән, тимәк, уның булмышында милли идеяһы ла бар. Булмышын юғалттымы, ижадында тупланған белеме, энергетикаһы, эске ритмы һәм милли идеяһы менән бергә халыҡ үҙе лә юҡҡа сыға.**

Шуға ла бөйөк аҡыл эйәһе Ленин бөтөн халыҡтарҙы интернациональ бер милләткә әйләндереү эшен иң тәүҙә милли культураға һөжүмдән башлай. Һәм һәр милли культураны буржуаз культура тип иғлан итә... Тик, күреүебеҙсә, илебеҙҙең байтаҡ халыҡтарының милли идеялары коммунизм идеяларынан көслөрәк булып сыҡты.

Хәҙер алдыбыҙҙа икенсе һынау тора: аҡса. Әйтергә кәрәк, бик күп халыҡ был һынауҙы үтә алмаған. Маммона - аҡса илаһы - фәлсәфәһе бик көслө. Уның фәлсәфәһе хатта туғандарҙы ла бер-береһенә нәфрәтләндереү көсөнә эйә.

Тимәк, беҙгә ижадыбыҙға тәрән байҡау яһап, милли идеябыҙҙың асылын билдәләргә кәрәк. Был беҙгә байыу менән бер рәттән, үҙебеҙҙе милләт булараҡ та, кешелек сифаттарыбыҙҙы ла һаҡлап ҡалырға ярҙам итәсәк.

Был йәһәттән төрөктәрҙе билдәләп үтергә кәрәк. Уларҙан бер-нисә тапҡыр: "Тәүҙә уҡыйбыҙ. Шунан аҡса эшләйбеҙ. Аҡса эшләгәндән һуң халҡыбыҙға хеҙмәт итәбеҙ", - тигән һүҙҙәр ишеттем. Һәм, ысынлап та, хеҙмәт итәләр бит! Бер-береһенә ярҙамлашып, Европа илдәрен дә "яулап" алып баралар. Әйтергә кәрәк, төрөктәрҙе мин курдтар, әрмәндәр өсөн ғәйепләйем, шулай ҙа уларҙың үҙ милли идеяларына йәне-тәне менән хеҙмәт итеүенә һоҡланмай булдыра алмайым.

Милли менталитет һәм милли идея тураһында һүҙ башлағас, шуны ла әйтеп үтергә кәрәк - американдарҙың Рәсәйгә ҡарата ЦРУ тарафынан төптән уйланған сәйәсәт алып барыуы тураһында күп яҙалар хәҙер. Маҡсаттары - Рәсәй халыҡтарының рухи ҡиммәттәрен юҡҡа сығарыу. Шуға ла беҙ ҡараған киноларҙа ла, беҙ уҡыған китаптарҙа ла улар үҙҙәрен аҡсаға табыныусы халыҡ итеп күрһәтергә тырыша. Тәрбиә тураһында яҙылған китаптарында ла ошондайыраҡ миҫалдар килтерелә: йәнәһе, миллионер атай бер доллар һораған балаһына ун доллар бирә һәм шул аҡсаға гәзит һатып алырға, уларҙы ҡиммәтерәк итеп һатып, ун бер доллар эшләп, ун долларын кире ҡайтарырға ҡуша икән. Күптәребеҙ шуға ышана. Һәм американдарға оҡшарға тырышып, "Ваҡыт - аҡса ул", тибеҙ ҙә, бөтөн нәмәне аҡса менән самаларға тотонабыҙ. Американдар бер-береһенән шулай көлә икән тип уйлап, "Аҡыллыһың икән, ниңә ярлыһың?" тип, бер-беребеҙҙе мыҫҡыллап та алған булабыҙ. Бигерәк тә ришүәт ала белмәгән күренекле ғалимдарыбыҙҙың ярлылығынан, "йәшәй белмәүҙәренән" көләргә яратабыҙ.

Тик фәҡәт аҡсаға ғына табынған милләт американдар кеүек ысын мәғәнәһендә бөйөк милләт булып китә алмаҫ ине. Һәм был, ысынлап та, шулай. Яңыраҡ мин Стивен Кови исемле ғалимдың "Семь навыков высокоэффективных людей" тигән китабына юлыҡтым. Был китапты Билл Клинтон айырым телгә алған. Стивен Кови 1996 йылда АҠШ йәмғиәтен алға этәреүсе 25 күренекле шәхестәр исемлегенә инә. Ә иң ҡыҙығы шунда: был китапта кешелек принциптары данлана - ғәҙеллек, ихласлыҡ, ғаиләлә йылы мөнәсәбәт булдырыу, тормошта үҙ юлыңды табыу, кешеләрҙе аңларға тырышыу, үҙ өҫтөңдә эшләү, һ.б. Аҡса тураһында бөтөнләй тиерлек әйтелмәй. Американдар үҙ балаларын шулай тәрбиәләй икән. Сөнки, ысынлап та, байыу үҙмаҡсат рәүешендә бер ниндәй идеяны ла тәшкил итә алмай. Хатта шәхси кимәлдә лә.

**Шулай итеп, байлыҡ ни өсөн кәрәк? Мәсьәлә шулай ҡуйылырға тейеш. Күреүебеҙсә, төрөктәр был һорауға яуап тапҡан һәм әлеге ваҡытта иң көслө милләттәрҙең береһенә әйләнеп бара. Мин үҙем, әгәр ҙә берәй байып китһәм, бар аҡсамды башҡорт ауылдарында предприятиелар асыу һәм буйҙаҡтарҙы өйләндереү өсөн файҙаланыр инем. Теләүсе табылһа, идеямды бүләк итәм. Сөнки был йәһәттән эш етерлек.**

**Ә хәҙер башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәрен уҡып, уларҙың мәғәнәһенә тағы бер тапҡыр төшөнөргә тырышып ҡарағыҙ әле:**

- Астан үлһәң дә, атаң-әсәңде, тыуған илеңде ташлама.
- Атаңдың ғына улы булма, халҡыңдың да улы бул.
- Ағай-эненән айыу-бүре ҡурҡҡан.
- Ағай-эне талашыр, атҡа менһә, ярашыр.
- Ағас та үҙ нәҫелен үҙ тирәһенә йыя.
- Башҡорт байыһа - бисә ала, урыҫ байыһа - йорт һала.
- Башым китмәһен тип ултырған башлыҡтан илгә иҙелек көтмә.
- Бер егеттең ҡыйыулығы мең егеткә дан килтерер.
- Берҙең көнө ил менән, илдең көнө ер менән.
- Биле ныҡтың иле ныҡ, иле ныҡтың биле ныҡ.
- Булыр илдең балаһы бер-беренә "батыр" ти,
  Бөлөр илдең балаһы бер-беренә "бахыр" ти.
- Бөхетһеҙлектең башы - ялҡаулыҡ.
- Ер кемдеке булһа - ел шуныҡы,
  Бей кемдеке булһа - ил шуныҡы.
- Дошмандан ҡурҡып, тупһаңды ташлама.
- Дошманың күп булһа, үҙеңә үпкәлә.
- Дуҫ итеп сер әйтмә, дуҫыңдың да дуҫы бар.
- Ерҙән айырылған елгә оса.
- Ир илендә көҙерле.
- Ир - тыуған илендә, ат - туйған ерендә.
- Ирҙең даны иленән, халҡы менән еренән.
- Исемең шәп булһын, ырыуыңа тап булһын.
  Ырыуыңа тап килмәһә, онаныңа тап булһын.
- Ҡыйыулыҡ - ярты ырыҫ.
- Намыҫлы ир хур булмаҫ.
- Сит илдең ҡарсығаһын үҙ илеңең ҡарғаһы талар.
- Туғандарың - ҡулың менән аяғың, дуҫтарың - таяныр таяғың.
- Туғандарҙың татыулығы байлыҡтан артыҡ.
- Туғаныңдан биҙмә - нәҫелең ҡорор.
- Үҙ илеңдә кем дә бей.
- Һәр сәскәнең үҙ еҫе, һәр халыҡтың үҙ төҫө.

**Илгизәр ДИҠҠӘТ.**

*ИШАРА*

# БЕРҘЕ ҺӨЙЛӘЙЕК,

## икенсене... эшләмәйек

**Тағы ла һабаҡташым Фәниәнең һөйләгәндәре иҫемә төштө: "Мәскәүҙә уҡып йөрөгән саҡ, - тигәйне ул. - Бер төркөм ҡыҙҙар, йыйылышып, тарих фәненән имтиханға әҙерләнәбеҙ. Жанна исемле ҡыҙыҡай, минең еңел көүҙәле булыуымды күрепме: "Эй, һыу эскем килә, зинһар, кухнянан һыу ғына алып кил әле", - тип үтенде.**

Мин, бер ҡатлы ҡыҙ бала, бүлмәбеҙҙән алыҫта, коридорҙың икенсе осонда уҡ урынлашҡан кухняға йүгереп барып, бер стакан һыу алып килдем дә, йәнә китабымды уҡырға тотондом. Онотолоп, бирелеп кенә уҡый башлағайным, Жанна тағы: "Һыу эскем килә, Фаниушка, йүгереп кенә барып алып кил әле!" - тип бүлдерҙе. Мин китабымдан күҙҙәремде күтәрҙем дә, тыныс ҡына итеп: "Жанна, һыу эскең киләме? Ашыҡмай ғына атлап, кухняға барып, һыу эсеп кил әле", - тип йылмайҙым. Һәр һүҙемә баҫым яһап әйттем. Эргәләге бар ҡыҙҙар баштарын күтәреп, аптырап беҙгә ҡараны һәм тынып ҡалды. Жанна ниндәйҙер тупаҫ һүҙ әйтер, тип көттөләр, ахыры. Әммә Жаннабыҙ көтөлмәгәнсә киң йылмайҙы, күҙҙәрендә осҡон балҡып китте. "Ҡара, ҡара, был бит ысын башҡорт балаһы! Шундай баш бирмәҫ, ғорур бит улар, башҡорттар! Бына ошо килеш һин миңә тағы ла нығыраҡ оҡшайһың, Фаниушка!" - тине. Шунан һуң Жанна үҙе кухняға йүнәлде. Башҡа ҡыҙҙарҙың күҙҙәрендә лә миңә ҡарата ихтирам тойғоларын шәйләнем.

Ул заманда Мәскәүҙә лә "Салауат Юлаев" фильмы бик популяр, Салауат батыр исеме күп студенттарҙың теленән төшмәй ине. Күрәһең, Жанна ла шул фильмды ҡарап, башҡорт батыры, башҡорт яугирҙәре менән һоҡланып йөрөгән булғандыр. Күрәһең, минең баяғы ҡыйыу, тәүәккәл яуабымда ла ошо яугирҙәрҙең осҡонон күргәндер. Һәр хәлдә, биш йыл буйы уҡыу осоронда Жанна һәм башҡа ҡыҙҙар менән бик татыу, уларҙан үҙемә ихтирам тойоп йәшәнек".

Фәниәнең ошо һөйләгәндәрен иҫкә төшөрҙөм гәзитебеҙҙең 24-се һанындағы "Бәхәс ҡоро"н уҡығас. "Аҫаба булмаған милләттәрҙең милли рухын күтәреү аҫаба милләттең милли рухы һулыуға алып килә" тип әйтелгән фекер тап минең уйҙарыма тура килә. Эйе, Башҡортостандан ситтә башҡорт милләте менән һоҡланып туймайҙар, ә үҙ йортобоҙҙа әрләнеүҙән, битәрләнеүҙән бушамайбыҙ. Ниңә шундай парадокс? Һәр милләт үҙе төпләнергә теләгән урында үҙен раҫларға тырыша, әлбиттә, ләкин ни өсөн ул быны башҡаларҙы кәмһетеү иҫәбенә эшләргә тейеш? Әйҙәгеҙ, шул хаҡта, дәрәҫәрәге, милләт абруйы, дәрәжәбеҙҙе төшөрмәү, данлыбыҙҙы һүрелтмәү тураһында уйланайыҡ әле, йәмәғәт!

**Әйткәндәй, тормошобоҙҙа парадокстар осрап ҡына тора. Бөтә мәғлүмәт саралары һыраны рекламалай, урамдар ошондай реклама щиттары менән тулған, телевидение экранынан "Иң һәйбәт, иң тәмле һыра - "Шихан" тигән реклама туктауһыҙ әйләндерелә. "Шихан" тигән изге тау исеме яуызлыҡ илтеүсе шешә тышында! Парадоксмы? Ә шул арала врачтар үҫмерҙәр араһында таралған һыра алкоголизмының дауалап булмаҫлыҡ сиргә әйләнеүе тураһында саң ҡаға. Эскелекте иҫкәртеүгә ең һыҙғанған осорҙа шул алама ғәҙәткә ылыҡтырыу сығанаҡтарын ишәйтеүҙе, рекламалауҙы нисек аңларға була?**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИКЕ ТЕЛ БЕЛЕҮ...

## уңыш нигеҙе

■ Австралия ғалимдары белдереүенсә, яңы сабылған үлән еҫе психотерапевтик тәьҫиргә эйә. Улар яңы ғына сабылған үләндә миндалина һәм мейенең хисәр барлыҡҡа килеү һәм стресс ситуацияларында үҙенде тотоу өсөн яуап биргән бүлексәләренә йоғонто яһаусы матдәләр тапҡан. Был еҫтәрҙе еҫкәгәндән һуң кеше тыныслана һәм уның кәйефе яҡшыра. Ғалимдар ошо тикшеренеү һөҙөмтәләре буйынса яңы һауа сафландырыусы сара уйлап тапҡан. Тиҙҙән Великобританияла уның бер баллонын яҡынса 200 һумға һатып алып буласаҡ.

■ Төштән һуң йоҡлап алырға ғәҙәтләнгән кешеләрҙең 2-се типтағы шәкәр диабеты менән ауырыу хәүефе арта, тип хәбәр итә Великобританияның Бирмингем университеты ғалимдары. Быға ике төрлө аңлатма бар: беренсеһе - көндөҙгө йоҡо тәнгә йоҡоно ҡыҫҡарта, ә был шәкәр диабетына килтерә. Икенсеһе - йоҡонан уянған саҡта гармондар эше әүҙемләшә һәм инсулин тәьҫирен кәметә.

■ Әсе борос - чилиҙағы капсаицин матдәһе ҡан тамырҙарына ыңғай йоғонто яһай, тип белдерә Ҡытай ғалимдары. Чунциндағы медицина университетында үткәрелгән эксперимент авторҙары фекеренсә, капсаицин ҡан тамырҙарының эске стеналарында урынлашҡан нервы күҙәнәктәрен әүҙемләштерә һәм шуның һөҙөмтәһендә рецептор ҡан тамырын ялҡынһыныуҙан һәм дисфункциянан һаҡлаусы азот әсемәһе бүлеп сығара. Фәнни хеҙмәттең етәксеһе профессор Чжу билдәләүенсә, Ҡытайҙың төньяҡ-көнсығыш төбәгендә йәшәүселәр араһында юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусылар 20 процентҡа күберәк. Көньяҡ-көнбайыш провинцияла әсе аҙыҡҡа, шул иҫәптән чилиға өҫтөнлөк бирәләр, шуға ла унда ауырыусылар һаны аҙыраҡ.

■ Йылдар үткән һайын баш мейеһенең интеллектуаль ҡеүәте ҙурая бара. Америка ғалимы Барбара Стоучтың яңы хеҙмәте ошо проблемаға арналған һәм ул мейенең иң әүҙем осоро 50-70 йәш арауығына тура килә, тип дәлилләй. Быға тиклем кешенең йәше арта барған һайын баш мейеһенең әүҙемлеге лә кәмей, тигән фекер йәшәй ине, әммә яңы тикшеренеүҙәр быны кире ҡаға. Бактиһән, баш мейеһендә барлыҡҡа килгән миелин матдәһе кеше тарафынан ҡулланылмау сәбәпле "йоҡоға талған" нейрондарға сигнал үтеп инеүен әүҙемләштерә. Был матдә баш мейеһенең интеллектуаль ҡеүәтен урта күрһәткестәрҙән 3 мең тапҡырға арттыра ала. Баш мейеһендә миелин күләме 60 йәшкә еткәс, тағы ла күберәк булена икән.

■ Бәләкәй саҡтан уҡ ике телдә иркен һөйләшкән кешеләр тормошта уңышлыраҡ була, тип белдерә Хайме I исемендәге каталон университеты ғалимдары. Тикшеренеүҙә ике төркөм студенттар ҡатнашҡан. Беренсе төркөмдәге студенттар бала саҡта уҡ ике телдә һөйләшергә өйрәнгән, икенсе төркөмдәгеләр испан телендә генә аралашҡан. Улар төрлө мәсьәләләр сискән, был ваҡытта функциональ магнит-резонанс томография ярҙамында ике төркөмдәге студенттарҙың да баш мейеһе әүҙемлеге күҙәтелгән. Ғалимдар әйтеүенсә, ике телдә иркен аралашыусылар мәсьәлә сискәндә баш мейеһенең һул, ә бер тел белеүселәрҙең уң яҡ ярымшары эшләй.

МОНОЛОГ

**Халҡыбыҙҙың шундай шәхестәре бар: ғүмере буйы баш баҫып иң ауыр эште башҡарыр, иң беренсе булып ярҙамға ашығыр, мәгәр бәгзе берәүҙәр кеүек һауалана, тәкәббер ҡылана белмәҫ, киреһенсә, изгелек эшләр ҙә, үҙе күҙгә-башҡа салынып бармай, күләгәлә ҡалыуҙы хуп күрер. Бындай шәхестәребеҙ үҙ маҡсатын юғары етәкселек һәм түрә-ғара алдында танылыуҙа түгел, ә халыҡҡа хеҙмәт итеүҙә күрә, шуға ла улар өсөн иң мактаулы баһа - халыҡ ихтирамы, халыҡтың танылыуы. Ошо һүҙҙәрҙе аҡ ҡағыҙ битенә төшөргәндә, мин билдәле бер һөнәр эйәләрен - халыҡҡа билдәле, алтын ҡуллы, изге йөрәкле бер төркөм табиптарыбыҙҙы күҙҙә тотам. Улар, әлбиттә, бик күп тә түгел, өҫтәүенә, күҙгә бәрелеп тә бармайҙар, шуға ла исем-шәрифтәре, изге эштәре хаҡында хәбәрҙар булһаҡ та, үҙҙәрен күреп, аралашырға тура килгәне юҡ, сөнки юҡ-бар менән борсоуы уңайһыҙ һымаҡ; икенсенән, улар һәр саҡ поста, ауырыуҙар янында.**

**Ә шулай ҙа йәйге ялынан файҙаланып, ана шундай аҫыл шәхестәребеҙҙең береһе - танылған балалар хирургы, Башҡортостандың атҡаҙанған врачы, медицина фәндәре кандидаты, БДМУ доценты Шәрифйән Сәғиҙулла улы ИШЕМОВты редакцияға саҡырҙыҡ һәм гәзит уҡыусыларыбыҙҙы үҙе менән ентекләберәк таныштырыуын үтендек.**

# ҠЫЙЫУЛЫҠ ШӘП ТӘ УЛ,

## тик ул маһирлыҡты уҙҙырып ебәрмәһен

### "Тарихсы булыр инем"

Студенттар алдында лекция менән сығыш яһағанда ла, таныштоноштар ҙа, ошо һөнәрҙе һайлағаным өсөн үкенергә тура килгәләнеме, тип һораған бар. Эйе, яңылан тыуып, тағы ла һөнәр алырға мөмкинлек булһа, барыбер ошо юлды һайлар инем, тип әйткәндәрен ишеткәнем бар. Тик мин, киреһенсә, был нисек кенә парадоксаль яңғырамаһын, улай тип ҡабатламаҫ инем. Юҡ, был эшем оҡшамағандан йә үкенгән өсөн түгел. Операция өҫтәле янында үткән 50 йыл - ул байтаҡ ғүмер, бигерәк тә хирургтар өсөн. Күптәребеҙ 35-40 йыл эшләй ҙә, йә ялға, йә мәңгелек йортҡа китеп тә бара, сөнки көн дә көсөргәнеш, стресс кисереүҙәр эҙһеҙ генә үтмәй. Бала саҡтан да, табип, хирург булырмын, тип хыял итмәй инем. Әле лә әйтәм: әгәр ҙә баяғыса яңынан һөнәр һайлау мөмкинлеге булһа, мин тарих донъяһын үҙ итер инем. Тыуған халҡым, Башҡортостаным тарихы сикһеҙ ылыҡтыра мине. Ә медицинаға килгәндә, мин был өлкәлә намыҫым ҡушҡанса тоғро хеҙмәт иттем, тип кенә әйтер инем.

Автобиографиямды һөйләп, гәзит уҡыусыны ялҡытыуҙан ҡурҡһам да, бер нисә һүҙ әйтмәй булмаҫтыр, сөнки тап тәү сығанаҡтар кеше яҙмышында мөһим роль уйнай. Хәйбулла районының Бүребай ҡасабаһында тыуғанмын. 1953 йыл Аҡъярҙа урта мәктәпте тамамлағас, бер йыл эшләп, медицина институтына уҡырға индем. Уны бөтөргәс, тыуған яғыма ҡайтып, Бүребай участка больницаһында, шунан район больницаһында эшләнем. Студент саҡтан уҡ артабан белем алыу теләге ҙур ине. 1966 йылда Башҡортостан дәүләт медицина институтында күкрәк ауырыуҙары хирургияһы буйынса клиник ординатура үттем. Әйткәндәй, һәр кемдең дә тормош юлында уға йүнәлеш биреп ебәреүсе, ярҙам ҡулы һуҙыусы бер остазы була. Миңә лә тәтене ундай бәхет. Артабан да бик уҡығы килгәс, мединституттың ул саҡтағы ректоры, профессор, иҫ киткес кешелекле шәхесебеҙ, талантлы етәксе Зәйнулла ағай Ихсанов мине Ленинградҡа аспирантураға ебәрҙе. Унда ла бик шәп атаҡлы ғалимға тап булдым. Сығышы менән Ҡырымдан булған профессор Гәрәй Баиров тигән хирург диссертациямдың ғилми етәксеһе булды. Ленинград миңә күп белем һәм тормош һабаҡтары бирҙе.

### Айырым сифаттар кәрәк

Минән йыш ҡына, балалар хирургы булып эшләү ҡыйынмы, быны өсөн ниндәйҙер айырым сифаттарға эйә булыу кәрәкме, тип һорайҙар. Дөрөҫ һиҙемләйҙәр. Эйе, бала күнелен алдап булмай. Бала менән бала булайым, тип сүселдәгәндә, ҡыланғаныңды ла үтә күрә бит улар. Кескәй пациенттарың менән үҙең булып, уларҙы яҡын күреп, аңлап, яратмайынса тороп, был өлкәлә, ай-һай, эшләүе мөмкин түгелдер.



Балалар хирургияһы йүнәлешенең яңы ғына ойошторолған сағында эш башлағанлыҡтан, был өлкәлә бик күп тир түгергә тура килде. Республика балалар клиник больницаһы нигеҙендә хирургик патологиялы балаларҙы диагностикалау, дауалау буйынса яңылыҡтар индереү, төрлө ысулдар ҡулланыу - яңы төр операциялар эшләү тиһеңме - бөтәһен дә тәүләп башҡарыусылар булдыҡ. Яңы тыуған сабыйҙар хирургияһы, атап әйткәндә, тыумыштан бирелгән сирҙәр хирургияһы өлкәһендә үҙ ҡаҙаныштарға өлгәштек. Бер яҡтан, уңышлы операциялар яһап ҡыуанһаҡ та, икенсе яҡлап, сирле, ғәрип балаларҙың тыуыуы бик нык борсоуға һала. Һуңғы ваҡыттарҙа тормошобоҙҙағы тиҫкәре социаль күренештәр, айырыуса йәштәрҙең үҙҙәрен иркен тотоуы, наркоманлыҡ, эскелек, тәмәке тартыу, енси бәйһеҙлек, шул иҫәптән осраҡлы бәйләнештәр һәм башҡа шундай тотанаҡһыҙлыҡ "емештәре" булып тыуа ла инде ғәрип һәм етлекмәгән сабыйҙар. Ә бит сабыйҙарҙың бер гонаһы ла юҡ. Буласаҡ ата-әсәгә бала табырҙан алда ныҡлап уйларға, тикшерелергә, үҙҙәрен әхлаҡ ҡанундары сиктәрендә тотоу кәрәктер. Үкенес, был йәһәттән йәштәргә тәрбиә биреү эше менән аҙ шөғөлләнәләр.

Сабыйҙарға операция яһау, әлбиттә, айырыуса нескәлек, һаҡлыҡ, оҫталыҡ талап итә. Йәшермәйем, ошо көндәрҙә миңә 75 йәш тула, шулай булыуға ҡарамаҫтан, күкрәк ҡыуышлығы, яман шеш һәм паразитар хирургия өлкәһендә ҡатмарлы операциялар яһауҙы дауам итәм. Был хирургияла һирәк була торған күренеш. Шөкөр, ауырыуҙарым бөтәһе лә сәләмәтләнеп сыға, ул-был күңелһеҙ осраҡтар һирәк була. Бармаҡтарым һиҙгер әле, ҡыйыулыҡ та етерлек - халҡыбыҙға ҡулымдан килгәнсә намыҫлы хеҙмәт итергә тырышып йөрөгән көн. Хирургияның төп ҡанунын шулай ҙа иҫтән сығарған юҡ: "Ҡыйыулыҡ оҫталыҡты уҙҙырып ебәрергә тейеш түгел". Быны шулай уйлап, ете ҡат үлсәп тигәндәй, эшкә тотонһаң, уңышҡа иҫәп тоторға мөмкин. Әйткәндәй, 2006 йылда "Балалар йыл табибы" Бөтә Рәсәй конкурсында еңеүселәрҙең береһе булдым, "Балалар табибы" исеме лә бирелгәйне. Больницала операциялар эшләү менән бергә, медуниверситетта балалар хирургияһы буйынса лекциялар уҡыйым, практик дәрестәр үткәрәм. Маҡтанғандан әйтмәйем, ләкин минең студенттарыма лекция барышында йоҡлап ултырырға тура килмәй. Был йәһәттән дә выжданым борсомай мине. Лекцияға ентекле әҙерләнәм, практик тәжрибә етерлек, шуға күрә лекцияны бер ваҡытта ла ҡағыҙҙан уҡы-

майым, ирекле һөйләйем. Үткән уҡыу йылында һөйләгән дүрт лекцияның өсәүһен студенттар аяғөстө баҫып, ҡул сабып алҡышланы. Ошонан да юғарыраҡ баһаның булыуы мөмкинме һуң?! Быны мин бер ниндәй ҙә дәрәжәләргә һәм наградаларға ла алыштырмаҫ инем.

### Имре Кальман һәм башҡалар тураһында

Хирургтарҙы йыш ҡына ҡоро, ҡаты бәгерле, хис-тойғоһоҙ һөнәрмән итеп һүрәтләйҙәр. Эйе, һөнәр үҙенсәлектәре бәгзе бер мәлдәрҙә тап ана шундай булыуҙы талап итәлер ҙә, бәлки. Эш менән бәйле күп кенә ситуацияларҙа үҙенде һалҡын ҡанлы, тыныс, ғауғаһыҙ тоторға тура килә лә хатта. Был, әлбиттә, хирург булып эшләүсе кешенең холҡона мөһөр булыр ятһа ла, төпкө аң һәм эске кисерештәр һәр кемдең үҙенекенсә ҡалалыр, моғайын. Быының менән үҙем хаҡында, мин бер ҙә генә "технарь" түгел, тип әйтмәксемен. Музыка, театр, китап яратам. Китап тигәндән, яңы сыҡҡан әҙәбиәтте күҙәтеп барам, айырыуса үҙебеҙҙең республикала нәшер ителгәндәрен көтөп кенә торам. Әйткәндәй, китаптар хәҙер өйгә һыймай башланы инде, ни эшләргә... Әллә берәй мәктәпкә йә ауыл китапханаһына бүләк итергәме, тип тә уйлап ҡуям. Бигерәк тә үҙебеҙҙең Фәндәр академияһы, "Китап" нәшриәттәрендә баҫылған ғилми хеҙмәттәр, тарихи монографияларға битараф түгелмен. Яҙыусылар, ғалимдар, сәнғәт әһелдәренең күбеһе менән шәхсән танышмын. Ғалимдарыбыҙ Әнүр Вахитов, Ғайса Хөсәйеновтың аналитик фекерләү ҡеүәһе, ҡыйыу ғилми асыштары менән һоҡланам. Яҙыусыларҙан Сәғит Агиш, Жәлил Кейекбаев, белепкүреп Рәми Ғарипов, Әхиәр Хәкимов, Ғәзим Шафиҡов менән ҡатнашып, аралашып йәшәнем, ижадтарын бик яратам. Рәшит Назаров, Рауил Бикбаевтың шиғриәтен юғары баһалайым. Рус яҙыусыларынан Валентин Распутинды ҡат-ҡат уҡыйым. Уға бәйле бер ваҡиға иҫкә төштө. Бер заман мин ошо бөйөк яҙыусының китабын үҙебеҙҙең Өфө ҡала китапханаларының береһе янынан үткәндә сүп-сар өйөмөнән табып алып, аптырашта ҡалғайным. Шунда уҡ сит ил классиктарының да китаптары ята ине. Күрәһең, китапханаға ялтыр тышлы матур яңы томдар килтергәндәр ҙә, "иҫкерҙән" китаптарҙы сығарып түккәндәрҙер. Быны күреп, бик нығ әрненем, хатта күҙ йәштәремде тыя алманым. Быны бит ниндәй замана китте... Китап ҡәҙере бөттө, тимәк, һүҙ ҡәҙере лә китте, тигәнде аңлата бит был. Йәмғиәтебеҙҙең әхлаҡ кимәленә ишаралап тороусы бер ҡара тап булып ятты ул йөрәгемә.

Мәскәүгә, Санкт-Петербургҡа юл төшһә, мотлаҡ театрға бармай ҡалмайым. Тәүҙәрәк МХАТ-ҡа бик йөрөй инем, аҙаҡҡа табан әҫәрҙең төп идея-йөкмәткеһен "модалы" режиссура бик боҙоп, "аҡыллылыҡ" бәләһенән килеп тыуған йәпһеҙ алымдар менән һүрәтләй башлағас, театрҙан биҙҙем. Һәйбәт әҫәрҙәр генә етмәй, аҡыллы режиссура бында төп ролде уйнай икән шул. Хәҙер күңелдә күтәрерҙәй йәнлерәк "жанр"ға күстем: оперетталар ҡарарға әүәҫләнеп киттем. Оффенбах, Имре Кальман опереттаһарын айырыуса яратам. Башҡорт тарихына ҡағылышлы булған бөтә нәмә ҡыҙыҡһындыра мине. Һәр атаманың төбөнә төшөргә, тарихи ваҡиғаларҙы анализларға яратам. Күп уҡыйым, көнөнә кәм тигәндә ике сәғәт ваҡытымды уҡыуға бүләм.

### Баҡсамда таш соҡойом, тупраҡ ташыйым

Һөнәрем буйынса төп эшемдән тыш, күп ваҡытымды баҡсамда үткәрергә яратам. Өй һалдым, мунса эшләнем. Баҡсабыҙ тау битләүендәрәк. Бер мәл уның еренән 75 күнәк таш сығарып түктем дә, урмандан ҡара тупраҡ ташыным. Һыу ташырға ла тура килә, әммә арытмай, сөнки был эштәрҙә бик яратып башҡарам. Ҡороған ҡыуаҡтарҙы яңыртам, емеш ағастары ултыртам.

Өй һалып, ағас ултыртыу тураһында һүҙ сыҡҡас, ғаиләм хәлдәремдә лә бәйән итәйем. Ҡатыным - билдәле ғалим-методист, дәреслектәр авторы, педагогия фәндәре кандидаты, БАССР атҡаҙанған уҡытыусыһы Роза Ғәкил ҡыҙы менән Илшат улыбыҙҙы һәм Гәлиә ҡыҙыбыҙҙы тәрбиәләп үҫтерҙек. Илшат Мәскәү авиация институтын тамамланы, хәҙер ғаиләһе менән Мәскәүҙә йәшәй, Жуковский исемендәге академияла аспирантура бөтөрҙө, полковник, техник фәндәр кандидаты. Гәлиә - офтальмолог, Өфөлә эшләй. Ейәнейәнсәрҙәребеҙ бар. Әлфиә ейәнсәрем әле генә Мәскәү дәүләт университетын тамамланы.

Һөнәрең ауыр булыуға ҡарамаҫтан, йәш күренәһең, врач булғас, берәй серен беләһеңдер, тиҙәр миңә йыш ҡына. Бер сере лә юҡ. Үҙемдең кәрәклегемде тойоп йәшәйем. Сәләмәт тормош алып барам. Быны 50 йыл инде көүҙәм ауырлығын бер кимәлдә һаҡлап киләм. Көн дә физик күнегеүҙәр яһайым. Унан... Уйҙарың яҡты, күңелең изге булһа, башҡаларға хаслыҡ теләмәһәң, яманлыҡ ҡылмаһаң, эшеңдә лә, өйөңдә лә - көтөп тороусыларың, таянырға үҙеңдән аҡыллырак кеше дуҫтарың булһа, ниңә йәшәмәҫкә лә, ниңә йәш күренмәҫкә, ти?!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Атҡаҙанған табип, студенттар остаҙы, хәстәрлекле ир, атай һәм ҡартатай Шәрифулла Сәғиҙулла улы үҙенең әүҙем тормош рәүешен бәйән итеп, тәнде сирҙәрҙән арындырыусы табип ҡына түгел, ә кеше йәндәрен дауалаусы ла, күңелдәрҙе сафландырыусы фекер эйәһе лә булараҡ күҙ алдыбыҙға баҫты. Тән һәм йән сәләмәтлегенән хасил булыусы күңел сафлығы - бына уның тормош формулаһы.**

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Шәхси тормошоңда - бәхет һәм уңыш

Беҙ барлыҡ киңлекте тултырыусы энергетик мөхиттә йәшәйбеҙ. Уға ҡарата минең ике яңылыҡым бар: береһе - яҡшы, икенсеһе - насар. Яҡшыһы шунан ғибәрәт - ғалимдар Аллаһты тапты. Насары - улар Уны таныға теләмәне. Ғәмәлдә был Энергия һәр тормоштоң сығанағы булып тора һәм материяның һәр атомында йәшәй.

Ғалимдарҙың Уны нисек атауы мөһим түгел. Уның аң, аҡыл көүҙәләнеше булыуы мөһим. Был билдәләмә - беҙҙең Ижадсыға, Булдырыусыға яҡынайыуыбыҙҙың мөмкин булған иң юғары дәрәжәһе. Тап шул аң ғаләм менән идара итә.

Ошо уҡ аң беҙҙә лә хәрәкәтләндерә. Бынан тыш, ул беҙҙең аңыбыҙ менән берләшеп, һәләтлектәребеҙҙе, һиҙемләүҙәребеҙҙе барлыҡҡа килтерә, идеялар бирә, илһамландыра.

Ҡарашы дөйөм ғаләмдекенә яҡыныраҡ булыусылар аң көүҙәләнешен нығыраҡ тарта. Тәбиғәткә яҡын булыусылар тере йән эйәләренә ихтирамлы була. Матди донъяның йәшәү сығанағы түгеллеген, ә ошо сығанаҡтың ижад өлкәһендә, тимәк, рухиәттә булыуын аңлаусыларҙың тормошта бәхетле икәненә шик юҡ.

Бер нисә йыл элек мин Грецияла, боронғо емереклектәрҙә ҡаҙыныу эштәре барған урында булдым. Ер аҫтынан ниндәйҙер бер өлөшө генә сығып торған, ҡалғаны ер аҫтында ҡалған бина, археологтар фекеренсә, дауахана кеүек урын булған. Көндәҙ бында ауырыуҙар дауалаусылар тәғәйенләгән процедураларҙы алған. Дауалау төнөн дә дауам иткән - ауырыуҙарҙың караuатына дауалаусыларҙың бүлмәһенә тоташтарылған торбалар беркетелгән. Улар аша төнөн дауалаусылар ауырыуҙарға ыңғай йөгонто яһаған: мәҫәлән, "һиңә көндән-көн яҡшыраҡ", "дарыу тәьҫир итеп, һинән ауырыуҙы ҡыуып сығара" тигән һүҙҙәрен еткергән.

Тән менән идара итеүсе анға йоҡлағанда ғына түгел, уяу килеш тә барып етеп була. Был ошо главала яҙылған барлыҡ психологик йүнәлештәр өсөн төп шарт булып тора.

50-се йылдарҙа уҡ доктор Хорнелл Харт, Дьюк университеты профессоры "автокондиционерлау" тип аталған методика тәҡдим итә. Был ысул кире уйҙарҙы ыңғайға үҙгәртә. Ул үҙ эсенә ике стадияны ала:

- Аңдың һәм тәндең көсһеҙләнеүе.
- Үҙ-үҙеңде ыңғай ҡарашҡа һәм конструктив ҡылыҡтар ҡылыуға инандырыу.

Шунан алып шул уҡ проблеманы хәл итеүҙең бер нисә юлы тәҡдим ителә, атап әйткәндә, гипноз һәм үҙ-үҙеңде гипнозлау. Шулай итеп, француз ғалимы Эмиль Куэ арҡаһында ике ҡитғалағы мендәрсә кеше көҙгөгә ҡарап: "Бар мөнәсәбәттәрҙә лә мин көндән-көн яҡшырғандан яҡшыра барам", - тип ҡабатлаған.

Куэ үҙ-үҙеңде ышандырыуға әтәргес бирә. Егерме биш йыл элек ул Сильва ысулы - сәләмәтлегеңде нығытыу, тормошта уңыш ҡаҙаныу һәм проблемалар алдында ебеп төшмәү маҡсатында үҙ аңың менән идара итеү ысулы - исемен алған дүрт көнлөк тренинг булып ойоша. Бөтә был ысулдар ҙа атап үтелгән стадияларҙы үҙ эсенә ала. Ни өсөн? Сөнки улар эшләй.

**Роберт СТОУН.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИСМИ ӘҒЗӘМ ДОҒАҺЫ

**Ҡөрьән-Кәрим китабында Аллаһы Тәғәләнең: "Удегуни әстәжиб ләкүм" - Минән донъя, Әхирәт хәжәттәрегеҙҙе һорағыҙ, Мин һеҙҙең теләктәрегеҙҙе ҡабул итермен", - тигән вәғәҙәһе бар. Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә: "Аллаһы Тәғәләнең 99 күркәм исем сифаттары бар, шул исемдәрҙе әйтеп доға ҡылығыҙ, ул исемдәр араһында шундай исем йәшерелгән, әгәр бәндә уны зекер итеп доға ҡылһа, теләге, һис шикһеҙ, ҡабул булыр", - тиелә. Был хәҙистә халҡыбыҙ тарафынан күп йылдар буйына яратып уҡылған Исми Әғзәм доғаһы тураһында һүҙ бара.**

**Йәә Аллааһү** - был Аллаһтың иң бөйөк исеме, был исем Уның Тәңрелек сифатын раҫлай. Унан башҡа Тәңре юҡ, ғибәҙәт ҡылырға тейешле зат Ул бер генә. Был исем Раббыбыҙҙың барса 99 гүзәл исемдәрен үҙ эсенә ала. Был исем башҡа бер кемгә лә бирелмәй. Мең мәртәбә "Йәә Аллааһү" тигән бәндәне (мосолманды) Хаҡ Тәғәлә үҙенә яҡынайтыр.

**Әр-Рахмәәнү** - миһырбанлы, үҙе яралтҡан барса тереклеккә шәфҡәтле, мосолмандарға ла, мосолман булмағандарға ла мәрхәмәтле. Был исем башҡа бер кемгә лә бирелмәй. Фарыз намаҙҙан һуң бәндә йөҙ мәртәбә "Йәә Рахмәәнү" тиһә, вайымһыҙлыҡтан, онотоусанлыҡтан һәм күңел ҡараңғылығынан пак булыр.

**Әр-Рахиимү** - шәфҡәтле, Ҡиәмәт көнөндә рәхмәт күләгәһенә алыусы. Был исем Аллаһҡа ышаныусыларға Тәңренең айырыуса рәхимле булыуын күрһәтә: кешеләрҙе донъяға килтергәндә; уларға тура юл күрһәтеүендә; уларҙы Әхирәттә бәхетле итеүендә; Әхирәттә уларға күренеүендә.

Иртәнге намаҙҙан һуң йөҙ мәртәбә "Йәә Рахиимү" тигән кешегә Аллаһ рәхимле һәм миһырбанлы булыр.

Аллаһты был ике (Әр-Рахмәәни һәм Әр-Рахиим) исеме менән белгән, әйткән кеше үҙенең гонаһтарынан ҡотолоу юлында тырышлыҡ күрһәтә, гонаһтарын Аллаһтың асыуынан сығарып, ғәфү итеү юлына ҡуя.

**Әл-Мәликү** - батшаларҙың батшаһы, Ҡиәмәт көнөнөң, бөтә байлыҡтарҙың берҙән-бер хужаһы. Ул бер нәмәгә лә мохтаж түгел, шул уҡ ваҡытта барса ғаләм Уға мохтаж. Аллаһы Тәғәлә бер ниндәй ҙә тиңдәше булмаған берҙән-бер хужа, бер кемдән дә Ул ярҙам һорамай. Һәр кемгә ни теләһә һәм күпме теләһә, шуны бирә ала. "Йә Мәликәл мүлки йә ҙәл жәләли уәл икрам" исеменә һәр кем даимсылыҡ итһә, дәүләте тамам етеш була.

**Әл-Ҡуддуусү** - бар гәйеп һәм кәмселектәрҙән пак, бөтә етешһеҙлектәрҙән алыҫ, кеше аҡылына һыймаҫлыҡ таҙалыкта. Йөҙ мәртәбә "Йәә Ҡуддуусү" тигән кеше күңел ҡараңғылығынан саф була.

**Әс-Сәлләәмү** - бәндәләргә сәләмәтлек һәм эштәрендә уңышлыҡтар биреүсе. Үҙе етешһеҙлектәрҙән, яманлыҡтарҙан пак. Бер ауырыуға йөҙ алтмыш мәртәбә "Йәә Сәлләәмү" тип уҡыһаң, уға Хаҡ Тәғәлә сәләмәтлек бирә.

**Әл-Муъмиинү** - бәндәләргә именлек, тыныслыҡ биреүсе, үҙенең ҡолдарын ыҙалаңыуҙан ҡотҡарыусы, ҡурҡыу һәм насарлыҡ юлдарынан ҡотолоу ысулын күрһәтеүсе.

Ул беҙгә төрлө ҡурҡыныстарҙан һаҡланыу өсөн һиҙеү ағзалары биргән һәм беҙҙе ҡурҡыныстарҙан һаҡланыу ысулдарына өйрәткән. Мосолман был исемде даими уҡыһа, Хаҡ Тәғәләнең йәшерен һәм асыҡ дошмандарынан имен ҡала һәм ул кеше хәүефтәрҙән имен була.

**(Дауамы бар).**

ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...

# БӨТӘҺЕ ЛӘ БӘХЕТКӘ ӨЛГӘШӘ АЛА -

## шулай ти психогенетика фәне

**"Һәр кеше сәләмәт, бәхетле һәм бай була ала", тип һанай психогенетик һәм яҙыусы Елена Минькина. - Тик "Ҡорбандар законынан" ғына ҡотолорға кәрәк. Ә нисек?**
**Психогенетик Чампион Курт Тойч, кешегә ата-әсәһенән яман шеш ауырыуҙары, күҙ төҫө генә түгел, ә үҙ-үҙен тотош моделе лә күсә, тип иҫәпләй. Әгәр әсәһе атаһы менән насар йәшәһә, уның ҡыҙы бөтөнләй кейәүгә сыҡмауы мөмкин, сөнки нәҫелендә бәхетһеҙ яҙмыш күҙәтелә. Әгәр беҙ был моделдәрҙе үҙгәртәбеҙ икән, атай-әсәйебеҙҙең бәхетһеҙ яҙмышын ҡабатлауҙан ҡотола алабыҙ.**

**■ "Ҡорбандар законы" ниҙе аңлата һуң?**

Ике ябай христиан ҡанунын иҫтә тоторға кәрәк, ул саҡта барыһы ла үҙенән-үҙе үтәләсәк. Беренсеһе: үҙеңде ярат. Ә икенсеһе: үҙеңде яратҡан кеүек яҡыныңды ярат. Мин, ышаныслы рәүештә, беҙҙең халыҡтың 99 проценты быны эшләй алмай, тип әйтә алам. Йәғни улар "Ҡорбандар законы" буйынса йәшәй. Мин дә быға тиклем һәр ваҡыт үҙемде ҡорбан иттем. Кем өсөндөр йәшәнем. Башта ирем өсөн, артабан балаларым өсөн. Ләкин бер ҡасан да үҙемде уйламаным. Бына ошо үҙемде яратмау мине хаталарға этәрҙе лә инде. Шуға күрә бәхеттең төп сере - үҙ-үҙеңде яратыу. Быны эшләүе еңел. Иң тәүҙә үҙегеҙҙе: тышҡы ҡиәфәтегеҙҙе, уйҙарығыҙҙы, йәшегеҙҙе тәнҡитләүҙән туҡтағыҙ. Үҙегеҙҙе өлгө итеп ҡуйығыҙ. Күп клиенттар ошо исулды ҡулланып ҡараны һәм һөҙөмтәһеҙ булманы. Кеше үҙен кем менәндер сағыштырыуҙан туҡтаһа, ул асыу, үс йыйыуҙан да ҡотоласаҡ. Беҙ үҙебеҙгә "мин ниндәй матурмын" тип ни тиклем йышыраҡ әйтәбеҙ, шул тиклем яҡшыраҡ. Мейе - ул компьютер кеүек. Шундай ҡараш булғанда, үҙебеҙҙә яратҡан нәмә үҙенән-үҙе камиллыҡҡа ынтыласаҡ, кешенең көүҙәһе лә, тышҡы ҡиәфәте лә яҡшыға үҙгәрә башлаясаҡ. Ә әгәр ҙә ул ниндәйҙер аҙымдары өсөн үҙен "ашарға", гәйепләргә ғәҙәт итһә, бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ. Үҙенә: "Эйе, мин дөрөҫ эшләмәнем, ләкин үҙемде ғәфү итәм", - тип әйтергә өйрән. Үҙен-үҙе тәнҡитләүҙән баш тартҡан кеше нисек үҙгәргәнен һеҙ күҙ алдына ла килтерә алмайһығыҙ.

**■ Ә үҙеңдең иреңде нисек яратырға?**

Ғаиләгеҙҙә тәртип урынлаштырһағыҙ, балаларығыҙ, ҡатынығыҙ бәхетле булһа, һеҙҙә бар донъяны яҡшы итеп күреү эске ихтыяжы уянасаҡ. Таиландта баҙарҙа иртәнге етелә шундай картина күреп иҫем киткәйне: гимн уйнай башланы һәм бөтә һатыусылар ҙа эшен ташлап, бер рәткә баҫып, рухлы, йөнле йөҙ менән гимн йырлай башланы. Күрәһең, быға бала саҡтан өйрәнергә кәрәктер.

**■ Үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙән тыйҙығыҙ, ә башҡаларҙы тәнҡитләргә мөмкинме?**

Беҙҙең төпкөл аңыбыҙ шулай йәйләнган: әгәр һеҙ башҡаларҙы тәнҡитләһәгеҙ, ул үҙегеҙҙә үк янынан барлыҡҡа киләсәк, йәғни бумеранг булып үҙенә кире әйләнеп ҡайтасаҡ. Әгәр мин кемделәр "иҫәр" тип атаһам, ҡасан да булһа үҙем шундай хәлгә тарыясаҡмын: мине лә "иҫәр" тип атаясаҡтар. Шундай ҡанун бар: мин был донъяла нимә башҡарам, донъя миңә шуны ҡайтарып бирә.

Беҙҙең халыҡ сит ил кешеләренә ҡарағанда агрессив, сөнки рәсәйлеләрҙең өс-дүрт быуыны дауамлы һуғыш ваҡытында үҫте. Кеше йәки кемгәләр һөжүм итә, йәки уға һөжүм итәләр. Аҫҡы аңда яйлап-яйлап мин үрҙә телгә алып үткән "ҡорбандар законы" тыуған. Был осраҡта кешеләр араһындағы мөнәсәбәт ҡорбан һәм палачты хәтерләтә. Кеше йә палач, йә ҡорбан ғына була ала. Әгәр ул эштә палач икән, өйҙә йәки бүтән ерҙә ул ҡорбан булып ҡаласаҡ. Ул был донъяла нимә башҡара, үҙе лә шуны үк аласаҡ.

**■ Ванкуверҙа уҙған олимпиадала беҙҙең спортсыларҙың уңышһыҙлығын психологик әҙерлек булмауына бәйләнеләр. Шул уҡ хоккейсыларҙы алайыҡ: улар Америка клубтарында уңышлы уйнай, ә Рәсәй йыйылма командаһы өсөн һәр ваҡыт түгел.**

Бында уларҙың беҙҙең кешеләр булыуын аңлау мөһим. Улар шулай уҡ ата-әсәһенең үҙ-үҙен тотош моделен ҡабатлай. Беҙҙән оҙаҡ йылдар буйы еңеүсе рухын юҡҡа сығарҙылар. Бер нисә быуын еңеүгә ынтылмай. Шуға күрә спортсыларҙың башында уларға кире тәьҫир итеүсе аҫҡы аң программалары һаҡланған. Уңышҡа өлгәшеү өсөн спортсының да, көйәрмәндәрҙең дә психологик ынтылышы кәрәк. Ә беҙҙең көйәрмәндәр спортсылар турaһында йыш ҡына: "Эй, беҙҙекеләр еңә алыр тиһеңме?" - тип уйлай. Быңдай һүҙҙәрҙе мин күп тапҡыр ишеттем. Әгәр рәсәйлеләрҙең ярһыһы булһа ла үҙенең уйындағы "беҙҙекеләр иң яҡшыһы" тигән күрһәтмәне спортсыларға ебәрһә, улар өсөн ниндәй ҙур психологик ярҙам булыр ине.

**Елена МИНЬКИНА,**
**яҙыусы һәм психогенетик.**
**("Аргументы и факты" гәзитенән).**

ҮӘТ ҺӘЙБӘӘ-ӘӘТ!

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫНА...

## торлаҡ һатып алыу еңелләште

**Әсәлек капиталын ҡулланып, йәшәү шарттарын еңеләйтеүҙе күҙаллаған закон ҡабул ителде.**

Элек һатыу-һатып алыу килешеүенән алып, әсәлек капиталын беренсе түләүгә тотонорға мөмкин булғанға тиклем 8 ай тирәһе ваҡыт үтеүе шарт ине. Торлаҡ һатыусылар иһә күп осраҡта былай оҙаҡ ваҡыт көтөргә риза түгел ине. Хәҙер ғаризаны ҡарау ваҡыты 2 айға тиклем ҡыҫҡартылды. Шулай уҡ яңы законға ярашлы, әсәлек капиталын торлаҡ йорт төҙөгәндә йәки уны үҙгәртеп ҡорғанда (реконструкциялағанда) махсуслашҡан подряд ойошмаларҙы йәлеп итмәскә лә була.

**Нисек итеп әсәлек капиталы ярҙамында йәшәү шарттарын үҙгәртергә мөмкин?**

Әсәлек капиталын ипотекаға кредит алғанда тәүтүләү өсөн тотонорға, төҙөүҙә өлөшләтә ҡатнашҡанда, фатир һатып алғанда ҡулланып була. Шулай уҡ торлаҡ кооперативына инеү взносы итеп түләргә лә мөмкин. Ләкин быны бала тыуып (йәки уллыҡҡа алынып) өс йыл ваҡыт үткәс кенә ҡулланырға була.

Торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү өсөн алынған ипотека кредитын йәки ошондай уҡ маҡсат менән әсәлек капиталы хоҡуғы булмағанға тиклем алынған ипотека кредитын баланың йәшенә ҡарамай әсәлек капиталы менән түләргә мөмкин. Был кредиттар 2010 йылдың 31 декабренә тиклем бирелгән булырға тейеш. Бала тыуғанға тиклем йәки тыуғас (уллыҡҡа алынғанға) алынған кредитты ла әсәлек капиталы менән ҡапларға мөмкин. Был аҡсаларҙы тулыһынса йәки өлөшләтә ҡулланырға була. Кредиттың кемгә алыныуы мөһим түгел. Әсәлек капиталының аҡсаһын кредиттың төп өлөшөн, процентарҙы һәм ваҡытында түләнмәгән бурысты түләү өсөн ҡулланырға мөмкин, ә штраф һәм пеняны түләү өсөн тотоноп булмаясаҡ.

**Ипотеканы әсәлек капиталы менән ҡаплау өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

РФ Пенсия фондының территориаль бүлегенән әсәлек капиталы өсөн сертификат алыу мөһим. Кредит алыусы банкыға (йәки икенсе кредит ойошмаға) ипотека кредитын әсәлек капиталы менән ҡапларға теләү хаҡында ғариза яҙып, кредит биреүсенән ҡалған бурыс һәм аҡса күсерелергә тейешле реквизиттар күрһәтелгән белешмә алып, Пенсия фондының ошо аҡсалар менән ҡулланыу хоҡуғына эйә булыуы хаҡында ғариза бирергә кәрәк. Ғаризала аҡсаны ниндәй маҡсатҡа тотонорға уйлауығыҙҙы аныҡлап күрһәтеү мөһим. Пенсия фонды бер ай эсендә ҡарар ҡабул итеп, банкыға аҡсаны бер айҙа күсерергә тейеш.

**Яҡын арала РФ Хөкүмәтендә әсәлек капиталын шәхси торлаҡ төҙөүҙә лә ҡулланырға мөмкинлек биргән нормативтар акттар ҡабул ителеүе көтөлә.**

Аһ-Аһ!

# ЭТ ӨРӘ ТОРОР...

## каруан бара торор

**Мәҡәлә яҙырға ултырғас, тиҙ генә үҙемә "ревизия" яһап алдым. Баҡтиһәң, кеше телевизорҙан йығылып ятып ҡараған арзан ток-шоуҙарҙы, төрлө "ағыу" сәсеүсе оппозицион сайттарҙы ҡарарға, ундағы мәҡәләләрҙе уҡырға яратмайым икән. Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа тормошҡа зарланыусыларҙы, үҙ йүнһеҙлегендә кемделәр гәйепләүселәрҙе, бар нәмәнән негатив эҙләүселәрҙе, кеше бәхетһеҙлеген эфирға сығарып, аҡса эшләүсе шоумендарҙы бөтөнләй өнәмәйем һәм шундай һығымта яһайым: кеше ғүмере буйы үҫешә, һәм ниндәйҙер билдәле бер этапҡа етһә, кемдер үлә яҙып ҡараған ток-шоуҙар, ялғанға ҡоролған мәғлүмәт уны ҡыҙыҡһындырмай. Кеше тағы ла юғарыраҡ баҫҡысҡа менә.**

Быны нимәгә телгә алам, сөнки Башҡортостан турaһында гел негатив яҙған, лексиконы булдыра алған тиклем һүҙ сурыҡтан (рустар быны "словесный понос" ти) оппозицион сайттар иһә бысраҡ һаҙлыҡҡа батҡан да, һаман шунан сыға алмай интегә. Иманым камил, 4 миллиондан ашыу халҡы булған Башҡортостанда уларҙы уҡыған һәм теләктәшлек белдергән кешеләр йөҙҙән бер өлөштө лә тәшкил итмәйҙер. Сөнки республика үҫкән һайын уның халҡы ла, уларҙың аңы ла үҫә.

Тик торғанда ниңә ҡапыл һүҙ башланыммы? Тиҙҙән "УфаГубъ" сайты авторҙарының эше ҡабат судта ҡараласаҡ. Америкаинң Аризона штатында 2006 йылда теркәлгән был сайт 2009 йылда Өфө ҡалаһы Киров районы прокуратураһы талабы буйынса суд тарафынан рәсми рәүештә "экстремистик" тип билдәләнә. Ошо көндәрҙә иһә РФ Прокуратураһының Башҡортостан буйынса Тикшереү комитетының тикшереү идаралағы сайттың биш блоггерына ҡарата енәйәт эшен тикшереүҙе тамамланы. Гәйепләнеүселәр исемлегендә - 59 йәшлек эшҡыуар Николай Швецов (уны сайттың хужаһы, тиҙәр), 42 йәшлек Сергей Орлов менән Игорь Кучумов, 45 йәшлек Илдар Ғабдрафиҡов менән 24 йәшлек Константин Нестеров. Улар РФ Енәйәт кодексының биш статьяһы буйынса экстремистик берләшмә булдырыуҙа, асыҡтан-асыҡ экстремистик эшмәкәрлектә, граждандарға ҡаршы көс ҡулланыуға саҡырыуҙа, нәфрәт тыуҙырыуҙа һәм кәмһетеүҙә гәйепләнә.

Лингвистик экспертиза иһә "УфаГубъ"тағы мәҡәләләрҙе "үтә агрессив" һәм "милләт-ара дошманлыҡҡа һәм ҡапма-ҡаршылыҡҡа өндәүсе" тип билдәләгән.

2008 йылда асылып, 37 томға тулған енәйәт эше тиҙҙән судҡа тапшырылырға тейеш.

...Мәҡәлә яҙғанда күптән түгел генә уҡыған, хәтерәмә нығ һеңеп ҡалған бер фекерҙе сокоп сығарҙым: "Әгәр кем мендәр асыуланышһаң йәки уның үҙенә яҡшы мөнәсәбәттә булыуын теләһәң, ул кешенең фәрештәләренә уның яҡшы, һәйбәт булыуын, барлыҡ ыңғай сифаттарын күрһәтеп хат яҙ. Улар һиңә теләгәнеңде бирер". Юҡҡа ғына был хаҡта көләмәс тә һөйләмәйҙәр. Имеш, бер ир автобуста китеп бара һәм үҙ алдына уфтанып: "Тормош ауыр, ҡәйнәм - аждаһа, ҡатыным - ахмаҡ, улым - елғыуар..." - тип уйлай. Уның артында баҫып торған фәрештә аптырап иңбашын йыйыра ла: "Ярай, һорағаның бирәйек. Ҡәйнәһе -аждаһа, ҡатыны - ахмаҡ, улы - елғыуар..." - тип яҙып ҡуя... Үҙебеҙгә нимә көҫәйбеҙ - фәрештәләр шуны яҙып бара. Тимәк, "башҡорт, рус, татарҙар араһында милләт-ара нәфрәт һәм дошманлыҡ тыуҙырыуға йүнәлтелгән саҡырыуҙар яҙған" авторҙар үҙҙәренә ошо милләттәрҙең нәфрәтен ала, Башҡортостанды яманлап, үҙҙәренә гел яманлыҡ тарта ла инде...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Сәүек эт нисек кенә сәңкелдәмәһен, каруан уға ғына иғтибар итмәй. Башҡортостан да, ҙур каруан кеүек, алға табан бара. Ә күп милләтле республика халҡы, тимәк, был блоггерҙарҙың кимәлен үтеп, тағы ла бейегерәк баҫҡыста тора, араларынан ел үткәрмәй, татыулыҡты, именлекте, тотороҡлоҡто бергәләп һаҡлай. Шулай була күрһен артабан да!**

**З. ӘЙЛЕ.**

✓ *Кемдәндер нимәлер талап итерҙән алда, үҙеңдең булмышыңда тәртип булһа, башҡалар ҙа, һис шикһеҙ, һине, һинең йәшәгән урыныңды ихтирам һәм иғтибарҙан ташламаҫ.*



*ХУЖАҺЫ НИНДӘЙ...*

# СИТТӘР ҘӘ РӘХМӘТЛЕ,

## сөнки рәхмәт әйтер сәбәп бар

**Тәбиғәт беҙгә кәрәкле бар нәмәне биреүсе генә түгел. Тәбиғәт - тере йән. Бөйөк йән. Беҙгә уның асылын аңлау бик ауыр, сөнки ул шул тиклем күп төрлө һәм серле. Тәбиғәттең күңелдәрҙе дауалаусы тылсымы, үҙенең мауыҡтырғыс күркәмлеге бар.**

Аномаль эҫе йәйҙе ҡалала үткәргән кеше генә йәшеллеккә, сәскәгә төрөнгән урман-ҡырға сығыуҙың ҙур бәхет икәнлеген аңлай торғандыр. Августың йәнде ҡурыр эҫе бер көнөндә беҙ, "Киске Өфө"ләр, күмәкләшеп Күгәрсен районында урынлашҡан Мораҙым тарлауығына юл тоттоҡ. Командировкаларға, төрлө сәйәхәттәргә йыш йөрөгән кешеләр булараҡ, Башҡортостандың төрлө төбәгендәге тәбиғәт ҡомартҡылары торошон сағыштырып ҡарау мөмкинлеге бар. Ҡайҙалыр ҡот осҡос тәртипһеҙлек, быҫраҡлыҡ менән осрашаһың һәм кешеләрҙең битарафлығы, моңһоҙлоғо, яуызлығы арҡаһында тәбиғәтебеҙ кисергән ҡыйралышҡа әрнейһең, ә ҡайҙалыр бының киреһен күреп күңел кинәнә.

Мораҙым тарлауығы тәбиғәт паркында ла күңел кинәнде. Үҙ еренә хужаларса ҡараған, йәшәгән мөхитенә битараф булмаған кешеләр йәшәгәне һәм эшләгәне күренеп тора. Тәбиғәт паркы исемен алыуға бары ике йыл үтеүгә ҡарамаҫтан, күп эштәр башҡарылған. Туристарҙы үткәреү пунктынан башланған тәртип паркка ингәс тә һаҡлана. Бөтә тарлауыҡ буйлап сәйәхәтселәр өсөн махсуслаштырылған урындар әҙерләнгән. Теләгән урыныңды һайлап ал да урынлаш. Һәр бер урында айырым өҫтәл-ултырғыстар, сүп ташлау өсөн һауыттар, хатта кейемдәрҙе элеп киптерерлек бауҙар һуҙылған һәм ҡулъйыуғыстар ҡуйылған (Быйылғы ҡоролоҡ һәм кеше күп килеү сәбәпле, туҡталҡаларҙа үләндәр тапалып бөтөүенә, палаткаларыбыҙҙы ҡара ергә ҡуйырға тура килеүенә генә бер аҙ эс бошто бошоуға).

Бейек ҡаяның тап ҡаршыһына урынлаштыҡ та тирә-йүнде үҙләштерә башланыҡ. Бар ерҙә тәртип күҙгә ташлана, килгән кеше өсөн уңайлыҡтар тыуҙырылғас, тәбиғәткә ҡунаҡҡа килгәндәр ҙә үҙҙәрен тәртипле тота, тирә-яҡты ҡыйламай. Туҡталҡалар бер-береһенән йыраҡ та, шул уҡ ваҡытта әллә ни алыҫ та түгел. Күршеләрең күренмәһә лә, йыр-моңдары ишетелеп тора. Беҙҙең лагерҙа ғына түгел, ә бөтә тарлауыҡ буйлап башҡорт моңо, ҡурай тауышы ишетелеүе күңелдә йылылыҡ тойғоһо уятты.

Мораҙым тарлауығында үткән һәр көнөбөҙҙө файҙалы итеп үткәрергә тырыштыҡ. Ҡаяларға күтәрелдек, "Һыу сумған", "Боҙло" һәм "Иҫке Мораҙым" мәмерйәләрен йөрөп сыҡтыҡ. Ҡая бейеклегенән ҡараһаң, хатта донъя әйләнешенән туҡтаған кеүек. Ана, ҡая ситендә ғорур баҫып торған ҡарағай нисә миҙгелде алыштырған да, күпме кеше уға таянып баш әйләнерлек бейеклектән аҫҡа күҙ һалған... Әле ҡояшта ҡыҙынып ятҡан өнһөҙ таштар әллә нисәмә быуын тарихын һаҡлай, берсә дәһшәтле, берсә ҡыуаныслы ваҡиғаларға шаһит... "Һыу сумған" мәмерйәһенә сәйәхәтебеҙ иң күңеллеһе лә, иң ауыры ла булды. Мәмерйәгә сәйәхәт ҡылырға теләгән кеше бик күп. Барыһы ла мәмерйәгә ҙур энтузиазм менән төшөп китһә лә маршруттың аҙағынаса күбеһе барып етә алмай, ни тиһәң дә, 40 метр ер аҫтына төшөү уйын эш түгел. Беҙҙең сират еткәс, 150-шәр һум аҡса түләп, башыбыҙға фонарҙар ҡуйып, баҫҡыстар буйлап тыптырлашып мәмерйәгә төшөп киттек. Ундағы алты-туғыҙ градус һыуыҡ еңел генә кейенеп килгәндәрҙе тиҙ "уҡытты", ләкин өшөүгә лә бер кем дә бирешмәне. Мәмерйәләге экскурсиябыҙҙың ҡыҙыҡлы ла, фәһемле лә булыуында беҙҙе оҙатып йөрөүсе, Мораҡ башҡорт гимназияһының уҡыусыһы Айнур Хоҙайғоловтың өлөшө ҙур булды. Мәктәп уҡыусыһы ғына булыуға ҡарамаҫтан, уның мәғлүмәтле һәм һөйләгәнен кешене ялҡытмай еткерә алыуы маҡтауға лайыҡ. "Беренсе йыл эшләйем бында. Эшем бик оҡшай. Төрлө ерҙәрҙән күп кеше килә, аралашаһың. Былай көндәрҙә көнөнә икешәр, ә ял көндәрендә иһә өсәр-дүртәр тапҡыр мәмерйәгә алып төшәм кешеләрҙе. Уларға тыуған еремдең матурлығын күрһәтеүҙә, хозурлығын еткерә алыуымда минең дә өлөшөм булыуы менән бәхетлемен", - ти уңған егет.

Йәкшәмбе ял итеүселәр тағы ла күбәйҙе, бәләкәй генә арауыҡта ла 30-лап туристар лагерын һананыҡ. Кеше кинәнеп ял иткән, балаларҙың шат тауыштарына күмелгән Мораҙым тарлауығын ҡалдырып, был ҡунаҡсыл, төрлө-төрлө милләт кешеләрен берҙәй яҡын күреп ҡаршы алған йәмле һәм йәнле урынға рәхмәттәр әйтеп, юлға йыйындыҡ. Нимәһе ҡыуаныслы: әллә ҡайҙан, алыҫтарҙан килһәләр ҙә, сит кешеләрҙә "Был минең ерем түгел, ни эшләһәм дә була" тигән ҡарашты шәйләмәнек. Уларҙың барыһы ла был ергә рәхмәтле һәм мәрхәмәтле була белде. Ә бындай ҡараш хужаның үҙен нисек тотоуына бәйле икәнлегенә шик юҡ. Кемдәндер нимәлер талап итерҙән алда, үҙеңдең булмышыңда тәртип булһа, башҡалар ҙа, һис шикһеҙ, һине, һинең йәшәгән урыныңды ихтирам һәм иғтибарҙан ташламаҫ. Ошо фекерҙе тағы ла нығытты Мораҙымға сәйәхәтебеҙ.

**Гөлназ САФУАНОВА.**





*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӨЙӨК КӘРТӘЛӘРҺЕҘ...

## бөйөк эштәр була алмай

Кеше тормошо төньяҡтан көньяҡҡа аҡҡан йылға кеүек: йылғаны бит бер ни ҙә инеш башына кире бора алмай.

**(А. Ривароль).**

Тәүҙә Хоҙай ғазапланыу тигәнде таш ҡаяларға биргән, тегеһе быға сыҙай алмаған. Шунан ғазаптар кешегә бирергә ҡарар ителгән....

**(Әрмән халыҡ әйтеме).**

Илай-илай тыуабыҙ, зарлана-зарлана йәшәйбеҙ, барыһынан төңөлөп үлеп китәбеҙ.

**(Т. Фуллер).**

Цивилизация - күҙ йәштәре һәм ҡан менән һуғармай тороп, үҫмәй һәм сәскә атмай торған үҫемлек.

**(А. Граф).**

Алтын йүгән кейҙереүҙән генә ат яҡшыраҡ булып китмәй...

**(Сенека).**

Таң атҡанға ла, ҡояш байығанға ла шатланабыҙ, әммә улар беҙҙең ғүмер йомғағын һүтә икәне башыбыҙға ла инеп сыҡмай.

**(Боронғо һинд мәҡәле).**

Тәбиғәт беҙгә мәңгелек торлаҡ түгел, ә ваҡытлыса йәшәү урыны ғына бирә.

**(Цицерон).**

Насар тормошҡа өйрәнә генә башлаһаң... ул тағы ла насарлана ла ҡуя.

**(Б. Крутиер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡыҙ ялан буйлап уйланып китеп барған. Ул хатта ялан уртаһында бер дин кешеһенең уҡынып ултырғанын да күрмәгән һәм уның алдынан ғына ҡыйып үтеп киткән. Ҡыҙыҡай кире боролоп, тағы ла әлеге дин кешеһе янынан үтеп бара икән, ти. Дин кешеһе уға: "Ҡалай әҙәпһеҙ ҡыланаһың, ҡыҙыҡай, уҡынып ултырған кеше алдынан ҡыйып үтергә ярамай бит" , - тигән. Ҡыҙ туҡтап ғәфү үтенгән һәм шулай тип һораған:**

**- Ә һеҙ уҡыныу тигәндә ниҙе күҙ уңында тотаһығыҙ?**

**- Шуны ла белмәйһеңме әллә?! Уҡыныу - ул Аллаһы Тәғәлә тураһында уйлау, күңелеңдән Уға өндәшеү.**

**- Аллаһы Тәғәлә тураһында уйлап ултырғас, нисек һуң һеҙ мине күреп ҡалдығыҙ? Ошонан үтеп барғанда мин һөйгән егетем тураһында уйлай инем, һәм һеҙҙе күрмәнем дә..."**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 3308